# Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

30 ИЮЛЬ - 5 АВГУСТ (МАЙАЙ - УРАҒАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№31 (449)


*"Әҙәм балаһының башҡарған бөтөн хәйерле эштәре һәм ҡылған ғибәҙәте үҙе өсөндөр. Тик ураҙа улай түгел. Сөнки ураҙа - бары тик Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн башҡарылған ғибәҙәттер. Ураҙа - бәндәнең ҡалҡаны. Ураҙа ваҡытында берегеҙ ҙә насар һүҙ һөйләмәһен һәм ҡысҡырып-аҡырып йөрөмәһен. Әгәр берәү һиңә насар һүҙ әйтергә йәки һинең менән ыҙғышырға теләһә, уға "мин ураҙалы" тип әйт".*

*(Хәҙистәрҙән).*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Һимеҙлек...**

ҡуйға ғына килешә



3

**Ил инәһенең рухы...**

рәнйемәйме икән беҙҙең битарафлыҡҡа?



6-7

**Һәр кемгә яҡшы булып булмай,**



8-9 был тауарын һатырға тырышҡан сауҙагәргә генә килешә

**Рамаҙан - сабырлыҡ айы,**



12-13 сабырҙың сауабы иһә йәннәттер

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡорт теле буйынса дәреслектәр ниндәй булырға тейеш, тип күҙаллайһығыҙ? Уларҙың әле ҡулланылышта булғандары һеҙҙе ҡәнәғәтләндерәме?



***Рәсимә УРАҠСИНА, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты, балалар яҙыусыһы:*** 1974 йылдан алып уҡытыу эшендәмен, шуға күрә дәреслектәр хаҡында үҙ фекеремде әйтергә хоҡуғым барҙыр, тием. Иң тәүҙә шуға иғтибарҙы йүнәлткем килә: хәҙерге дәреслектәрҙә балаларҙа илһөйәрлек, рух тәрбиәләү өсөн материал бик күп. Анализ, күнегеүҙәр өсөн һайлап алынған әҙәби текстар, шиғырҙар уҡытыусыға ярҙамға килә, улар уңышлы һайлап алынған. Ә шулай ҙа дәреслек төҙөүселәр тормоштан алыҫ тора, тип әйтер инем, сөнки уҡыу әсбаптарын төҙөп, туплап, тикшертеп, нәшриәттән килтереп сығарғансы, бер-нисә йыл үтеп тә китә. Заман бик тиҙ үҙгәрә хәҙер, икенсе быуын килә уҡырға - шулай итеп, дәреслек материалдары иҫкерә. Яңы быуынды беҙ иҫке миҫалдар нигеҙендә уҡытырға мәжбүр булабыҙ.

Был, әлбиттә, дәреслек төҙөүсе авторҙан ғына ла тормайҙыр. Һәр хәлдә, оперативлыҡ, заман һулышын тойоп эшләү кәрәктер, тим. Унан һуң, башҡорт телен уҡытҡанда балаларҙың был өлкәлә белем кимәлен, мөмкинлеген, мөхит үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып эш итеү кәрәк.

**Мәҫәлән, ауыл балаларын да, ҡала мәктәптәрендә лә бер үк дәреслек буйынса уҡытып булмай, минеңсә. Улар өсөн айырым-айырым дәреслектәр сығарылырға тейеш.**

Башҡорт теле дәреслектәренең 70 проценты тип әйтерлек ҡағиҙәләр ятлау, грамматик тикшереүҙәр менән үтә, шулай булмаған хәлдә, уҡытыусылар раҫлауынса, методистар дәреслек программаһын үҙләштереүҙе талап итеп, бәйләнә башлайҙар. Әлбиттә, дәреслектәргә таянырға кәрәк, ләкин ундай ҡағиҙәләрҙе һүҙмә-һүҙ ятлатып, балаларҙы тел дәрестәренән биҙҙерергә кәрәкмәй. Шуға күрә мин гел ҡабатлайым:

**балаларҙы башҡорт теленә өйрәтергә генә түгел, ә үҙенә башҡортса уҡытырға өйрәнергә кәрәк.**

Бында эш дәреслектәрҙә генә лә тормай, күп нәмә уҡытыусы шәхесенә бәйле икәнен дә онотторға ярамай. Әйткәндәй, быйыл "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2011" конкурсы барышында илленән ашыу дәрес ҡарарға тура килгәйне. Бына шунда күренде лә инде кемдең ниндәй уҡытыусы икәне. Берәүҙәре фәҡәт жюри өсөн генә әҙерләнгән дәресен күрһәтте, икенселәре фәҡәт баланы күҙҙә тотоп, ысын мәғәнәһендә ижади оҫталыҡ дәрестәре ижад итте. Өфө ҡалаһы 35-се урта мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Эльза Толомбаеваға Гран-при бик лайыҡлы бирелде, мин уны бөгөнгө көн уҡытыусыһына ҡуйылған талаптарға яуап биреүсе алдынғы ҡарашлы шәхес тип әйтер инем. Ул дәреслектәрҙе файҙаланыу менән бер рәттән, өҫтәмә техник сараларҙы уңышлы ҡулланды. Һөҙөмтәлә балалар дәрестә ихлас ҡатнашты. Уҡытыусының уларҙа башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу уята алғанлығы күренде. Ғөмүмән, конкурстарҙа еңеүсе булмаһа ла үҙ эшенә ижади ҡараған алдынғы уҡытыусыларҙың эш тәжрибәләрен, оҫталыҡ дәрестәрен бергә туплап, дискыларҙа сығарыу һәм күрһәтеү уҡытыусыларға бик файҙалы методик ярҙам булыр ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### ҺҮҘ -УҠЫТЫУСЫҒА

# БЕҘҘЕҢ МӘКТӘПТӘ...

## бар шундай шәп егет

**"Рәсәй үҙенең уҡытыусылары менән данлы, ә данды уларға уҡыусылары килтерә" - ошо һүҙҙәр күп кенә мәктәптәрҙәге күргәҙмә-таҡталарҙа сағылыш таба. Был дөрөҫ тә, сөнки мәктәп уҡытыусылар һәм уҡыусылар бер-береһен аңлай, бер-береһен данлай алһа ғына үҙ тәғәйенләнешенә яуап бирә ала торған изге урын бит. Шуға ла был лозунг белем усағының асылына тап килә.**



Мин 16 йыл инде рус мәктәбендә төрлө милләт балаларына башҡорт телен өйрәтәм. Беҙҙең 35-се мәктәптә 20 милләт вәкиле белем ала. Улар араһында башҡорт телен ҙур теләк менән өйрәнеп, яҡшы ғына һөйләшкәндәре, телде аңлаһалар ҙа, ғәмәлдә ҡуллана алмағандары (гел генә имтихан мәлендә бер уҡыусымдың комиссияға (иң ҡыҙығы - саф башҡортса) әйткәне иҫкә төшә: "Мин бит эт кеүек, бөтәһен дә аңлайым, әйтә генә алмайым!"), башҡорт телен һыу кеүек эскәндәре бар. Һуңғылары, әлбиттә, үҙебеҙҙең башҡорт балалары. Ләкин башҡортса ғына әңгәмә ҡорорға тура килгәндә балаларҙың барыһы ла ҡыҙыҡһынып тыңлай, әңгәмәгә ҡушылырға тырыша.

Ғүмеремдә бер нисә тапҡыр: "Уҡытыусының яратҡан уҡыусыһы булырға тейешме?"- тигән һорауҙы ишеткәнем булды. Яратҡан уҡыусы тип айырып ҡарау дөрөҫ булмаҫ, тим, балаларҙы яратҡан өсөн дә мәктәптә эшләйбеҙ бит. Әммә күңеленә яҡынырaҡ, һиңә һәр саҡ терәк һәм ярҙамсы булырға әҙер балалар, ысынлап та, бар. Тап шундай уҡыусыларымдың берәүһе хаҡында һөйләгем килә.

**(Дауамы 5-се биттә).**

✓ ***Беҙ бөгөн башҡорт телендә дөрөҫ итеп һөйләшергә, яҙырға түгел, ә уның грамматикаһын, тел белеме теорияһын уҡытабыҙ. Ә бит бының фән менән махсус шөғөлләнеүселәрҙән тыш башҡалар өсөн бер ниндәй әһәмиәте юҡ.***



## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## АҠСА ЙӨҘӨН ҮҘГӘРТӘ

**Үҙәк банк 500 һәм 5000 һумлыҡ банкноттарҙың дизайнын үҙгәртте. Яңы аҡсалар ошо йылдың аҙаҡтарына тиклем әйләнешкә инәсәк. Шул уҡ ваҡытта илдең аҡса һарайҙары 2012 йылдың ғинуарынан бер һәм биш тинлек монеталар сығарыуҙы туҡтатасаҡ.**

Үҙәк банкта әйтеүҙәренсә, яңы аҡсаларҙы яһалма юл менән эшләргә маташыуҙарға юл ябыласаҡ, йәғни ошо банкноттарҙың ялғанын эшләү ҡатмарлаштырыла. Сөнки ведомство статистикаһы буйынса, ялған аҡса эшләүселәр биш меңлек банкноттарҙы яһауҙа бик оҫтарғайны. Үҙәк банк мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 2010 йылда 3697, ә быйылғы биш айҙа ғына ла 3029 яһалма аҡса әйләнештән алынды.

Яңы дизайнды Гознак белгестәре эшләне. Уларҙың тырышлығы менән биш меңлек аҡсала 18 яңы һаҡлаусы ысул булдырылды, ә биш йөҙлөктә улар бөтәһе 11.

Рәсәйлеләр аҡсаларҙың ысынын ялғанынан бер нисә билдә буйынса айыра ала. Мәҫәлән, биш меңлекте бер яҡҡараҡ ауыштырып ҡараһаң, гербтағы һыҙат аҫҡа-өҫкә күсеп йөрөй. Тар ғына ҡара һыҙатта урынлашҡан 5000 һаны ла урынын үҙгәртә ала. Банкноттың икенсе яғы әллә ни үҙгәртелмәне.

500 һумлыҡ аҡсаға ярайһы ғына үҙгәрештәр индерелде: хәҙер уның кире яғында Соловецкий монастырҙең хәҙерге күренеше һүрәтләнә. Бынан тыш, уның төҫө һәм дизайны үҙгәртелде. Мәҫәлән, күптән түгел яңыртылған мең тәңкәлектәге кеүек, уға ла йылтыр еп тартылды. Вертикаль һыҙаттағы 500 һаны аҡсаны ауыштырғанда шулай уҡ күсеп йөрөй. Ошо номиналдарҙың әле әйләнештә йөрөгән иҫкеләре өсөн хафаланырға кәрәкмәй, улар әйләнештә ҡала.

## БЕР ТИНҺЕҘ ҠАЛАСАҠБЫҘ

2012 йылдан Үҙәк банк бер һәм биш тинлек монеталар сығарыуҙы туҡтатасаҡ, сөнки улар өсөн киткән сығымдар байтаҡҡа барып баҫа: бер тинлек монета - 47, биш тинлеге 69 һумға төшә. Эксперттар белдереүенсә, был сараның кире яҡтары килеп сығыуы ла ихтимал икән. Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау йәмғиәте адвокаты А. Заһитов әйтеүенсә, "тәүҙә бер тинлекте, аҙаҡ ун тинлекте бөтөрөрҙәр, унан инде девальвацияға ла күп ҡалмаҫ". Уның ҡарауы, иҡтисадсылар бик борсолмай. Ваҡ аҡсалар сығарыуҙың кәрәге юҡ, ти улар. Бер тингә хәҙер бер ни ҙә һатып алып булмай. Тик бына аҙыҡ-түлек магазиндарында тауарҙарға аҙағы 99-ға бөткән һандар ҡуйырға яраталар, ләкин уны бер тингә арттырыу бер кем өсөн дә һиҙелерлек булмаясаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Башҡорт теле буйынса дәреслектәр ниндәй булырға тейеш, тип күҙаллайһығыҙ? Уларҙың әле ҡулланылышта булғандары һеҙҙе ҡәнәғәтләндерәме?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Вәкил ХАЖИН, педагогия фәндәре кандидаты:*** Тел - беҙгә Хоҙай биргән иң ҙур, иң ҡәҙерле бүләк ул. Халҡыбыҙ шуға ла уны һөйөп, яратып, меңәр йылдар буйы күҙ ҡараһындай һаҡлап, һәр һүҙен юғалтмаҫҡа тырышҡан. Телебеҙҙең матурлығын, байлығын һаҡлау, уның бәҫен ебәрмәү бөгөн фәҡәт үҙебеҙҙән тора. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, был иң беренсе сиратта мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытыу мәсьәләһенә, тағы ла дөрөҫөрәге, уның сифатына ҡағыла. Мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытыуҙа бөгөн, үкенескә ҡаршы, проблемалар килеп сығып ҡына тора. Иң төп мәсьәлә, минеңсә, шул: беҙ бөгөн башҡорт телендә дөрөҫ итеп һөйләшергә, яҙырға түгел, ә уның грамматикаһын, тел белеме теорияһын уҡытабыҙ. Ә бит бының фән менән махсус шөғөлләнеүселәрҙән тыш башҡалар өсөн бер ниндәй әһәмиәте юҡ.

**Беҙҙең уҡытыусылар һаман да берәүгә лә, хатта үҙҙәренә лә кәрәк булмаған эйә, хәбәр, тултырыусыларҙы өйрәтә. Бының менән улар башҡорт телен уҡытыуға ҡаршы булған бәғзе берәүҙәргә ҡарағанда ла милләткә зыянды күберәк эшләй.**

Былай итеп бит беҙ балаларҙы туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәренән биҙҙерәбеҙ генә. Күп нәмә, әлбиттә, уҡытыусыға бәйле, ләкин сифатлы, йөкмәткеле, ылыҡтырғыс итеп төҙөлгән дәреслектәрһеҙ ул да әллә ни эшләй алмаясаҡ. Башҡорт теле дәреслектәрендә халҡыбыҙ тормошон һүрәтләгән, мәҙәниәтебеҙ байлығы, телебеҙҙең образлылығы ярылып ятҡан материалдар кәрәк. Балалар дәреслектәр ярҙамында образлы фекерләргә, уйларға өйрәнһен. Ахыр сиктә, дәреслектәр бала күңеленә уй, рух һала торған әсбап та булһын ине. Грамматикаға әллә ни баҫым яһамай, балаларға телде тойорға, һиҙергә, уның ярҙамында аралашырға өйрәтһәк, күпкә файҙалыраҡ булыр ине. Кәрәкмәгән ҡағиҙәләр ятлатып, уҡыусыларҙы телдән биҙҙермәйек.

***Гөлсәсәк ҒӘЗИЗУЛЛИНА, Өфө ҡалаһы М. Искужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, БР мәғариф отличнигы:*** Заманабыҙ күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә үҙгәреп тора, шулай булғас, тәбиғи, беҙ балаларҙы кисәге материал нигеҙендә уҡыта алмайбыҙ. Яңы дәреслектәр, яңы программалар һәм, ниһайәт, уҡытыуға яңы мөнәсәбәт, ижади ҡараш кәрәк.

**Әле ҡулланылышта булған башҡорт теле дәреслектәре ҡасандыр өлкән быуын кешеләре булған ғалимдар тарафынан башҡортса һәйбәт белгән балалар контингентын күҙҙә тотоп эшләнгән. Үкенескә ҡаршы, пионер, комсомол һүҙҙәрен генә алып ташлап, һаман да шул иҫке әсбаптар дәреслектәргә нигеҙ булып хеҙмәт итә, схема үҙгәрмәй. Ә бит хәҙер ауыл һәм ҡала мәктәптәре өсөн - айырым, рус мәктәптәре өсөн үҙенә башҡа төрлө дәреслек талап ителә.**

Өҫтәүенә, дәреслек материалдары балалар тарафынан еңел үҙләштерелә торған булһа ине. Балалар, үҫмерҙәр тормошон сағылдырған әҫәрҙәр, йырҙар, мәҡәл һәм йомаҡтар, башватҡыстар, сағыу һүрәттәр, билдәле картиналарҙан репродукциялар һәм башҡа йәнләндереүсе саралар урын алырға тейештер, тип уйлайым. Мәҫәлән Зәйнәб Биишеваның балалар бик ятатып уҡыған "Дуҫ булайыҡ", Мостай Кәримдең "Өс таған", "Беҙҙең өйҙөң йәме" кеүек әҫәрҙәренән өҙөктәр, улар буйынса викториналар үткәреү, иншалар яҙыу, ошо әҫәрҙәрҙе сәхнәләштереү кеүек биремдәр күберәк булһа, дәрестәр ҙә йәнлерәк, ҡыҙыҡлыраҡ үтеүенә үҙ тәжрибәмдән сығып инандым. Башҡорт теле кабинеттарын йыһазландырыу мәсьәләһе айырым һөйләшеү талап итә. Беҙгә хәҙер кабинеттарҙы заманса мәғлүмәт технологиялары менән тәьмин итеү тураһында уйларға ваҡыт.

Тел һәм әҙәбиәт уҡытыу буйынса үткәрелеп торған кәңәшмәләрҙә ниндәйҙер тәҡдимдәр әйтә башлаһаң, улайһа, яҙығыҙ, төҙөгөҙ үҙегеҙ дәреслектәр, тиҙәр. Ә ниңә төҙөмәҫкә, ти? Дәрестәре оҫталыҡ өлгөһөнә әүерелгән һәләтле тел уҡытыусылары күп беҙҙә. Әгәр был эш тейешле кимәлдә финансланһа, бер төркөм уҡытыусылар йыйылышып, кәңәшләшеп, төҙөп тә ҡуйырға була ул дәреслектәрҙе! Һәр уҡытыусының үҙе төҙөп алған әҙер программаһы, методикаһы, материалдары бар. Улар фәнни, академик йүнәлештә фекерләүсе һәм мәктәп, балалар тормошонан алыҫ торған ғалимдарҙыҡына ҡарағанда отошлораҡ икәне иҫбатлана килә хәҙер.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"

**Мөхтәрәм йәмәғәт! Әйҙәгеҙ, фекер йөрөтәйек әле: мәғлүмәт сығанағын ниндәй маҡсат менән файҙалана кеше?**

● Мәғлүмәт сығанаҡтары, беренсенән, бөгөнгө ябай булмаған заманда баҙап ҡалған кешеләрҙең "Артабан ни эшләргә?" тигән һорауына, ғөмүмән, донъяла үҙ урынын, үҙ эшен, үҙ ашын, үҙ маҡсатын, үҙ шөғөлөн табырға ярҙам итер мең төрлө башҡа һорауҙарына яуап бирергә тейеш.

Икенсенән, теге йәки был һорауына яуап алһын, ул яуапты эшкә екһен өсөн кешенең иң тәүҙә донъяға үҙ ҡарашы, аңлауы булырға тейеш. Тимәк, мәғлүмәт сығанағының бурысы - уның аңын уятыу, аңлатыу, маҡсат ҡуйырға, уйландырырға өйрәтеү.

"Киске Өфө" аҙналыҡ баҫмаһы тап ошо бурысты йөкмәгән иңенә. Әйҙәгеҙ, уны уҡып, бергәләп уйланайыҡ, донъяуи һорауҙарға бергәләп яуап эҙләйек, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, аҡыл тирәйек, кәңәш-төңәш итәйек. Рухланайыҡ, сәмләнәйек.

● Әйткәндәй, кемдәр быйылғы йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгән, һәр айҙың 17-һенә тиклем яҙылһағыҙ, гәзитте киләһе айҙан алдыра башлаясаҡһығыҙ. 31 августа тиклем 2012 йылдың беренсе ярты йыллығы өсөн быйылғы хаҡтар менән (**50665** индекслыһына **340 һум 92 тин**, **50673** индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тин**) ваҡытынан алда матбуғат баҫмаларына яҙылыу башлана, тигән иғланыбыҙҙы ла иҫкә алып ҡуйығыҙ. Июлдә гәзитебеҙгә яҙылып, шулай уҡ 2012 йыл өсөн дә яҙылып ҡуйып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәргә бүләккә 5 **"Ҡөрьән-Кәрим"** һәм 20 **"Дини календарь"** (2012 йыл өсөн) әҙерләп ҡуйғанбыҙ.

● Кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов аҙ ҡатлы торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереү мәсьәләләренә арналған кәңәшмәлә ҡатнашты. Ул РФ Хөкүмәте башлығы Владимир Путин рәйеслегендә Мәскәү өлкәһе Яңы Ступино ауылында үтте. Кәңәшмәлә Федерация субъекттарының торлаҡ төҙөлөшө программаларын дәртләндереү тураһында һүҙ барҙы.Киләһе биш йылда ошо маҡсаттарға яҡынса 25 млрд һум аҡса йүнәлтеләсәге тураһында белдерелде. Владимир Путин артыҡ административ кәртәләрҙе алып ташларға, шул иҫәптән төҙөлөшкә рөхсәт биргәндә проект документацияһын яраштырыу ваҡытын кәметергә ҡушты.

✓БР Президенты Өфө ҡалаһында "Һөт иле- 2011" Бөтә Рәсәй фестивален үткәреү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Фестиваль сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау, һөт аҙыҡтарын ҡулланыу мәҙәниәтен тергеҙеү һәм ҡулланыусылар баҙарын сифатлы һөт продукцияһы менән байытыу маҡсатында уҙғарыла. Сара 3 сентябрҙә уҙасаҡ.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов Көньяҡ Кореянан килгән журналистар менән осрашты. Көньяҡ Корея журналистары республикала тәүге тапҡыр. Улар беҙҙең республика тураһында күберәк белергә һәм был мәғлүмәтте үҙ илендәгеләргә еткерергә теләүен белдерҙе. Сәфәр барышында улар Башҡортостандың иҫтәлекле урындарында булды, бер нисә сәнәғәт предприятиеһы менән танышты.

✓Халыҡ-ара шашка буйынса донъя кубогы тамамланды. Ете көн буйы барған көсөргәнешле ярышта планетаның төрлө төбәктәренән килгән көслө спортсылар ҡатнашты. Ирҙәр араһында беренсе урынды Рәсәйҙең билдәле спортсыһы Александр Гетманский яуланы. Ә гүзәл заттар араһынан беренсе урынға Латвиянан Зоя Голубева лайыҡ булды. Икенсе урында - Голландия спортсыһы Нина Хукман, өсөнсө урында -Башҡортостандан Елена Мильшина. Күп тапҡырҙар донъя чемпионы булған яҡташыбыҙ Тамара Танһыҡҡужина дүртенсе урынға төштө.

✓Ғафури районының Сәйетбаба ауылында республикала тәүге тапҡыр Бал байрамы ойошторолдо. Сарала республиканың тарихи-мәҙәни үҙәктәре етәкселәре, Америка, Германия, Ҡытай һәм Мәскәүҙән ҡунаҡтар ҡатнашты. Сәйетбаба ауыл биләмәһенә ҡараған ете ауылда бөгөн 300-ләп ғаилә умартасылыҡ менән шөғөлләнә. Уларҙа барлығы 4 мең баш умарта иҫәпләнә.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ҺИМЕҘЛЕК...

## ҡуйға ғына килешә

**Был әйтем йәшәйеш өсөн кәрәкле һәм мөһим булған ризыҡ ейеүгә, аҙыҡ-түлек ҡулланыуға бәйле әйтелһә лә, уның нигеҙендә милли идеяға торорлоҡ фекер ҙә ята. Шул хаҡта уйланайыҡ.**

Унынсыны тамамлағандан һуң, институтҡа уҡырға ингәнгә тиклем, тыуған колхозымда чабан булып эшләргә лә тура килде. Эштең ояты юҡ, чабан да булдым, һыйыр ҙа көттөм, кочегар, комбайнсы ярҙамсыһы, силос сапҡанда "тапалайщик" та булып эшләнем. Бригадала ҡыҙыу бесән, ураҡ эштәре башланыуға ашнаҡсыларҙың атҡыуары булған олатай беҙҙең һарыҡ көтөүенән һуйыр өсөн көн аша тиерлек һарыҡ килеп алып йөрөнө. Әлбиттә, был осраҡта, яҙылмаған ҡанун буйынса, һарыкты тотоу, аяғын бәйләргә ярҙамлашыу, арбаға тейәп ебәреү эше минә төшә. Ҡайһы ваҡыт һуйышып бирергә лә тура килә. Ниндәй һарыкты тоторға кәрәклекте ул саҡта атҡыуар олатай үҙе билдәләй. "Ана, анауһын, һырты мөйкөлдәп йөрөгәненән тот", тип өйрәтә ул. Ҡайһы саҡ яңылыш икенсе бер һарыкты эләктерһәм: "Кит, ебәр уны, эшкинмәгән ырыҡтаны, ҡаҡ һөйәкте, арҡаһы дығырлап тора бит. Мин һинә ана тегеһен тот, тип әйттем бит" - тип битәрләп алырға ла өлгөрә олатай. Һәр хәлдә, мин уның әйткәненән сығып, "һырты мөйкөлдәп" торған ҡуйҙы - яҡшы, ә "арҡаһы дығырлап" торғанын насар ҡуй икән тип билдәләнем дә инде. Мал өсөн һимеҙлек сифаты, һәр хәлдә, яҡшы сифат. Үкенескә ҡаршы, ул саҡтарҙа ололарҙың ауыҙынан кешеләр хаҡында шундайыраҡ та һүҙҙәр ишеткеләй инем:

-Фәлән кеше санаторийҙа бер ай ял итеп ҡайтҡан. Үҙенә ял итеү шутиклем килешкән, һатта инде һимереп, матурайып киткән, үҙен танымай ҙа торҙом...

-Фәлән егет әрменән бер башҡа үҫеп, ике тапҡырға йыуанайып, һимереп, матурайып ҡайтҡан. Инде үҙенә килешкән бушлай һөкөмәттекен режим менән ашап ятыу...

-Фәлән кеше Өфөлә балниста ятып сыҡҡан. Һатта инде ҫылыу-у-у-у булып киткән үҙе. Ниндәй ябыҡ ҡына ине. Хәҙер ике эйәге, ҡорһағы бар, дастуйный ир булып ҡайтҡан...

Ул саҡта, нисектер, һимереүҙе матурайыу тип аңланыҡ, булһа кәрәк. Тик, ниңәлер, шул саҡтан алып ҡайҙалыр ял итеү, бушлай ашау, балниста ятыу килешеп, ике эйәкле, ҡорһаҡлы, шыма йылтыр битле булып ҡайтҡандар хәҙерге ваҡытта донъялыҡта юҡ инде. Уларҙың күбеһе ҡан баҫымы, инсульт, инфаркт һәм башҡа артыҡ ауырлыҡҡа бәйле ауырыуҙар менән үлеп ҡалды. Ә бына ул саҡта ла ас яңаҡлы, ҡатҡыл сандыр кәүҙәле булған ағайҙар һәм олатайҙар әле булһын йәшәп ята. Улар бынан 30-40 йыл элек нисек булһалар, һаман да шул килеш һымаҡтар. Мин әле булһын, бер нәмәне аңлай алмайым: ни өсөн малға ҡарата бирелгән баһа кешеләргә лә ҡүсерелде икән? Ә бит ысынында өйрәк кеүек һимереп ҡайтҡан кешегә икенсерәк баһа бирелергә тейеш ине бит. Әйтәйек, "Был кеше самаһыҙ ныҡ һимергән, ауырыйҙыр ул", тип.



Ә бит элек-электән ошо хәлдәрҙе тәрән аңлаған ата-олатайҙарыбыҙ "Һимеҙлек ҡуйға ғына килешә", тигән. Һимереүҙең, артыҡ кәүҙә ауырлығы туплауҙың сәбәптәре нимәлә һуң? Ғөмүмән, диетологтар билдәләүенсә, дөрөҫ туҡланмау ғына һимереүҙең төп сәбәбе була аламы икән? Ул сағында күпме ашаһа ла, нисек туҡланһа ла ас яңаҡлы, еңел кәүҙәле булғандарҙы (ундайҙарҙы "күпме ашаһа ла, уға йоҡмай" тип атайҙар) нисек итеп атарға һуң?

Был мәсьәләгә мосолмандар ураҙа тотасаҡ изге Рамаҙан айы алдынан ризыҡ ҡабул итеүҙән тыйылыу күҙлегенән ҡарайыҡ. Ураҙа ваҡытында күп кенә ғәмәлдәрҙе башҡарыу, шул иҫәптән, таң һарыһынан ҡояш байығансы ризыҡланыу, һыу эсеү тыйыла. Хәҙер инде ошондай "тыйылыу"ға рухи күҙлектән түгел, психо-физиологик күҙлектән баһа биреп ҡарайыҡ.

Институтта бергә уҡыған бер ҡыҙ асыуланған саҡта ныҡ һәм күп итеп ашай торғайны. Беҙ ҡыҙыҡ өсөн уны юрый асыуландырып, алдына 4-5 кешегә етерлек ризыҡ ҡуйып, үҙебеҙ уны ҡабул итмәйенсә, ситтән генә күҙәтә инек. Һөҙөмтә ғәжәйеп килеп сыға ине, йәғни ҡыҙҙың алдына ҡуйылған ризыҡ тиҙ арала юҡҡа сыға. Беҙ уны тағы ла юрый ғына асыуландырабыҙ ҙа, тағы ла ризыҡ өҫтәйбеҙ, һөҙөмтә шундай уҡ килеп сыға. Шул саҡта беҙ "Ас кешенең асыуы яман" тигән әйтемдең "Асыулы кешенең асығыуы яман" тигән варианты барлығын да иҫбат иттек. Шул уҡ ваҡытта ул ҡыҙ кәйефе шәп саҡта ашамаһа ла туҡ ине.

Хәҙер инде ошо ҡыҙҙың хәлетән ураҙа шартына күсереп ҡарайыҡ. Тимәк, ураҙа тотҡан кеше хатта иң оҙон көндәрҙә лә ризыҡтан тыйылыр өсөн асыуланмаҫҡа, йәғни кешеләр һәм донъя менән мөнәсәбәтен дөрөҫ һәм гармониялы итеп ҡора белергә өйрәнергә бурыслы. Был үҙенә күрә кешене "ашҡаҙан менән тәрбиәләү" механизмы кеүек. Әйтәйек, мин ураҙа тотам икән, тимәк, ураҙамды боҙмаҫ, йәғни асығыу арҡаһында ризыҡҡа тотонмаҫ өсөн үҙемең тойғоларымды контролдә тоторға өйрәнергә бурыслы. Артыҡ ризыҡ ҡабул итеп һимереүҙең нигеҙендә кешеләр һәм донъя менән дөрөҫ мөнәсәбәт ҡора белмәү ҙә ята, ә ундай мөнәсәбәттең нигеҙҙәре дини ҡанундарға һалынған. Дин әһелдәре, зинһар өсөн, мине дөрөҫ аңлаһын: мин бында мәсьәләгә психо-физиологик йәһәттән генә ҡарайым.

Юғарыла килтерелгән дәлилдәрҙән шундай һығымталар яһарға була:

-һимереү йә ябығыу кешенең дөрөҫ йә яңылыш туҡланыуына, һаулыҡ торошона ғына бәйле түгел, ул кешенең эске донъяһына, күңел торошона бәйле;

-донъя һәм кешеләр менән дөрөҫ мөнәсәбәт ҡора белеү кешенең физик торошонда, һаулығында сағылыш таба;

-кешене файҙаланылмаған артыҡ энергия һимереүгә алып килә, шуға күрә дөрөҫ һәм маҡсатлы кешенең эйәге лә икәү түгел, ҡорһағы ла булмай;

-һәр ил гражданының, милләт вәкиленең дөрөҫ һәм маҡсатлы йәшәй алыуы уның илен дә, милләтен дә күркәм итә...

Күреүегеҙсә, артыҡ һимереүгә генә бәйләп бына ниндәй һығымталар яһарға була. Ысынлап та, һимеҙлек ҡуйға ғына килешһен ул. Һүҙемде "Урал батыр" эпосынан бер өҙөк менән тамамлағым килә. Урал батыр янына йыйылған йәнлектәргә, ҡош-ҡорттарға :

*Үлем тигән яуыҙдың*
*Төрөн һайлап беләйек,*
*Көслө көсһеҙҙе йығган*
*Йоланы беҙ өҙәйек.*
*Арабыҙҙан, һанаһаҡ,*
*Һәр нөгәрҙе ҡараһаҡ:*
*Ҡан да эсмәй, ит еймәй,*
*Һис бәреү йәшен ҡоймай,*
*Ҡайныһы тамыр ашап,*
*Ҡайныһы үлән емшәп*
*Һаман ғүмер иткәнен,*
*Йыртҡыстарға ем өсөн*
*Балаһын үрсеткәнен*
*Барығыҙ ҙа белегеҙ.*
*Аларға үлем ят түгел,*
*Беҙ уйлаған йән түгел,*
*Ҡан һыуырған, ит ейгән*
*Береһе лә дуҫ түгел...*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

---

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ТОТОШ ИЛ - БӘХЕТҺЕҘМЕ?

Тотош халыҡ үҙен ниндәй осраҡта бик бәхетһеҙ итеп тоя? Әлбиттә, ул йәшәгән йәмғиәттә социаль ғәҙелһеҙлек хөкөм һөргәндә. Донъя кимәлендә бәхетһеҙлек төшөнсәһенең социаль ғәҙелһеҙлек менән бәйлелеге буйынса бик ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәргәндәр. Йөҙләп ил араһында Рәсәй бәхетһеҙлек күрһәткесе буйынса иң аҙаҡҡы урында булып сыҡҡан. Ә халҡы үҙен иң бәхетле итеп тойған ил - ул Дания. Ул нисек билдәләнгән? Данияла һәр кем үҙен тиңдәр араһында тиң итеп тоя ала. Әлбиттә, был илдә лә бар байҙар, вазифалы түрәләр. Әммә улар үҙҙәренең байлығын йә вазифаһын башҡаларҙан айырылып торор билдә итеп күтәрмәй. Министрҙар, мәҫәлән, йәйәүләп йә велосипедта эшкә йөрөй. Машиналары булмаған өсөн түгел, әлбиттә. Был илдә һәр граждан үҙен башҡалар менән тиң тойһон өсөн билдәле бер этика, тәртип, мәҙәнилек хөкөм һөрә...

Беҙҙең министрҙар һәм депутаттар эшкә йәйәү йөрөһә, беҙҙең халыҡ та бәхетенән күккә ашыр инеме икән?..

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Сентябрҙән башлап республикала 14 йәше тулған үҫмерҙәрҙе медицина тикшереүе башланасаҡ. Диспансерлаштырыу барышында уларҙы бөтә белгестәр ҙә ҡараясаҡ, лаборатор һәм функциональ тикшереүҙәр үткәреләсәк. Был сара күпселек сирҙәрҙе ваҡытында иҫкәртеү, дауалау, үҫмерҙәрҙең һаулығын нығытыуҙы һөҙөмтәлерәк итеүгә йүнәлтелгән.

✓Башҡортостанда федераль милектә булған ерҙәрҙең бер өлөшө торлаҡ төҙөү өсөн биреләсәк. Өфөнән 100 саҡрым алыҫлыҡтағы Стәрлетамаҡ, Ишембай кеүек ҙур ҡалалар эргәһендәге ерҙәргә ревизия үткәреләсәк.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Вилдановты Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп тәғәйенләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Рөстәм Ильяс улы Өфөлә тыуып үҫкән, Өфө авиация техник университетын тамамлаған.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтҡә ихаталарҙы һәм йорт яны территорияларын төҙөкләндереү буйынса республика маҡсатлы программаһы эшләргә ҡушты. Программа республиканың бәләкәй һәм уртаса ҡалалары адреслы ярҙам күрһәтеүгә иҫәпләнгән. Быйыл был программаны тормошҡа ашырыуға республика бюджетынан 300 млн һум аҡса бүленәсәк. Ул аҡса Өфөнән башҡа 22 ҡалала йорт яны территорияларын төҙөкләндереү мөмкинлеге бирәсәк. Ә Өфөнөң ихаталарҙы төҙөкләндереү буйынса үҙенең программаһы эшләп килә. Ихаталарҙы йүнәтеү буйынса быйыл баш ҡалала 574 млн һум аҡса тотоналасаҡ.

✓Яңы уҡыу йылы алдынан Рәсәй балалар фондының Башҡортостан республика бүлексәһе "Беренсе класс уҡыусыһы. Иртәгә мәктәпкә" тигән мәрхәмәтлек акцияһы үткәрә. Уның маҡсаты - аҙ тәьмин ителгән һәм күп балалы ғаиләләргә ярҙам итеү. Балалар фонды ялыҡтан аҡса иғәнәләре, балалар кейемдәре, мәктәп кәрәк-яраҡтары ҡабул итә. Белешмә өсөн телефон: 272-23-68.

✓БР Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Әбйәлил районында алабалыҡ селбәрәһе етештереү буйынса завод төҙөләсәк. Уны төҙөү өсөн Яҡтыкүл иң унайлыһы тип табылған. Төҙөлөш тиҙҙән башланасаҡ. Билдәле булыуынса, Әбйәлилдә 33 күл иҫәпләнә. Әммә бында балыҡсылыҡ үҫешмәгән.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ИҪӘПЛЕНЕҢ КҮҢЕЛЕ ТЫНЫС

Йылылыҡ һәм һыу хисаплаусы приборҙарҙы рәсәйлеләр -2012 йылдың 1 июленә, газ өсөн 2015 йылдың 1 ғинуарына ҡуйҙырып бөтөрөргә тейеш. Беҙҙең йорттарҙа һәм фатирҙарҙа газ, йылылыҡ һәм һыу хисаплаусы приборҙарҙы мотлаҡ ҡуйҙырыуҙы бер аҙға кисектереүсе закон Совет Федерацияһы тарафынан хупланды. 2009 йылда ҡабул ителгән "Энергияны һаҡсыл тотоноу һәм уның һөҙөмтәлелеген күтәреү тураһында"ғы законда коммуналь хеҙмәттәрҙе иҫәпләү приборҙарын 2012 йылдың 1 ғинуарына ҡуйып бөтөү планлаштырылғайны.

Хәҙер газ плитәләрен ягыуға тотонолған газ күләмен беҙ 2015 йылдың 1 ғинуарынан иҫәпләй башлаясаҡбыҙ. Ә инде һыу, йылылыҡ һәм электр энергияһын хисаплаусы приборҙарҙы (кемдәр әле булһа ҡуйҙырмаған) 2012 йылдан да ҡалмай һатып алып ҡуйҙыртыу сараһын күрә башларға кәрәк.

Һыу һәм йылылыҡты иҫәпләүсе приборҙарҙы ҡуйып биреү буйынса хеҙмәттәр күрһәтеүсе компаниялар күп хәҙер баш ҡалабыҙҙа. Шуға күрә ярты йыл эсендә улар араһынан хаҡтарҙы бигүк "ҡайырып" һорамаған фирманы һайлап табыуы ҡыйын булмаҫ.

Күрһәтелгән ваҡытҡа төрлө сәбәптәр менән өлгөрә алмаған кешеләр ни эшләр һуң? Законда һыу һәм йылылыҡ буйынса - 2013 йылдың 1 июленә, ә газ буйынса 2016 йылдың 1 ғинуарына тиклем көсөү ваҡыты ҡаралған. Шунан һуң идарасы компаниялар дөйөм йорт приборҙарын мәжбүри тәртиптә ҡуя башлаясаҡ, уларҙың хаҡы һәм ҡуйҙырыу өсөн сығымдар өлөшләтә коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү иҫәбенә ҡушып яҙыласаҡ.

## ФОНТАН ҺЫУЫНДА ҠОЙОНМА!

Рәсәй Федерацияһының Баш санитар табибын күптәрҙең фонтан янында һыу инергә теләүе ғәжәпләндерә.

- Беҙҙең фонтандар күпләп йыуыныу урынына әйләнде! - тип асыулана Онищенко. - Үҙ һаулығына битараф кешеләр бер ни уйлап тормайынса, аяҡ кейемдәре менән шунда барып төшәләр.

Мәғлүм булыуынса, фонтандар ябыҡ һыу әйләнеше системаһында эшләй: бер үк һыу әйләнештә йөрөй. Шулай булғас, ошонда ҡойонған төрлө кешеләр, бомждар, эттәр һәм күгәрсендәрҙән һыуға төрлө бактериялар һәм микробтар эләгә. Был иһә Геннадий Онищенко һүҙҙәренә ҡолаҡ һалырға кәрәклекте аңлата түгелме?

Росгидромет белдереүенсә, Европа территорияһы илдәрендә эҫелек былтырғы йәй рекордтарын ҡабатлай алмаған хәлдә лә барыбер климат нормаһынан 4-6 градусҡа юғарыраҡ.

Иҙелбикә БАЕВА әҙерләне.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР

**Өфөләләрҙең йорт эттәрен ҡала урамдарында йөрөткәндә тейешле ҡағыҙәләрҙе һанға һуҡмауын күҙәткәнегеҙ барҙыр. Быға кем ғәйепле? Эттәрен ҡаланың "ҡыҙыл линия"һында ярау итергә юл ҡуйған эт хужаларымы, әллә уларға төрлө ирек рөхсәт иткән закондармы?**



# ҺИНЕҢ ЭТЕҢ БИТ,

## артынан үҙең таҙарт!

Ысынлап та, эт аҫыраусы өфөләләр яратҡан хайуандары артынан таҙаларға һаман өйрәнмәгән. Был эттәр ҡаланың һәр ерендә үҙҙәренең эшен бөтөрөп китә. Ә эргәлә балалар уйнауына бер кемдең дә иҫе китмәй.

Ә бына Көнбайыш илдәрендә эт тиҙәген шунда уҡ йыйып алыу һәр хужаның ғәҙәти эше һанала. Урамда быны өсөн махсус һауыттар, бер тапҡыр ҡулланыла торған төргәктәр менән һоҫҡолар ҡуйылған. Үҙенең йорт хайуаны артынан таҙартмаған осраҡта ҙур ғына суммала штраф түләргә тура килә уларға. Ҡайһы бер илдәрҙә эттәрҙе йөрөтөр өсөн махсус "ком һауыттары" менән йыһазландырылған майҙандар бар.

Ә беҙҙең Рәсәйҙә нисек? Мәскәүҙең Административ кодексының "Йәмәғәт урындарын йорт хайуандары менән бысратҡан өсөн" статьяһына ярашлы, эт көтөүҙә тәртип боҙоусыларға бер мендән ике меңгә тиклем штраф һалына. Ләкин мәскәүлеләр штрафтан әллә ни ҡурҡмай. Был йәһәттән питерлыларға "Афарин!" тип әйтергә ҡала. 2006 йылда уҡ Нева ҡалаһында тиҙәк өсөн бушлай пакеттар ҡуйылған тәүге контейнерҙы асыу тантанаһы булып үтә. Ә 2011 йылдың башында Петербург депутаттарының берәһе эттәр өсөн махсус "бәләкәй бәҙрәфтәр" элеп ҡуйырға тәҡдим яһаны.

Беҙҙең Өфөлә лә ошондай саралар уйланмауы бик үкенесле. Йорт хайуандарын тышта йөрөтөр өсөн бушлай пластик төргәктәр түгел, һауыттар ҙа, майҙандар ҙа юҡ (булһа ла бик әҙ). Эттәр өсөн ябай төргәктәрҙе лә ҡулланырға мөмкин булыр ине лә. Ләкин, бәхетһеҙ, был осраҡта ла проблемалар килеп тыуыуы ихтимал икән. Хайуандарҙың тиҙәге һалынған төргәкте ябай сүп һауыттарына ташлап булмаясаҡ, сөнки улар йыш ҡына эскәмйәләр янында урынлашҡан, ә унда оло инәйҙәр ял итә...

"Санитар-эпидемиологик күҙлектән ҡарағанда, эт тиҙәктәре - хәүефле ҡалдыҡтар, - тип һөйләй "Тәбиғәт" махсуслаштырылған тәбиғәт һаҡлау предприятиеһының инженер-экологы Альбина Шәмсетдинова. - Улар тупраҡты бысрата, ошоноң һөҙөмтәһендә теге йәки был ауырыуҙарҙы барлыҡҡа килтереүсе төрлө инфекциялар, эсәк бактериялары, шулай уҡ гельминттар таралырға мөмкин. Бала тупраҡ менән уйнағанда эт тиҙәгенә тейеп зарарланыуы ихтимал. Әйткәндәй, Өфө ҡала округының төҙөкләндереү ҡағыҙәләренә ярашлы, эттәрҙе урамдарҙа, парктарҙа, скверҙарҙа, балалар һәм спорт майҙансыҡтарында йөрөтөү тыйыла. Ләкин был тыйыу эшләмәй. Торлаҡ хужалығы идаралығы вәкилдәре быны "тығыҙ төҙөлөш һәм буш майҙансыҡтарҙың булмауы" менән аңлата. Бер яҡтан - тәртипһеҙ халыҡ, икенсе яҡтан - штрафтар булмауы, ә өсөнсө яҡтан - нығытылған нормаларҙы тәртиптә тотмау бына шулай эт аҫыраусыларҙың баш-баштаҡлығына юл ҡуя ла инде.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# СПОРТСЫ БАЛАЛАРҘЫ...

## донъя ярыштарына



**Өфөлә Халыҡ-ара мәктәп уҡыусылары уйыны уҙғарылыуы мөмкин. Был хаҡта баш ҡалаға килгән Халыҡ-ара мәктәп уҡыусылары уйындары президенты Торстен Раш, бәйгенең генераль секретары Ричард Смит Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев, Башҡортостан Республикаһы Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Александр Никерин ҡатнашлығында уҙғарылған осрашыуҙа белдерҙе.**

Халыҡ-ара мәктәп уҡыусылары уйындары президенты менән генераль секретары 2013 йылда мәктәп уҡыусыларының ҡышҡы уйындарын уҙғарырлыҡ регионҙарҙың берәһе итеп Өфөнө һайлау ихтималлығын көн тәртибенә ҡуйып, дүрт көн буйы баш ҡалабыҙҙа урынлашҡан төрлө спорт комплекстары, стадиондар, залдар менән танышып сыҡҡан. Осрашыу ваҡытында Торстен Раш, Өфөлә спорт менән шөғөлләнеү өсөн бик яҡшы матди-техник база барлығын күрҙек, тип билдәләп үтте. "Киләсәктә лә тығыҙ бәйләнештәр өҙөлмәҫ,- тине ул.- Халыҡ-ара мәктәп уҡыусылары уйындарын уҙғарыу өсөн һеҙҙән ярҙам көтәбеҙ, сөнки был бәйгенең төп маҡсаты - халыҡ-ара бәйләнештәрҙе нығытыу, балаларҙы дуҫлаштырыу". Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев та булған мөмкинлектәрҙе күҙ уңында тотоп, 2013 йылда мәктәп уҡыусылары өсөн ҡышҡы олимпиаданы үткәрә аласаҡбыҙ, тип белдерҙе. Әйткәндәй, Халыҡ-ара мәктәп уҡыусылары уйындары 12-15 йәштәге балалар өсөн Халыҡ-ара олимпия уйындары комитеты ярҙамында ойоштоРола. Был бәйгенең Ҡышҡы уйындары быйыл ғинуар айында Канадала уҙғарылды, ә Йәйге уйындары 2011 йылдың 3-8 августында Шотландияның Ланаркшир графлығында үтәсәк. Унда Өфөнән дүрт спорт төрө: еңел атлетика, дзюдо, бадминтон, йөҙөү буйынса тәүге тапҡыр бәйгеләрҙә ҡатнашыу өсөн 17 бала барасаҡ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Быйыл июлдән никахтарҙы ЗАГС бүлексәләрендә генә түгел, мәҙәниәт учреждениеларында ла теркәү рөхсәт ителде. Әлеге ваҡытта ЗАГС идаралығы Конгресс-холл, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры, Өфө "Нур" татар дәүләт театры, Республика рус дәүләт академия драма театры менән килешеүҙәр төҙөгән. Законлы никахты мәҙәниәт учреждениеларында теркәргә теләүселәр ғаризаны Өфө ҡалаһының Никах теркәү һарайына алып барырға тейеш. Белешмә өсөн телефондар: 284-98-72, 284-98-00.

✔Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының БР буйынса баш идаралығының ышаныс телефоны 8(347) 233-99-99 номеры буйынса эшләй. Республикала йәшәүселәр көн һайын тәүлек әйләнәһенә үҙҙәрен борсоған һорау менән ошо телефон буйынса мөрәжәғәт итә ала. Шулай уҡ төрлө ғәҙәттән тыш хәлдәр тураһында ла хәбәр итергә мөмкин.

✔Йәш йырсы Айҙар Хәмзин Тыва республикаһының баш ҡалаһы Ҡыҙылда үткән "Саян тауҙары көйө" тигән Халыҡ-ара эстрада конкурсында "Уралым" башҡорт халыҡ йырын башҡарып, беренсе урын яуланы.

✔Быйылғы һыу инеү миҙгелендә Рәсәйҙәге һыу сығанаҡтарында барлығы 900 кеше һәләк булған. Уларҙың 90-ы - балалар. Беҙҙең республикала 75 кеше һыу ҡорбаны булған. Уларҙың 12-һе - балалар. Мәғлүмәттәр буйынса ҡарағанда, һыу сығанаҡтарында һәләк булыусыларҙың 80 проценты-ның фажиғәһендә эскелек сәбәпсе.

✔Салауат районында "Салауат эҙҙәре буйлап" тигән туристик маршрут комплексы булдырыу идеяһы тикшерелә.

✔Дим баҙарындағы ике ҡатлы павильонда ҙур янғын сыҡты. Сәбәптәре асыҡлана. Ҡупме зыян күрелгәне тураһында әлегә мәғлүмәт юҡ.

✔"Берҙәм Рәсәй" партияһының һайлау алды йыйылышы 3-4 сентябрҙә булырға тейеш ине, ул праймериздарҙың 25 авусҡа тиклем оҙайтылыуы менән бәйле 20 сентябргә күсерелде. Съезда 4 меңләп делегат ҡатнашасаҡ тип көтөлә.

✓ *Ҡала балалары эре сирттерә: бизнесмен, директор... Хатта өслөгә генә уҡығандарҙың да хыялдары буй етмәслек. Шул саҡ бер егет баҫты ла: "Ә мин аграр университетҡа уҡырға инәм", - тип белдерҙе.*



ҺҮҘ -УҠЫТЫУСЫҒА

# БЕҘҘЕҢ МӘКТӘПТӘ...

## бар шундай шәп егет

**(Башы 1-се биттә).**

Декрет ялынан һуң эшкә сыҡҡас, үҙемде мәктәптә яңы килгән уҡытыусы кеүек тойҙом. Миндә уҡыған уҡыусылар күптән юғары уҡыу йорттарында белем ала, ә мәктәптәгеләре - минең өсөн ят. Мәктәп директоры, уның урынбаҫарҙары: "Беҙгә бик шәп уҡыусы килде, үҙһүҙлелеге бар, әлбиттә, уртаҡ тел табып эшләһәгеҙ, бергәләп уңыштарға ирешер инегеҙ", - тип ҡаршы алды. Ҡыҙыҡһыныуым көслө булһа ла, Айҙар исемле ул уҡыусы менән осрашып һөйләшергә тиҙ арала форсат теймәне. Дәрестә таныштыҡ һәм шунда уҡ был егеткә ҡарата хөрмәт уянды. "Киләсәктә кем буласаҡһың?" тигән темаға фекер алышабыҙ. Ҡала балалары эре сирттерә: бизнесмен, директор... Берәүһенең атаһының рестарандар селтәре бар икән, ул шул эште дауам итмәксе. Хатта өслөгә генә уҡығандарҙың да хыялдары буй етмәслек. Шул саҡ бер егет баҫты ла: "Ә мин аграр университетҡа уҡырға инәм", - тип белдерҙе. Уҡыусыларҙың кәмдәрелер: " Һин нимә, унда ауылдыҡылар ғына уҡый", - тип гәжләнә. "Яҡшы итеп тамамлайым да, - тип дауам итте тегеләр, -ауылға эшкә ҡайтам. Шундай һәйбәт итеп эшләйәсәкмен, шунан мине колхоз рәйесе итеп ҡуясаҡтар. Эшемдең һөҙөмтәһен күреп, район башлығына тиклем үрләтәсәктәр. Бер нисә йылдан һуң, перспективалы кадр, тип, Өфөгә эшкә алырҙар. Тырышлығым арҡаһында, бәлки, президент та булырмын әле. Бына шунда инде һеҙ килерһегеҙ "Яңы ресторан асырға ҡала уртаһында ер кәрәк ине бит әле" тиеп..." Уҡыусылар ғына түгел, үҙем дә, иҫем китеп, алдымда ысынлап та президент торғандай күреп тыңланым Айҙар Сәлиховты. Дәрестән һуң оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Беҙҙең мәктәпкә ул Стәрлетамаҡ ҡалаһының Ж. Кейекбаев исемендәге 3-сө башҡорт гимназияһынан уҡырға килгән. Тыуған ҡалаһын әле булһа һағына. Бигерәк тә беренсе уҡытыусыһы Ғайсина Тәнзилә Ғәли ҡыҙын онота алмай. Төплө белемле булырға ынтылыш та, тәрбиә ләүге уҡытыусыһынан тип һанай.



Айҙарҙың илтифатлы булыуы, ололарҙы хөрмәт итә, кеселәргә яҡлай белеүе һоҡландыра. Уның гел дә кәйефе шәп, йылмайып һөйләшә, бөтәһенең дә күңелен күтәрерлек итеп шаяртырға ла онотмай. Нисек шулай матур тәрбиәләргә мөмкиндер баланы, тип һоҡланам Айҙарға ҡарап. Үҙем дә ике бала әсәһемен, етмәһә, байтаҡ тәжрибә тупланған уҡытыусымын да. Әммә ошондай тәрбиәле балалар менән осрашҡанда гел генә уларҙың ата-әсәһенең тәрбиә өлгөһө менән ҡыҙыҡһына торған ғәҙәтем бар. Бына шуға ла Айҙарҙың әсәһе менән дә осрашып һөйләшергә булдым.

Ләлә Әхәт ҡыҙы оҙаҡ йылдар медицина өлкәһендә эшләй. Айҙар әсәһе менән ғорурланып: " Бар табиптарҙы ла алыштыра алыр ине", - ти. Мөләйем, иғтибарлы Ләлә апай ҙур ғаиләлә үҫкән. Атаһы Әхәт Шәғәли улы менән әсәһе Шәкүрә Әхмәтғәзиз ҡыҙы ете балаға ғүмер биреп, тәрбиәләп, оло юлға сығарған. Барыһы ла белемле, мәҙәниәтле, тырыш. Тырыш, тигәндән, ҡустылары Илдус Күгәрсен районының Аҙнағол ауылында бейәләр тота, ҡымыҙ бешә. Йәй етһә, Айҙар ауылға атлығып тора. Яҡындарына ярҙам итеп, көс йыйып, дәрт алып килә ҡалаға. Бер эштән дә ҡурҡмай. Бәләкәйҙән олатаһына эйәреп "донъя йөгөн" тартҡан ул. Үҙен "Тәбиғәт балаһы" тип һанай, тыуған ерен сикһеҙ ярата. Иншаһынан өҙөк килтереп киткем килә : "Һоҡланғыс ерҙә, һоҡланғыс илдә йәшәйем мин. Спорт ярыштарында күп ерҙәрҙә булғаным бар. Әммә минең республикам кеүек матур, бай, иң мөһиме, хозур тәбиғәтле республика, ил күргәнем юҡ. Кемдер минең менән, бәлки, бәхәсләшер: шулай инде, тыуған ерең бит, тиер. Ризалашам һәм, әлдә генә ошо ерҙә тыуғанмын, тим. Ҡалын урмандарҙа ниндәй тәр ағастар юҡ, мул һыулы йылға-күлдәр, күҙҙең яуын алырлыҡ сәскәләр, шифалы үләндәр... Мөғжизә!"

Спорт ярыштарына килгәндә, Айҙар футбол менән бик етди шөғөлләнә. Дүрт йыл инде "Өфө агрегат производство берекмәһе" командаһы өсөн уйнай. Йыш ҡына ярыштарҙа була. Яҡшы уҡыуы, өлгөлө тәртибе менән бер рәттән, спорт ярыштарындағы уңыштары өсөн дә диплом-грамоталары бихисап. "Салауат Юлаев" хоккей командаһының алмаштырғыһыҙ көйәрмәне. Әсәһе Ләлә апай: "Иртән алтыла тороп уйынға билет алырға китә", - тип көлә. Былтыр Өфө ҡалаһының Башҡорт балалары короллтайында ҡатнашҡан. Ундағы сығышында шундай юлдар бар: "Милләттәштәремдең һәр уңышы, еңеүе минең өсөн ҙур шатлыҡ. "Салауат Юлаев" хоккей командаһы өсөн яныпкөйәм. Тик унда башҡорттарҙың булмауы күңелде ҡыра. Башҡорт уйынсыларынан ғына торған команда төҙөһәң, нисек булыр ине икән? Беҙҙең халыҡ тырыш, сәмсел, яҡшы уйнарҙар ине, минеңсә".

Айҙар бөтә фәндәрҙе лә еңел үҙләштерә. Рухлы, илһөйәр уҡыусым менән башҡорт теле буйынса үткәрелгән төрлө сараларҙа ҡатнашмай ҡалмайбыҙ. Былтыр олимпиадаларҙа яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәштек. Өфө ҡалаһы кимәлендә уңынсы синыф уҡыусылары араһында - I урын, республика кимәлендә III урын яуланыҡ.

Мин киләсәктә Айҙарға бөтә хыялдарының тормошҡа ашыуын, тәбиғәт һәм ата-әсәһе тарафынан бирелгән һәләттәренең артабан да үҫеүен, эргәһендә һәр саҡ аңлап, яратып тороусы кешеләр булыуын теләйем.

**Эльза ТОЛОМБАЕВА,**

**Өфөләге 35- се мәктәптең башҡорт теле уҡытыусыһы.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

### СИТТӘН КИЛГӘН ИТТЕ АШАМА

**"Россельхознадзор"ҙа аныҡлауҙарынса, донъяның 19, шул иҫәптән 10 Евросоюз иленән, ит индереүгә ваҡытлыса сикләү ҡуйылған.**

Идаралыҡ тарафынан бындай ҡарарҙың ҡабул ителеүе Евросоюз илдәрендә юғары патогеник штаммлы эсәк ауырыуҙары таяҡсаһының (Escherichia coli, E. coli - высокопатогенный штамм кишечной палочки) киң таралыуы менән бәйле.

"Россельхоз" тарафынан Рәсәйгә сит илдән индерелгән иттең хәүефһеҙлек күрһәткестәре, шул иҫәптән микробиологик хәүефһеҙлеге буйынса ентекле лаборатор тикшереүҙәр үткәрелә. Был мониторингтарҙың һөҙөмтәһе буйынса 2010 йылда беҙгә индерелгән 86 ит партияһында ошондай таяҡсалар табылған. Шуға күрә 38 илдең - 207, шул иҫәптән Евросоюздың 15 илендә 69 ойошма эшмәкәрлегенә контроль арттырылған", - тип хәбәр итә идаралыҡ.

Уларҙың фекеренсә, малды һуйғанда һәм түшкәһен эшкәрткәндә мал сеймалының микроблы бысраныу хәүефе ҙур булғанлыҡтан, был продукция ҙур хәүеф тыуҙырыусы булып тора. Ә үҫемлек продукцияһы аша ағыуланыу бары тик икенсе дәрәжә характерында булыуы мөмкин һәм шуға күрә үҫемлек продукцияһын "аш-һыу сылбырында ағыулауҙың беренсе сығанағы" тип иҫбатлап булмай.

Германия һәм Евросоюздың компетентлы ойошмаларының әлегәсә аҙыҡ-түлек продукцияһының зарарлы таяҡса менән ағыуланыу сығанағын таба алмауы идаралыҡты айырыуса хәүефкә һала. 2011 йылдың беренсе ярты йыллығы мониторинг һөҙөмтәләре буйынса 21 илдең - 64, шул иҫәптән 5 Евросоюз илдәренең 19 ойошмаһы ҡаты күҙәтеү аҫтына алынған. "Россельхознадзор" артабан да был өлкәләге хәлдең үҫешен күҙәтәсәк, һәм, ихтимал, сит илдәрҙән аҙыҡ-түлек индереү мәсьәләһендә өҫтәмә саралар ҙа ҡулланылыуы мөмкин.

### РИШҮӘТ ХАҠЫ НИ ХАҠ?

**РФ Эске эштәр министрлығының иҡтисади хәүефһеҙлек һәм коррупцияға ҡаршы көрәш буйынса Баш идаралығы начальнигы Денис Сугробов идаралыҡ эше күрһәткестәрен иғлан итте. Идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре асыҡлауынса, ярты йыл эсендә генә лә уртаса ришүәт күләме 5 тапҡырға тиерлек артҡан һәм ул бөгөн 293 мең һум тәшкил итә.**

- Ә идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре тарафынан асыҡланған енәйәттәр буйынса был кимәл дөйөм Рәсәй күрһәткесен 10 тапҡырға уҙҙырып ебәрҙе һәм йөмғеһе 2,8 миллион тәшкил итте, - тип һөйләй Сугробов.

Идаралыҡ башлығы һөйләүенсә, апрель-майҙа үткәрелгән "Алкоголь-Тәмәке" операцияһы һөҙөмтәһендә 71 йәшерен цех эшмәкәрлеге туҡтатылды.

Граждандарҙың ғүмере һәм һаулығы өсөн хәүефле булған 1 миллиондан ашыу литр этил спирты, 50 мең литр денатурланған спирт, 1,8 миллион литр әҙер алкоголь продукцияһы законһыҙ әйләнештән алынды, - тип һөйләй журналистарға Сугробов.

Иҡтисади хәүефһеҙлек һәм коррупцияға ҡаршы көрәш идаралығы ошо йылдың 13 мартында булып үткән һайлауҙарҙа ҡатнашҡан депутатлыҡҡа кандидаттарҙы сафлыҡҡа тикшереп ҡарағайны, 23 кандидаттың енәйәтсел төркөмдәр менән бәйләнеше асылды. 423 кешенең енәйәт ҡылыуға мөнәсәбәте булыуы тураһында мәғлүмәт алынды, - тип хәбәр итә Идаралыҡ хеҙмәте.- Уларҙың власҡа килеү теләге бик ҙур булһа ла, бәхеткә күрә, ниәттәре бойомға ашманы.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Варикоз



Уртаса ҙурлыҡтағы алма алығыҙ, "Антоновка" сорты булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Уны һалҡын һыу менән йыуғас, эмалле кәстрүлгә һалып, өҫтөнә бер литр ҡайнар һыу ҡойоғоҙ һәм ябып, юрғанға урап, өҫтөнә яҫтыҡ һалып, 3 сәғәт тәнәтергә. Шунан алманы иҙергә һәм тәнәтмәне һөҙөргә. Иртәле-кисле 1/4 өләшләп, ике көндә эсеп бөтөрөргә. Хәл яҡшырғансы, ошо дауаны эшләп эсергә.

### Астма

Астма ауырыуы башланып ҡына торһа, 150 гр керән (хрен) тамырын һалҡын һыуҙа йыуып, ит турағыс аша үткәреп, ике лимон һутын һығып, яҡшылап болғатырға ла, һыуытҡысҡа ҡуйырға. Оло кешегә 1-әр балғалаҡ, балаларға ярты балғалаҡлап көнөнә 1 тапҡыр һәм өйәнәк алдынан ҡабул итеп торорға. Хәл яҡшырғансы эсергә.

### Простатит

Бер өләш кесерткән япрағы, икешәр өләш гөлйемеш емеше, юл үләне япрағы, өсәр өләш ҡайын еләге япрағы менән ҡырҡбыуын үләне (полевой хвощ) алғас, бер һауытҡа һалып болғатығыҙ. Ошо ҡатнашманы бер ҡалаҡ алып, ике стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт тәнәтҡәс, көнө буйы эсеп бөтөргә. Алты айҙан һуң простатиттың эҙе лә ҡалмаҫ.

### Диабет

Еңелсә һәм уртаса шәкәр диабеты ваҡытында был сирҙе бөтөрөү өсөн, ҡатыраҡ формаһында хәлде еңеләйтеү өсөн: 1 стакан һолоно 5 стакан һыу менән талғын ғына утта кеҫәл хәленә еткергәнсе ҡайнатып һөҙөргә лә, 2 стакан һөт ҡушырға. Көнө буйы эсеп бөтөргә.

### Сәстәр өсөн

Бер ҡабаҡты орлоғонан таҙартып, иҙеп, ҡайнатып һыуытылған һыу менән болғатырға. Баш тиреһенә һәм ҡалғанын сәскә һөртөргә һәм башты таҫтамал менән урап, 30-35 минут торорға һәм шампунь менән йыуырға. 1 тас һыуға 1 балғалаҡ аш һеркәһе йәки лимон һуты һалып, сәсте сайҡатырға. Сәстәрегеҙ йомшарып һәм ялтырап китер.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

***✓ Мәскәүгә барып, Бәндәбикә инәйҙең һөлдәһен тапҡан Ринат Йосопов вафат булды. Бөгөнгө көндә был эште кем дауам иткәненә төшөнөп булмай. Был мәсьәләне лә хәл итеү өсөн тағы күпме йөрөлөр икән?***

ҮӘТ БИТ ӘЙ!




# ЭНЕРГЕТИК ЭСЕМЛЕКТӘР...

## энергия бирәме, әллә уны һурамы?

**Ошо көндәрҙә РФ Дәүләт Думаһына "Алкоголһеҙ энергетик эсемлектәр етештереүгә, ваҡлап һатыуға һәм ҡулланыуға сикләүҙәр тураһында"ғы закон проектын тәҡдим иттеләр. Был закон проекты авторҙарының береһе Виктор Звагельский фекеренсә, кофеинды тәүлегенә 150 мл-ға тиклем миҡдарҙа ғына ҡулланырға ярай, ә энергетик эсемлектәрҙә ул бик күп миҡдарҙа. Медиктар билдәләүенсә, энергетик эсемлек ҡулланыусыларҙың күптәре уны эсә торғас, ихтыяж кисерә башлай. Ә был үҙ сиратында йәшерен психик ауырыуҙарҙы уятыуы бар. Шуның өсөн депутаттарҙың ҡайһы берҙәре алкоголһеҙ энергетик эсемлектәрҙе бәлиғ булмаған балаларға һатыуҙы, шулай уҡ балалар, уҡыу, һауыҡтырыу йорттары, спорт биналары, һәр төрлө мәҙәни ойошмалар урынлашҡан урындарҙа уларҙы ваҡлап һатыуҙы тыйырға кәрәк, тигән ҡыйыу тәҡдим индерә. Алкоголһеҙ энергетик эсемлектең һаулыҡ өсөн хәүефе тураһында беләме уны ҡулланыусылар?**

**Гөлдәр ҠАҘАҠАЕВА, химия уҡытыусыһы:** Алкоголһеҙ булһа ла был энергетик эсемлектәр һаулыҡҡа бик зыянлы. Энергетик эсемлек составына ингән кофеин ҡан тамырҙарын тарайта, һөҙөмтәлә организм ҡурҡыу хисе тоя, адреналин бүленеп сыға. Ул шулай уҡ йоҡоно ла осора, диарея, тахикардия ауырыуҙарына сәбәпсе була ала. Энергетик эсемлектәрҙә булған башҡа матдәләр шулай уҡ йөрәк сирҙәренә, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарына, ҡан баҫымы күтәрелеүенә килтереүе бар. Ә составына ингән яһалма буяуҙар, кислота кимәлен көйләүсе матдәләр һәм башҡа ҡушымталар эске ағзаларҙа йыйыла. Әлегә был өлкәлә төплө тикшеренеүҙәр үткәрелеүе хаҡында белмәйем, әммә организмды ошондай эсемлектәр менән яһалма рәүештә стимуллаштырыу уны тиҙ эшлектән сығара. Энергетик эсемлектәр тәү сиратта нервылар системаһына тәьҫир иткәс, иң беренсе булып нервылар ҡаҡшай башлай.

**Фәнис ҒӘЛИН, хеҙмәткәр:** Мин энергетик эсемлектәрҙе һирәк ҡулланам. Ярты йылға бер тапҡыр тура киләлер. Был да эш өйөлөп киткәндә, уларҙы тиҙерәк башҡарып сығырға кәрәк булғанда йоҡо килеп, хатта кофе ла ярҙам итмәгән осраҡта, бик мөһим мәлдәрҙә генә була. Алкоголһеҙ энергетик эсемлектең дә, алкоголлеләренең дә ағзаларға нисек тәьҫир итеүен яҡшы беләм, һаҡланырға тырышам.

**Динис ХАЖИН, студент:** Энергетик эсемлекте бер тапҡыр тәмләп ҡарағандан һуң унан баш тарттым. Был эсемлектең шәкәрле тәме, унан бигерәк сағыу төҫө оҡшаманы. Әйткәндәй, мин уны тәмләп ҡараған төндә нисек кенә тырышһам да йоҡлай алманым, йөрәк тибешемде тыңлап яттым. Ярай әле хәлем үтә ныҡ насарайып китмәне. Ә бит йәштәштәрем уны ҡасан, ҡайҙа ғына ҡулланмай: имтихан тапшырғанда ла, төнгө клубтарға барғанда ла, пляжда ҡыҙынғанда ла... Кемгәлер пляжда эҫе көндә ҡояш аҫтында ятҡан ваҡытта һалҡын, энергия өҫтәүсе эсемлек эсеүе бик оҡшайҙыр ҙа ул, әммә һаулыҡтарын да ҡайғыртһын ине буласаҡ ата-әсәләр.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК*

# ИЛ ИНӘҺЕНЕҢ РУХЫ...

## рәнйемәйме икән беҙҙең битарафлыҡҡа?

**"Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 22-се һанында "Әүлиә ҡәберҙәренә табыныр өсөн түгел, хәйер-доға ҡылыр өсөн барабыҙ" тигән мәҡәләне уҡып сыҡҡас, инде нисәнсе тапҡыр ниәтләп йөрөп, Күгәрсен районы Мәҡсүт (Ҡойо) ауылындағы Бәндәбикә әүлиә-инәйҙең кәшәнәһе тураһында яҙмаҡсы булдым.**

Минең атайым Ғибаҙулла Бейешев тирә-яҡтағы тарихи ҡомартҡыларҙың ташландыҡ хәлдә булыуына, хатта ҡайһы берҙәрен соҡоп ташлап китеүҙәренә һәр саҡ әрней торғайны. Һуғыш бөтөп, донъялар әҙерәк тынысланғас, Ерәнсә сәсән, Бәндәбикә ҡәбере һәм кәшәнәләре тураһында төрлө гәзиттәргә мәҡәләләр яҙҙы. Атайым 1979 йылда донъя ҡуйҙы. Шуға тиклем Бәндәбикә кәшәнәһен тергеҙеү тураһында хыялланды. Уның күп тапҡырҙар гәзиткә яҙыуының һөҙөмтәһе шул булды: 1966 йылдың йәйендә археолог Нияз Мәжитов етәкселегендәге бер төркөм археологтар ауылға килеп, ауыл ҡарттарының рөхсәте менән ике йәй кешәнәне ҡаҙҙылар. Иң һуңында, 1967 йылда, әүлиә-инәйҙең һөлдәһенә еттеләр һәм кешәнәне тергеҙәбеҙ, һөлдәне яңынан ерләтәбеҙ, тип, уның һөйәктәрен алып киттеләр. Уға инде 50 йылға яҡын ваҡыт үтте.

Атайымдың һәм ауыл аҡһаҡалдарының кәшәнәне тергеҙеү тураһындағы аманатын үтәү маҡсатында инде мин 20 йылдан артыҡ шул юлда йөрөйөм. 1999 йылда мәҙәниәт министры Тәлғәт Сәғитовҡа хат менән индем, ул: "2000 йылда был эште башлайбыҙ", - тип яуап бирҙе. Әлбиттә, ул һүҙендә торҙо, кәшәнәгә 2000 йылда нигеҙ һалынды, бер аҙ стенаһы ла күтәрелде. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ергә туп-тура ултыртылған стена емерелеп төштө, кирбестәре ташылып бөттө. Һәм эш тағы туҡталды. 2005 йылда үҙебеҙҙең яҡташ булараҡ был эште аңлар тип, яңы мәҙәниәт министры Илдус Илешевҡа индем. Әлбиттә, ул шунда уҡ кәшәнәне тергеҙеү эшен башлап ебәрҙе. Кәшәнәнең стенаһы күтәрелде, ҡыйығы ябылды, электр уты үткәрелде, ишек- тәҙрәһе һәм мейесе бар.

Бына һуңғы ике йылда эш тағы туҡталды. Хәҙер унда юл үткәреү, табут урынын таҙартыу, IX быуатта һуғылған төрлө төҫтәге һәм формалағы кирбестәрҙе һаҡлау, уның технологияһы менән йәштәрҙе таныштырыу эштәре ҡалды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Мәскәүгә барып, Бәндәбикә инәйҙең һөлдәһен тапҡан Ринат Йосопов вафат булды. Бөгөнгө көндә был эште кем дауам иткәненә төшөнөп булмай. Был мәсьәләне лә хәл итеү өсөн тағы күпме йөрөлөр икән? Белмәйем. Ә йөрөргә, эште аҙағына тиклем алып барып еткерергә кәрәк.

Ә бит республикабыҙҙың ҡайһы бер райондарында бындай эшкә бик ҙур иғтибар итәләр. Миҫал өсөн: әле генә Баймаҡ районының Иҫәнбәт ауылында бынан 300 йыл элек йәшәгән Сураш батырҙың хәтер кисәһен үткәрҙеләр. Сураш батыр башҡорт ерендә аяуһыҙ эштәр ҡылған урыҫ алпауыты Брагинды һыбыҙғы мылтығынан атып үлтерә. Борон был ауыл Сураш исемен йөрөтә, һуңынан, эҙәрләүҙәрҙән ҡурҡып, уны Сураштың улы исеме менән Иҫәнбәт тип йөрөтә башлайҙар. Ырымбур яҡтарында Пугачев яуында ҡаты яраланып, ауылына ҡайтып етә алмайынса, хәҙерге Ейәнсура рай-

# БӘНДӘБИКӘ МЕНӘН ЕРӘНСӘ СӘСӘН

**Әүәлге заманда беҙҙең яҡҡа сиктәш йәшәгән ҡаҙаҡтар сапҡын менеп килеп, башҡорттоң малын, ҡатын-ҡыҙын талап алып ҡаса торған булған. Шуға күрә башҡорттар уяу торған, төрлө ергә һағауыл ҡуйған. Ҡарауылтау, Һарайса, Сирекәй, Сөләймән тауҙары шул күҙәтеү урыны булған, ти торғайны ҡарттар. Ҡыйыу егеттәрҙән ҡораллы төркөмдәр ойоштороп, ил һағын тәьмин иткән азаматтар араһында Бәндәбикә тигән бер ҡатын да йөрөгән.**

Бәндәбикәнең торған өйө Ҡойо Мәҡсүтенең түбән яғындағы бәләкәй йылға буйында булып, ул кирбестән һалынған булған. Уның аҡһыл, күкшел, һарғылт төҫтәге бик матур, бик ныҡ, сыңлап торған кирбестәре әле лә бар: бер төрлөһөнөң иңе-буйы 20-шәр см, икенсе төрлөһөнөң буйы - 20, иңе 10 см, ҡалынлыҡтары 5 см. Боронғо оҫталар шундай яҡшы кирбес һуға белгән. Был өй тирмә һымаҡ түңәрәк, башы көмбәҙле, ишек-тәҙрәле булған.

1952 йылдың июль айында яйлап сәй эсеп ултырғанда, 82 йәшлек Әхмәт ағай Йосопов Бәндәбикә менән Ерәнсә сәсән хаҡында үҙенең ата-бабаһынан ишеткәнен һөйләне. Уның һөйләүенсә, Бәндәбикә үҙ заманының бик абруйлы, таныҡлы, тәжрибәле, һынсыл, дөрөҫ фекерле ил әсәһе булған, ил эше менән ныҡ шөғөлләнгән, асыҡ, иркен йөрөгән. Ил азаматтары унан кәңәш алып, кәңәшеп тотҡан, хөрмәт иткән.

Бәндәбикә динсел булған, биш ваҡыт намаҙын ҡалдырмаған. Йәй көнө ул үҙенең өйө эргәһендәге йылға әйләнмәһендә намаҙ уҡый торған булған. Шуғалыр, әллә бик аҡыллы булғанғамылыр, уны "әүлиә әбей" тип атағандар.

Ҡыш көнө Бәндәбикә кирбес өйөндә ҡышлаған, ә йәй көнө йылға буйына тирмә ҡороп, шунда йәйләгән. Шуның өсөн был йылғаны "Бәндәбикә йылғаһы" тигәндәр, әле лә шулай тиҙәр. Ул саҡта был йылға күпкә ҙур, ағаслы, балыҡлы булған, йылға тамағындағы тәрән күлдәр бер ҙә ҡоромаған.

Бәндәбикә үҙенең ире Ерәнсә сәсәндән байтаҡҡа оло булған. Ерәнсә сәсән дә бик мөһабәт, ҙур ҡара мыйыҡлы, мыҡты кәүҙәле, сәсән һүҙле, батыр кеше булған. Шулай булһа ла, Бәндәбикәнең кәңәшенән сыҡмаған. Ҡаҙаҡ сапҡындарынан илде һаҡлаған ҡораллы төркөм башында Ерәнсә сәсән торған. Уның төркөмө ҡаҙаҡ баҫҡынсыларын һәр ваҡыт кире һуғып, еңеп тороп булған. Шуға Ерәнсә сәсәнде ҡаҙаҡтар яҡшы белгән. Хатта Әстрхан яҡтарындағы ҡаҙаҡтар ҙа уны иҫтә тотҡан. Ерәнсә сәсән быға бик маһайып, шаша башлаған.

Берҙән-бер заман Бәндәбикә ҡартайып киткән, ауырып түшәккә ятҡан. Шул саҡта Ерәнсә сәсән Бәндәбикәгә: "Һин ауырыйһың, ҡараусы кәрәк. Йәш кәләш алһам, һине ҡарар ине",- тигән. Бәндәбикә уға: "Ҡаршылығым юҡ, тик һин минең өсөн түгел, үҙең өсөн ал. Мине бөтә күрше-күлән ҡарай", - тигән. Ерәнсә сәсән: "Улайһа, мин кәләште дим менән түгел, дан менән алам. Егеттәремдең бөтәһенә кәләш алып бирәм", - тигән. "Нисек бөтәгеҙ бер юлы кәләш алмаҡ булаһығыҙ?"- тигән Бәндәбикә. Ерәнсә сәсән әйткән: "Егеттәр менән Яйыҡ аръяғына сапҡын яһап, ҡаҙаҡ ҡыҙҙарын алып ҡайтабыҙ". Бәндәбикә: "Һин ил һаҡлап батыр тигән дан алдың. Кеше илен барып баҫһаң, һинән көслө батыр табылыр. Яман эш менән йөрөмә", - тигән. Ерәнсә сәсән был юлы Бәндәбикәнең һүҙен тыңламаған, егеттәрен алып, сапҡынға киткән.

✓ *1920 йылдарҙа Үрген ауылындағы Хажи хәҙрәттең улы Әхмәтдин мәғзүм менән Сәләхи ахундың улы Мөхәмәт, алтын эҙләп, Ерәнсә сәсән ҡәберен ҡаҙып, емереп ташланы. Таштары бик матур ине, уны урыҫ-улаҡ ташып алып бөттө.*



оны Бәләкәй Муйнаҡ ауылында вафат булып ҡалған Сураш батырҙың ҡәберенә Иҫәнбәт ауылы халҡы тарафынан 2009 йылда ҡәбер ташы ҡуйылған була.

Булып үткән сарала ауыл халҡы Пугачев һуғышында ҡатнашҡан башҡа яҡташтарын да ҡорбан салып иҫкә алды. Әмин сауҡалығында ҡаҙан аҫылды, самауырҙар ҡайнатылды, батырҙар рухына, бөгөнгө эшһөйәрҙәр, балаларҙың киләсәгенә арнап аят уҡылды, ауылдың тоткаһы булған йәш ғаиләләр бүләкләнде. Ауылына, ерлегенә, халҡына арналған шиғырҙар уҡылды, йырҙар йырланды.

Икенсе көндө Муллаҡай ауылына юлландыҡ. Унда атаҡлы дин әһеле Ғабдулла Сәйдиҙең 9 июлдә үтәсәк 175 йыллыҡ юбилейына әҙерлек бара ине. Ғабдулла Сәйди үҙ заманының аҡыллы, белемле, осороноң билдәле шәхестәре менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән, аралашҡан дин әһеле. Уның ҡәберенә зыярат ҡылырға Үзбәкстандан да, Ҡаҙағстан, Тажикстандан да, Башҡортостандың күп кенә район-ҡалаларынан йыл да килеп торалар икән. Был көндө лә ишан ҡәберенә ситтән килгән бер төркөм халыҡ менән зыярат ҡылынды, ҡорбан салынды, аят уҡылды. 9 июлдәге йыйындың да юғары кимәлдә үтеүе тураһында ишеттем.

Быңдай сәфәрҙәрҙә йөрөү мине бик шатландырҙы, шул уҡ ваҡытта Бәндәбикәнең әүлиәинәй кәшәнәһен һаман рәткә килтерә алмауыбыҙға көйөндөм. Бәндәбикә шәхесе лә ҙурлауға, данлауға лайыҡ, беҙ уның менән ғорурлана алабыҙ ҙабаһа. Ул да бит шулай уҡ белемле, илем, халҡым тип янып йәшәгән, ерен баҫҡынсыларҙан һаҡлауға етәкселек иткән Ил инәһе. Етмәһә, уның исеме ер йөҙөндәге данлыҡлылар исемлегенә ингән. Шуға ла уның кәшәнәһен тергеҙеүгә федераль ҡаҙнанан аҡса бүленде. Ә беҙ ошо мөмкинлектән файҙалана алмайбыҙ...

Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына атайымдың Бәндәбикә һәм Ерәнсә сәсән тураһындағы 1966 йылда яҙылған һәм гәзиттәрҙә баҫылып сыҡҡан мәҡәләһен тәҡдим итәм.

**Ләлә БЕЙЕШЕВА.**





Ерәнсә сәсән киткәс, Бәндәбикәнең хәле ныҡ насарланған. Ул әжәл сәғәте еткәнен һиҙеп, кәүҙәһен өйҙән сығармаҫҡа, шунда ерләргә васыят иткән. Ауыл халҡы уның васыятын үтәп, иҙән уртаһына ҡәбер ҡаҙып ерләгән дә, өйҙөң тышынан ҡорған өйөп ҡуйған. "Беҙ бала саҡта, - тине Әхмәт ағай,- өйҙөң тупрағы баҫылып, ишек-тәҙрә баштары асыла башлағайны, ҡарттар йыйылып барып, кире күмде. Аҙаҡтан Ҡөрьән уҡып, амин тоттолар".

Бәндәбикәне әүлиәгә һанап, тирә-яҡтағы халыҡ уның ҡәбере янына мәйеттәрен ҡуя башлаған. Хатта Ағиҙел буйҙарынан килтереп ерләүселәр булған. Шулай итеп унда зыярат барлыҡҡа килгән. Бара-бара был йола онотолған, ул урын Мәксүт зыяраты ғына булып ҡалған.

...Ерәнсә сәсән ҡаҙаҡ еренә барып ингәс, ҡамауҙа ҡала, бик ҡаты һуғыш була, байтаҡ кеше һәләк була. Иҫән ҡалған башҡорт егеттәрен ҡаҙаҡтар әсир итеп, майҙанға килтерә. Шунда ҡаҙаҡ аҡһаҡалдары: "Башҡорт батыры ҡаҙаҡ батыры менән көрәшһен. Башҡорт батыры еңһә, улар бөтәһе лә азат ителә. Ҡаҙаҡ батыры еңһә, Ерәнсә сәсәндең күкрәгенә ултырып, бысаҡ ҡаҙай, ә ҡалғандары ни булғанын илгә һөйләр өсөн ҡайтып китә", - тип хөкөм сығара. Хөкөмдө әйткәс, Ерәнсә сәсәндең алдына ҡаҙаҡ батыры килеп баҫа. Ул дейеү бәрейе кеүек ҙур кәүҙәле, бүрәнә һымаҡ йыуан беләкле, ҡап-ҡара ҡурҡыныс битле була. Ике батыр көрәшә башлай. Уларҙың көрәшкән ере йәп-йәшел болондан тап-таҡыр тупраҡҡа әйләнә, төшлөктәге ҡояш кислеккә ауыша. Ахыры ҡаҙаҡ батыры Ерәнсә сәсәнде әйләндереп һуға ла, күкрәгенә ултырып, ҡынынан хәнйәрен һурып ала. Шул саҡ Ерәнсә сәсән Бәндәбикәнең һүҙен иҫенә төшөрөп, ҡысҡырып көлөп ебәрә. "Нишләп көләһең?" - ти ҡаҙаҡ батыры. Ерәнсә сәсән әйтә: "Минең Бәндәбикә тигән ҡатыным бар. Ул, һин үҙ илеңдә - батыр, кеше илен баҫһаң, һинән көслө батыр табылыр, тигәйне. Һүҙе дөрөҫкә сыҡты",- ти. "Ай, әбейең әүлиә икән, аҡыл эйәһе икән, шунын хаҡына һеҙҙе ебәрәбеҙ", - тип ҡысҡырыша ҡаҙаҡ аҡһаҡалдары.

Ерәнсә сәсән егеттәре менән хурлыҡҡа төшөп, Ҡойо Мәксүтенә ҡайтып ингән. Ҡайтып инһә, Бәндәбикә үлгән, сапҡында ятып ҡалған егеттәрҙең ата-әсәһе: "Ҡайҙа ҡалдырып ҡайттың беҙҙең уландарҙы?"- тип илай-илай уны һырып алған. Ерәнсә сәсән быға түҙмәгән: Бәндәбикәнең үлеү ҡайғыһынан, ҡатын-ҡыҙҙың күҙ йәшенән, үҙенең еңелеү хурлығынан ни эшләргә белмәй, һырт яғына сабып сығып киткән. Йән-фарман сабып барып, ул аты менән Көңшәт тауының аръяғындағы бейек ҡаянан һикергән, ҡая башындағы ташта атының тояҡ эҙҙәре генә уйылып ҡалған. Халыҡ Ерәнсә сәсәнде ил алдындағы элекке хеҙмәттәре өсөн хөрмәтләп, аты, эйәр-өпсөнө, уҡ-һаҙағы менән бергә һалып ерләгән, ҡәберенең өҫтөнә ҡорған өйгән. Ерәнсә сәсәндең ҡәбере Ағаслы Үрген йылғаһының уң яғында. Үргенгә ҡойған Наҙый тамағынан үрҙәрәк, Ҡоро Урыҫайға барған юлдың аҫ яғында, тау морононда урынлашҡан. Элек был ҡәбер таш менән уратылған булған, уның эргәһенә йәйләүҙә үлгән кешеләр ерләнгән. Хәҙер Үрген ауылдары ул ерҙе һөрөп бөттө. Етмәһә, 1920 йылдарҙа Үрген ауылындағы Хажи хәҙрәттең улы Әхмәтдин мәғзүм менән Сәләхи ахундың улы Мөхәмәт, алтын эҙләп, Ерәнсә сәсән ҡәберен ҡаҙып, емереп ташланы. Таштары бик матур ине, уны урыҫ-улаҡ ташып алып бөттө.

Бәндәбикә ҡорғаны ла хәҙер емерек хәлдә. Нияз Мәжитов тигән бер археолог йомшаҡ ҡына һөйләп, йылмайып ҡына йөрөп, ҡорғанды пыран-заран итте, әүлиәнең һөлдәһен алып китте. Шулай итеп, ул халыҡтың нисәмә быуат буйы изге күреп йөрөгән ҡомартҡыһын юҡҡа сығарҙы.

Бәндәбикә менән Ерәнсә сәсән хаҡында мин, Әхмәт Йосоповтан башҡа, Мәксүт ауылының ололарынан Арыҫланғәле Имелбаев, Сәхиулла Ғиззәтуллин, Әбделвәли Татлыбаев тигән ҡарттарҙан да һорашҡайным, һәммәһе лә бер төрлө һөйләне.

**Ғибаҙулла БИИШЕВ.**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# БАШҠОРТ БАТЫРҘАРЫ

Батыр исеме һәм дәрәжәһе лә ошоға оҡшаш яҙмыш кисерә.

Борон башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтарында ла батыр ил-ырыуҙың данлыҡлы ҡаһарманын, яу батырын аңлатҡан шанлы исем. Улар ил, халыҡ азаматтары булараҡ даншөһрәт алған.

Батыр исеме үҙе менән дәрәжәһен, аҫыл заттар иерархияһында үҙ урынын да билдәләшкән. Борон яуҙарҙа еңеп сығыусы батыр икән, уға ниндәйҙер хәрби башлыҡ исемен дә алып килгән, үҙе аҫыл заттар араһына ингән. Яуҙа еңеп, ҙур улъялар (трофейҙар) алып ҡайтһа, байып та киткән. Шулай исеме, дәрәжәһе, вазифаһы, байлығы артҡан.

Шуға күренекле тарихсы А. П. Чулошниковтың башҡорт батырҙарын социаль йәһәттән юғары ҡатламдарға индереүе осраҡлы түгел. Улар араһынан ғәҙәттә йөҙ башлыҡтары, мең башлыҡтары тәғәйенләнгән. Башҡорт восстаниеларының башында йыш ҡына яугир батырҙар торған. 1681-1684 йылдарҙағы ихтилал башында Сәйет, Һары Мәргән батырҙар, 1704-1711 йылдарҙағыларында арҙаҡлы Алдар батыр Иҫәнгилдин, Күсем батыр Түләкәев, 1735-1740 йылдарҙағында Аҡай батыр Күсемов, Йософ батыр Арыҡовтар тороуы быны асыҡ күрһәтә. Азатлыҡ өсөн көрәш яу майҙандарында тарихҡа батыр исеме менән инеп ҡалған данлы, арҙаҡлы шәхестәрҙе сығарған. Исем-атына батыр исеме халыҡ тарафынан бирелеп, ҡуш булып киткәндәре тарихи документтарҙа ла шул исемдәре менән бергә йөрөй. Ундайҙар үҙҙәре бер шанлы плеяда. XVIII быуаттың тәүге яртыһындағы восстаниеларҙа ҙур урын тотҡан батырҙарҙан тарихи ҡағыҙҙарҙа ла шундай исемдәр йыш телгә алына: Айыҡкол батыр Ямантаев, Айыҡкол батыр Һөйөндөков, Алғушай батыр, Арыҫлан батыр Аҡҡулов, Имән батыр, Ҡарт Батыр, Күсәк батыр, Ҡыҙрас батыр Килдешев, Назарғол батыр, Раҡай батыр, Йомаҡай батыр Ҡужаҡов һ. б.

Халыҡ быңдай батырҙарын маҡтап йырҙар сығарған, исемдәрен легендаларға һалып хәтеренә беркеткән. Махсус ҡобайырҙар бағышлаған: "Сура батыр", "Сүкем батыр", "Баязит батыр", "Аҡшам батыр", "Кәбәк батыр", "Түлгән батыр" һ. б.

Батырҙарҙан батырҙарҙы ла халыҡ айырып ҡарар һәм ололар булған. Бына "Баязит батыр" ҡобайыры ни ти:

Илдәрҙә күп батырҙар:
Кейек аулар батыр бар,
Дошманды яулар батыр бар,
Илен һаҡлар батыр бар...
...Баязит батыр ир ине,
Батырҙан батыр Баязиттай,
Арыҫлан һынлы батыр бар,
Баязит батыр ир ине,
Күкрәгенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға тир ине,
Баязит батыр ир ине,
Яу ҡайтарыр ир ине,
Яу ҡайтарыр ир ине,
Нуғай мырҙа ғәскәрен
Ҡуй һарыҡтан тураҡлап,
Ҡан ҡалтырап онтаҡлап,
Иленә ҡайтыр ир ине.

Халыҡ шундай батырҙарына исемен, батырлыҡтарын яҙып, һәйкәлдәй итеп ҡәбер таштарын ҡуйыр булған. Ошондай бер ҡомартҡы булып, Шишмә Аҡзыяратында батырҙар ҡәбере таштары - башҡорт батырҙарының бер пантеоны һаҡланған. Бында XVI-XVIII быуаттарҙа иле алдында оло дан ҡаҙанған батырҙарын халыҡ Башҡортостан ил-еренең төрлө тарафтарынан килтереп, Аҡзыяратҡа ерләр һәм һәйкәлдәй бейек таштар яҙып ҡуйыр булған. Был хаҡта рус ғалимы Вильяминов-Зернов "Памятники с арабско-татарской надписью в Башкирии" (1859) тигән мәҡәләһендә айырып әйтә.

Һәр хәлдә, башҡорт халыҡ ижадында данланған, исемдәре тарихта билдәле булған батырҙарыбыҙҙы социаль-ижтимағи күҙлектән дә ныҡлы өйрәнәһе бар әле. Атаҡлы башҡорт абыҙдары, абыҙсылыҡ институты урта, яңы быуаттарҙа милли ижтимағи фекер үҫешендә ҙур урын тотһа, данлыҡлы батырҙарыбыҙ ҡаһарманлыҡ тарихының, быуаттар буйы азатлыҡ өсөн көрәш юлының алтын менән яҙылған биттәрен тәшкил итә. Килмәк абыҙ Нурышев, Бәпәнәй абыҙ Төрөпбирҙин, Кинйә абыҙ Арыҫланов, Батырша мулла Ғәлиев, Салауат батыр Юлаев, Бәҙерғол депутат Юнаев кеүек шәхестәребеҙ уҡымышлылыҡ, ғилемлелек һәләтен ҡаһарманлыҡ, яу батырлығы менән ҡушыуы йәһәтенән бөйөк заттар ҡатарында ҡала. Ошо аспектта уларҙың эшмәкәрлеген киңерәк өйрәнәһе һәм баһалайһы бар әле бөгөнгө ғалимдарыбыҙға.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,**
**яҙыусы, профессор.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**

✓ ***Нисек кенә булмаһын, һәр осраҡта ла вәғәҙә биргән кешенән яуап талап итергә кәрәк, сөнки был уны ниндәйҙер тәртипкә һәм киләсәктә үҙ һүҙе өсөн яуап бирергә өйрәтәсәк.***



# ҺӘР КЕМГӘ ЯҠШЫ

## был тауарын һатырға тырышҡан

**Ҡайһы саҡта үтә лә етди тормоштан, кисекмәҫтән хәл итергә кәрәкле мәшәкәттәрҙән арынып, дуҫтар менән ниндәйҙер аныҡ темаға түгел, ә "юҡ-бар" хаҡында һөйләшеп-әңгәмәләшеп алғы килеп китә. Төрлө һәм бәйләнешһеҙ темаларға алып барылған әңгәмәләрҙә бөгөнгө йәштәрҙең уй-фекерен дә, донъяға ҡарашын да тойоп була кеүек. Бөгөнгө шундай әңгәмәләштәрем - Өфө ҡалаһы Калинин районы Граждандыҡ хәле акттарын теркәү (ЗАГС) идаралығы әйҙәүсе белгес-эксперты Гүзәлиә Сәлим ҡыҙы ИСРАИЛОВА һәм Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы әйҙәүсе белгес-эксперты Руслан Ринат улы ЯҠУПОВ. Улар менән һөйләшеүҙең теҙгенен үҙ ҡулыма алып, әңгәмәбеҙҙе ҡайһы бер һорауҙарға яуап рәүешендә ҡорҙом. Шулай итеп...**

**▸ Йәшәйешебеҙҙә яуланған һәр баҫҡыс уңышҡа бәйле икәнен беләбеҙ. Ә уңыштың сере нимәлә тип уйлайһығыҙ?**

**Гүзәлиә:** Уңыштың сере ябай: ул кеше менән аралаша белеүҙә, тирә-йүнгә һәйбәт, ыңғай ҡарашта булыуҙа. Уңышҡа өлгәшеүҙең тағы ла бер шарты тип аҡыл менән эш итеүҙе һанайым. Шулай уҡ хәҙерге заманда ваҡыттың тиҙ үтеүен, ваҡиғаларҙың да тиҙ ҡуйырыуын иҫәпкә алмай булмай. Заман талаптарынан артта ҡалмайым тигән кешегә мобиль булыу уңышҡа өлгәшеүҙең төп шарттарының береһе ул.

**Руслан:** Минеңсә, уңыштың сере кешенең тормош позицияһында, донъяла булған ҡарашында, мөнәсәбәтендә. Позицияның ниндәй булыуы ла мөһим түгел, ә нәҡ уның булыуы шарт. Әгәр ҙә төплө позицияң бар икән, һис шикһеҙ, уңышҡа ирешеүгә ныҡлы аҙым яһалған тип әйтергә була.

**Гүзәлиә:** Нисек инде позицияның ниндәй булыуы мөһим түгел? Әгәр ҙә ул йәмғиәтте ҡыйратыуға, халыҡтар дуҫлығын тарҡатыуға, милләткә ҡарата насар аҙымдар эшләүгә ҡайтып ҡалһа - уның нимәһе һәйбәт булырға мөмкин? Ул саҡта, минеңсә, позицияның булғандан булмағаны яҡшы, ундай кешеләрҙең ыңғай тулҡындарға көйләнгән кешеләр артынан китеүе мең артыҡ.

**Руслан:** Бөгөнгө көндә күп йәштәрҙең генә түгел, хатта оло быуын вәкилдәренең дә төплө генә бер позицияһы юҡ кимәлендә, булған хәлдә лә, унда тотороҡлолоҡ юҡ. Шуға күрә, бик һирәктәр генә үҙе артынан башҡаларҙы эйәртеүсе көскә эйә. Ә ундай кешеләр үҙенән үҙе барлыҡҡа килмәй, бының өсөн баланы әүәләргә, тәрбиәләргә кәрәк, ә бөгөн, төрлө мәктәп, түңәрәктәрҙең күп булыуына ҡарамаҫтан, балалар үҙ-үҙҙәренә тапшырылған. Беҙ күберәк уның матди, физик яғын ҡайғыртабыҙ, ә рухи яғын онотоп китәбеҙ. Тотош милләт кенә түгел, ә һәр кеше үҙе бер айырым ваакумда йәшәгән төҫлө.

**Гүзәлиә:** Һинең менән килешәм. Һәр индивидтың айырым уңышынан тотош милләттең ҙур уңышы формлаша, сөнки кеше ниндәйҙер бер милләт вәкиле булараҡ уңышҡа ирешеп, үҙен генә түгел, ә тотош халҡын уңыш баҫҡысында юғарыраҡ күтәрә.

**Руслан:** Балалар һәм йәштәр алдында асыҡ ярылып ятҡан милли идея булғанда, барыһына ла файҙа күберәк булыр ине. Бындай идеяның булыуы ғына ла ҙур уңышҡа илтеүсе юлдың береһе тип әйтеп була.

**▸ Нимәлер вәғәҙә итеп тә, уны үтәмәгән кешегә нисек ҡарайһығыҙ? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙ һүҙенең хужаһы булмағандар хәҙер аҙым һайын бит...**

**Руслан:** Һәр ваҡыт, шулай уҡ был осраҡта ла, конструктив анализ яһау мөһим. Вәғәҙәнең үтәлмәүенә бер-нисә сәбәп булырға мөмкин: беренсенән, бәлки, һеҙ үҙегеҙ уны ниндәйҙер ҡыҫым аҫтына алып, ошондай вәғәҙә бирергә мәжбүр иткәнһегеҙҙер һәм ул һеҙҙе борсоуға, хафаға һалмаҫ өсөн үтәлмәҫе асыҡ булған вәғәҙәне биргән, икенсенән, уға төрлө хәл-ваҡиғалар ҡамасаулауы мөмкин, өсөнсөнән, вәғәҙә биреүсе аңлы рәүештә үҙ вәғәҙәһен үтәмәгән. Өсөнсө моментты тулыраҡ ҡарарға була, сөнки уның үҙенең бер-нисә вариантын килтерергә мөмкин: беренсенән, вәғәҙә биреүсе быны үс алыу маҡсатынан эшләмәгән; икенсенән, быға онотоу сәбәпсе булған; өсөнсөнән, вәғәҙә итеүсе үҙенең өҫтөнә алған бурысты хәл итә алмаған. Нисек кенә булмаһын, һәр осраҡта ла вәғәҙә биргән кешенән яуап талап итергә кәрәк, сөнки был уны ниндәйҙер тәртипкә һәм киләсәктә үҙ һүҙе өсөн яуап бирергә өйрәтәсәк.

**Гүзәлиә:** Эйе, донъяла төрлө хәлдәр була, шуға күрә кешегә осоп ҡунырға ярамай. Хәлдең торошона, айышына төшөнмәйенсә, аҙаҡ, бәлки, үкенергә тура киләсәк һүҙҙәр әйтеүҙән тыйылыу яҡшы. Тик, нисек кенә булмаһын, ниндәйҙер объектив ҡаршылыҡтар булмай тороп та, кеше вәғәҙәһен үтәмәһә, уға ҡарашым үҙгәрә. Әлбиттә, яҡшы яҡҡа түгел. Сөнки мин үҙем вәғәҙәмде һәр саҡ үтәргә тырышам, ә үтәй алмаҫтайҙы вәғәҙә итмәйем. Сөнки үтәй алмаҫынды әйтеп, кире яуап биреү күпкә һәйбәтерәк, ә вәғәҙә биреп тә уны үтәмәү кешене алдау булып сыға. Кеше һиңә ышанған, шуға нигеҙләнеп, ниндәйҙер маҡсаттар ҡуйған, эш стратегияһын билдәләгән, ә һинең ҡылығың быларҙың барыһын да емереүе бар. Ғөмүмән, бындай хәлдең килеп сығыуы артабанғы йәшәйештә мөһим роль уйнай. Ундай кешеләргә ҡараш үҙгәрә, киләсәктә уның һәр һүҙен үлсәп кенә ҡабул итә башлайһың, ә был, тора-бара, аралашыуға бөтөнләй сик ҡуйыуға килтерергә мөмкин.

**▸ Тормошта кешене уйланырға мәжбүр итеүсе сәбәптәр бик күп, шуларҙың иң мөһиме нимә?**

**Гүзәлиә:** Үҙ-ара мөнәсәбәт, көндәлек аралашыу кешене уйға һала, минеңсә. Үҙең йәки яҡындарың, һине уратып алған кешеләр менән булған ниндәйҙер хәл-ваҡиғалар ҙа уйланырға мәжбүр итә. Ҡайһы саҡта осраҡлы әйтелгән бер генә һүҙҙең дә оҙайлы уйҙарға һалыуы мөмкин. Кем менәндер һүҙ көрәштереү ҙә был йәһәттән эҙһеҙ үтмәй.

**Руслан:** Ә минеңсә, кешене уйға һалыусы бер генә көс бар - ул ҡурҡыу. Бары тик ошо тойғо ғына кешене, ысынлап та, уйға һалыуы мөмкин. Был тәбиғи күренеш, нормаль реакция. Бары тик ҡурҡыуҙың аңды томаламауы йәки һине бөтөнләй баҫып ҡуймауы ғына шарт.

**▸ Кешене маҡсатына илтеүсе, еңеүгә этәреүсе көс тип нимәне атар инегеҙ?**

**Руслан:** Мин бында беренсе һорауға бирелгән яуапты ҡабатлар инем. Ул - тормош позицияһы. Әгәр кеше тормош баһаһын белеп, матди яҡты ғына түгел, рухи хазиналарҙың да хаҡын белеп йәшәһә, күпкә өлгәшәсәк. Шулай уҡ алдыңа аныҡ маҡсат ҡуйырға, уның башҡарылырға тейешле аныҡ ваҡытын да билдәләй белергә кәрәк. Ниндәйҙер эште уның һөҙөмтәһе ниндәй буласағын яҡшы аңлап, күҙаллап башлаһаң, һис шикһеҙ, ҙур еңеүҙәргә өлгәшергә, маҡсаттарыңды тормошҡа ашырырға була, сөнки һәр кешенең мин-минлелеге бар. Уны урынлы һәм аҡыллы ҡуллана белеү генә шарт.

**Гүзәлиә:** Теләк, ынтылыш, башлаған эшеңә ихлаҫлыҡ менән тотоноу, айыҡ уйҙар менән йәшәү маҡсаттарға илтеүсе баҫҡыстың тәүге тупһалары. Тик бөгөнгө көндә кешенең алдына ҡуйғанын хәл итер өсөн былар ғына етмәй, ә кемдеңдер ярҙамы булыуы ла мөһим.

**▸ Кешене ҡайһы саҡта ҡурҡыныс аҫтына, ҡайһы саҡта ауыр һынауҙарға ҡуйған тәүәккәллек үҙен аҡлаймы?**

**Руслан:** Уны ҡайһы яҡтан алып ҡарайһың бит. Үҙен аҡларҙайын да табып була, мәғәнәһеҙлеккә еткәне лә бар. Әгәр ҙә ниндәйҙер минутлыҡ тойғоға бирелеп, үҙеңдең йә булмаһа яҡындарыңдың хәүефһеҙлеген, һаулығын ҡурҡыныс аҫтына ҡуяһың икән, бында ниндәй аҡлау табырға мөмкин? Быны мин хатта әхлаҡһыҙлыҡ тип әйтер инем. Ә тап киреһенсә булһа, йәғни, һорау йәшәү һәм үлем араһында торһа, был эшкә үҙеңдең тыуған илең хаҡына барһаң- был осраҡта тәүәккәллекте үҙен аҡларҙай сара тип тулы ышаныс менән әйтә алам.

**Гүзәлиә:** "Ятып ҡалғансы - атып ҡал" тигән мәҡәл иҫкә төшә. Ләкин һәр нәмәлә сама белеү кәрәк. Шуға күрә, кәрәкле урында һәм үҙ ваҡытында күрһәтелгән тәүәккәллек тулыһынса үҙен аҡлай, тип уйлайым. Һалҡын ҡанлылыҡ һаҡлап эш иткәндә, тойғоларға аҡылды тапап үтмәҫлек көс тапҡанда, бөтә эштең дә ахыры яйлы һәм ыңғай бөтөрөнә ышанырға була.

**▸ Һәр кеше менән дуҫтарса яҡшы мөнәсәбәттә бул, ләкин һәр ваҡыт арауыҡ һаҡла, тигән ҡағиҙәне нисек аңлайһығыҙ?**

**Гүзәлиә:** Бала саҡтан беҙгә кеше менән алсаҡ, ихлас, игелекле булырға өйрәтәләр. Тик ҡайһы саҡта беҙҙең алсаҡлыҡты, ихлаҫлыҡты үҙ файҙаһына ҡайырырға тырышыусылар була, бына шундайҙарҙан, ысынлап та, арыраҡ тороуың хәйерле. Шул уҡ ваҡытта һәр кешегә шик-шөбһәләр менән ҡарау ҙа килешмәй. Кеше йәмғиәттә яңғыҙы көн итә алмай, яҡындары, дуҫтары булыуы мотлаҡ. Яҡындарыбыҙҙы беҙ һайлап алмаһаҡ та, дуҫ итерҙәй кешене һайлау мөмкинлеге бирелгән.

**Руслан:** Һәр кемгә яҡшы булып булмай. Быны эшләргә тырышырға кәрәкмәй ҙә. Тормош беҙҙе көн дә тиерлек яңы кешеләр менән осраштыра, яңы ваҡиғалар уртаһында ҡайнарға мөмкинлек бирә, уларҙың берәүҙәре күңелдә тәрән эҙ ҡалдыра, кемдер иһә иҫеп үткән ел кеүек кенә булып ҡала. Барыһын да үткәрә



***Дуҫты "яһап", "эшләп", "барлыҡҡа килтереп" булмай. Был бер көнлөк йә бер ваҡиғаны ғына үҙ эсенә алған процесс түгел. Ысын дуҫтар ауыр мәлдә һанала. Ә бөгөнгө көн күҙлегенән сығып ҡарағанда, шатлыҡ-ҡыуаныстарыңды ысын күңелдән уртаҡлашырҙай кешеләрҙе "дуҫым" тип ауыҙ тултырып әйтергә була, тип уйлайым. Шуға күрә, мәҫәлән, бергәләп барып ҡайтҡан походтан һуң үҙҙәрен ысын дуҫтар тип һанай башлаған кешеләргә әллә ни ышаныс менән ҡарай алмайым. Ундай юлда осрашҡандарҙы "Минең танышым" тип әйтергә була. Сөнки кемделер дуҫ тип һанайһың икән, уның өсөн барыһына ла әҙер булырға тейешһең, ә беҙҙең үҙ ғүмеребеҙҙә меңәрләгән таныштарыбыҙ булыуы мөмкин, барыһы өсөн дә нимәлер эшләргә тип йүгерә башлаһаң, үҙең өсөн ваҡытың ҡалмаясаҡ.***

# БУЛЫП БУЛМАЙ,

## сауҙагәргә генә килешә

белергә, ваҡиғаларҙы кәрәгенән артыҡ ҡуйыртырға тырышырға ярамай. Барыһына ла һәйбәт булырға тырышыу ул үҙен идеаль етәксе итеп күрһәтергә маташҡан чиновникка йә иһә тауарын үткәрергә тырышҡан һатыусыға ғына килешәләр. Тирә-яҡ менән гармонияла йәшәү, кешеләр менән һәйбәт мөғәмәлә һаҡлау - матур, тулы йәшәйештең төп шарттарының береһе, ләкин шул уҡ ваҡытта кемделер дуҫ эшләргә тырышыу йә иһә кемгәлер үҙеңдең дуҫлығыңды тағырға тырышыу яҡшы һөҙөмтәләргә алып килмәй.

**Гүзәлиә:** Шул уҡ ваҡытта ваҡиғаларҙы үҙ ағымына ғына ҡуйыу ҙа дөрөҫ булмаҫ ине. Ҡайһы саҡта ваҡиғаларға әҙ генә боролош биреп ебәреү ҙә ҡамасауламаҫ, ә ул ваҡиғалар уртаһында ҡайнаған кешеләр менән дуҫ булып китеү мөмкинлеге лә ҙур. "Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын", тиҙәр бит. Тормош осраштырған һәр кем менән дуҫлыҡ ептәре бәйләп булмай, әлбиттә, ләкин бының өсөн ҡулайлы шарттар тыуһа, ни өсөн дуҫлашмаҫҡа?

**Руслан:** Дуҫты "яһап", "эшләп", "барлыҡҡа килтереп" булмай. Был бер көнлөк йә бер ваҡиғаны ғына үҙ эсенә алған процесс түгел. Ысын дуҫтар ауыр мәлдә һанала. Ә бөгөнгө көн күҙлегенән сығып ҡарағанда, шатлыҡ-ҡыуаныстарыңды ысын күңелдән уртаҡлашырҙай кешеләрҙе "дуҫым" тип ауыҙ тултырып әйтергә була, тип уйлайым. Шуға күрә, мәҫәлән, бергәләп барып ҡайтҡан походтан һуң үҙҙәрен ысын дуҫтар тип һанай башлаған кешеләргә әллә ни ышаныс менән ҡарай алмайым. Ундай юлда осрашҡандарҙы "Минең танышым" тип әйтергә була. Сөнки кемделер дуҫ тип һанайһың икән, уның өсөн барыһына ла әҙер булырға тейешһең, ә беҙҙең үҙ ғүмеребеҙҙә меңәрләгән таныштарыбыҙ булыуы мөмкин, барыһы өсөн дә нимәлер эшләргә тип йүгерә башлаһаң, үҙең өсөн ваҡытың ҡалмаясаҡ.

**▸ Бөгөнгө йәштәрҙе тотанаҡһыҙҙар тип әйтергә яраталар. Улар ысынлап та шулаймы? Ғөмүмән, тотанаҡлыҡ, баҫалҡылыҡ ниҙә сағыла? Һәм, ысынлап та, был сифаттар беҙҙең милләт улдарына һәм ҡыҙҙарына айырыуса хасмы?**

**Руслан:** Әйҙәгеҙ үҙебеҙҙе кешелектән айырып ҡарамайыҡ. Эйе, һәр милләттең үҙ үҙенсәлеге, үҙ холҡо, үҙ тәбиғәте. "Ни өсөн беҙ шулай, ә тегеләр былай?" тип баш ватып ултырғансы, өҫтөнлөктәребеҙҙе күтәреп сығыу мөһимерәк түгелме ни? Беҙҙең халыҡ баҫалҡы, тип түгел, ә көслө, аҡыллы, эшһөйәр, тип йә башҡа шундай сифаттары хаҡында һүҙ алып барһаҡ, үҫеп килеүсе быуынға файҙалыраҡ булмаҫ инеме?

**Гүзәлиә:** Бында һүҙ баҫалҡылыҡ тураһындамы йәки тотанаҡлыҡ хаҡындамы? Минеңсә, икеһе ике төрлө мәғәнәгә эйә.

**Руслан:** Эйе, килешәм. Бала саҡта барыбыҙ ҙа тотанаҡһыҙ, тиктормаҫ, шуҡ. Ләкин былар барыһы ла башта ғаиләлә, унан йәмғиәт тарафынан баҫыла, тыйыла бара, үҙ-үҙебеҙҙе аңлай башлағас та беҙҙе шымыраҡ булырға, иплəп ҡыланырға, ғөмүмән, тотанаҡлы булырға өйрәтә башлайҙар. Быны ҡабул итеү-итмәү һәр кешенең үҙенән тора, сөнки беҙгә һайлау хоҡуғы бирелгән. Әлбиттә, тотанағыраҡ булыу кәрәк, ләкин ул үҙеңә зыян килтерерҙәй сифатҡа әйләнһә, уның бер һәйбәтлеген дә күрмәйем.

**Гүзәлиә:** Айырып ҡараумы, юҡмы, ләкин беҙҙең милләт йәштәренең баҫалҡылығы ярылып ята бит инде. Айырыуса ауылдан ҡалаға килгән йәштәребеҙҙең күбеһе әйтер һүҙен әйтергә ҡыймай, үҙ эсенә бикләнеп, төрлө хәлдәрҙе ауыр кисерә. Әлбиттә, әҙәплелек һәр кемде биҙәй, тик әҙәпле булам тип, үҙеңә кире йоғонто яһарҙай сикте үтеп, кәрәгенән артыҡ баҫалҡы булырға ярамай. Ысынлап та, ни өсөндөр бала саҡта беҙҙе күберәген тыйыуҙар аша тәрбиәләйҙәр: быны эшләһәң - алама була, тегеләй эшләһәң - оят, кеше нимә әйтер һәм башҡалар. Шуға күрә, үҫеп еткәс, ошо "ярамай" тигән барьерҙы аша атлап үтеү күпте талап итә һәм кемгәлер быны эшләүе үтә лә ауыр.

**Руслан:** Баҫалҡылыҡ һәр кемгә хас, уны тотош милләт холҡон билдәләүсе сифат тип һанамайым. Тағы ла шул: ниндәйҙер аныҡ ситуацияла быға тиклем үтә лә баҫалҡы, тыйнаҡ тип һаналып йөрөгән кеше лә үҙен бөтөнләй икенсе яҡтан асырға мөмкин. Шуға күрә үҙеңдең булмышыңды аша атлап үтергә тырышыу һөҙөмтә бирмәйәсәк.

**▸ Һәр кем тормош юлында бер тапҡыр булһа ла аңлашылмаусанлыҡ стенаһына бәрелә. Ошо ситуацияла ни эшләргә?**

**Гүзәлиә:** "Сабырлыҡ - һары алтын". Бөгөн аңлашылмаусанлыҡ кәртәһенә барып төртөлһәң, икенсе тапҡыр ошо уҡ хәл һинең алда бөтә мөмкинлектәрҙе асыусы юл булып тороуы ла ихтимал. Ғөмүмән, ниндәй хәлдә лә үҙеңде ҡулда тоторға, тынысланып, барыһына ла ентекле анализ үткәрергә, ни өсөн шулай килеп сыҡҡанын икенсе күҙлектән ҡарап баһаларға тырышырға кәрәк. Бөтә хәлдән дә сығыу юлы бар һәм ул һәр ваҡыт таҡыр һәм боролоштарһыҙ була, тип аңларға ярамай. Бәлки, был аңлашылмаусанлыҡ стенаһы һеҙгә икенсе юл күрһәтеү өсөн махсус барлыҡҡа килгәндер? Тормошта нимә эшләнһә лә, бары тик яҡшыға, тиҙәр, күп тапҡыр һынағаным бар, был, ысынлап та, шулай.

**Руслан:** Ҡайһы берҙә ул стенаны һөжүм менән дә алырға мөмкин, икенсе ситуацияла иһә ситкә шылып тороу күпкә һәйбәтерәк. Бөтә килеп тыуған ситуацияла ла ғәйеп бер яҡлы ғына булмай, мәсьәләне ыңғай хәл итер өсөн ике яҡҡа ла ниндәйҙер компромисс табыу, бәлки, үҙ позицияларыңды үҙгәртеү мөһим. Һине аңламай тип һанаған кешене генә ғәйепләү, минеңсә, ахмаҡлыҡҡа тиң. Бәлки, һин үҙең нимә теләгәнеңде уға аңлайышлы еткерә алмағанһыңдыр? Нимә теләгәнемде үҙем белмәйем, тигән кеүек килеп сыға бында.

**Гүзәлиә:** Бер үк стенаға бернисә тапҡыр барып бәрелергә лә мөмкин дә инде. Кешенең күп тапҡыр һине аңламауы, нисектер, шикле тойола. "Белмәгәндең беләге тыныс" тигән кеүек, аңламағандың күңеле тыныс инде.

**Руслан:** Ниндәй осраҡта ла үҙ-үҙеңә бикләнергә һәм, иң мөһиме, үҙеңә лә ошондай уҡ стена төҙөргә тотонмаҫҡа кәрәк, сөнки һәр ошондай осраҡтан һуң яңынан-яңы аңлашылмаусанлыҡ стеналары ҡалҡа башлаһа, йәшәргә лә, ижад итергә лә, тормошто һөйөргә лә, үҙең һәм халҡың өсөн файҙалы эш эшләргә лә ваҡытың да, хәлең дә, теләгең дә ҡалмаясаҡ. Бындай "стеналарҙың" күбәйеүе битарафлыҡҡа килтерә, ә битарафлыҡ, үҙ сиратында, кешелекте көрсөккә алып барып терәүсе юл булыуы ихтимал...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә аҡыллы ғына булды буғай. Төшөнкөлөккә бирелеп ултырмаған, йәшәйештәге бар күңелһеҙ ваҡиғалар сығанағын ситтән түгел, ә тәү сиратта үҙенән эҙләргә кәрәклеген аңлап йәшәгән, тырышлыҡ һәм аҡылды бер-береһен тулыландырыусы сифаттар итеп ҡабул иткән ошондай йәштәребеҙ киләсәкте "әүәләй". Бәлки, ҡоробоҙҙа ҡатнашҡан йәштәрҙең әңгәмәһенә үҙенекен ялғарға батырсылыҡ иткәндәр булыр? Хаттар көтәбеҙ.**

**Гөлназ САФУАНОВА әңгәмә ҡорҙо.**

*ӘЙТӘГҮР!*

# БИЛӘГӘН УРЫНЫҢ ТҮГЕЛ,

## башҡарған эшең күркәм булһын

**Ҡулдарына диплом алған йәш белгестәр өсөн йәй иң ҡыҙыу мәл, сөнки студент эскәмйәһе, йәшлек менән хушлашып, улар оло тормош юлына аяҡ баҫа һәм был юлда осраған тәүге хәл итәһе мәсьәлә - ул эш урыны табыу. 2011 йылда ҡулдарына диплом алған йәш белгестәр был мәсьәләне нисек хәл итә икән?**

**Әнүзә АБДУЛЛИНА, Башҡорт дәүләт университеты Сибай филиалының тәбиғи-математика факультетын тамамлаусы:** Быйыл ҡулдарына диплом алған 54 курсташымдың 70 проценты тирәһе үҙ һөнәре буйынса түгел, ә төрлө магазиндарҙа һатыусы, реклама агенты, риэлтор һәм башҡа төрлө эштәргә урынлашып бөттө. Беренсенән, ҡайҙа барма, йәш белгестән һөнәре буйынса эш стажы талап итәләр, икенсенән, эш хаҡы үтә лә әҙ. Кисәге студенттың ниндәй эш стажы булыуы мөмкин һуң? Уйлап-уйлап, баштар етмәй. Ә эш хаҡын әйтеп тә тораһы түгел. Миңә ниндәйҙер кимәлдә уңыш йылмайҙы тип әйтергә була, сөнки 4 курсты тамамлағас, үҙ һөнәрем буйынса мәктәпкә эшкә урынлашыу мөмкинлеге килеп сыҡты. Балаларға химия, биология һәм география фәндәре буйынса белем бирәм һәм артабанғы яҙмышым мәктәп менән бәйле булыр тип уйлайым, сөнки миңә балалар менән эшләү оҡшай. Күптәр кеүек ҡалала ҡалырға атлығып торманым, ә ауылды һайланым, шуға күрә эш хаҡым да етә кеүек. Ләкин тормошта төрлө хәлдәр тыуыуы мөмкин, шуға күрә әлеге ваҡытта ситтән тороп, университет тәҡдим иткән ҡулайлы шарттарҙы ҡулланып, иҡтисадсы һөнәре буйынса икенсе юғары белем алам, сөнки "запас" һөнәрем булыуы миңә алдағы көнгә ышаныс менән бағырға көс бирә.

**Гөлназ ХӘМЗИНА, Өфө дәүләт нефть техник университетының иҡтисад факультетында бакалавриат тамамлаусы:** Быйыл бакалавр буйынса диплом яҡланым һәм артабан ике йыл магистратурала уҡыясаҡмын, шуға күрә эш эҙләү мәсьәләһе быйылға мине урап үтте. Ә йәш белгестәргә эш урыны табыу мәсьәләһенә килһәк, минең күҙәтеүем буйынса хәлдәр ошолай: таныштарымдың күбеһе Өфөлә йә башҡа ҙур ҡалаларҙа эш табып, төпләнергә тырыша, сөнки ауыл-райондарҙа әле булһа күпселек эш урындарын хаҡлы ялға сыҡҡан, әммә ләкин эш урынын ҡалдырып китергә теләмәгән ағай-апайҙар биләй. Был эш әкренләп яйға һалынып килә, тик тыуасаҡ яҡты көндәрҙе көтөп ятып булмай, бөгөн үк тормошто яйлау мәсьәләһен хәл итергә кәрәк. Тағы ла бер моментты билдәләп үтеү мөһим: бөгөнгө көндә йәш белгестең белеме, ижади дәрте, энтузиазмы, нимәгәлер ынтылышы "ҙур" ағай-апайың менән тулыланған булыуы шарт, шул саҡта ғына диплом алыу тантанаһы тыныс һәм күтәренке кәйефтә уҙасаҡ, сөнки тылың ныҡлы булыуы ғына күңел көрлөгө бүләк итергә мөмкин.

**Руслан КУСКИЛДИН, Санкт-Петербург кино һәм телевидение университетының идара итеү факультетын тамамлаусы:** Студент йылдарында уҡ аралашыу даирәһен киңәйтеү, күберәк таныштар булдырыу мөһим, сөнки уларҙың кемеһелер киләсәктә яҡшы эш урыны тәҡдим итергә, йәки эш урыны буйынса файҙалы мәғлүмәт бирергә мөмкин. Бөгөнгө көндә йәш белгестәр күберәген шул уҡ туғандары, таныштары, интернет селтәре ярҙамында эш эҙләй, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған төрлө вакансияларҙы ҡарай. Үҙемә килгәндә иһә, ҡулға диплом алғас, эшҡыуарлыҡҡа тотонорғамы йәки дәүләт ойошмаһында эшләргәме тигән һорау торҙо һәм дуҫтарҙың кәңәше буйынса Өфөлә урынлашҡан дәүләт ойошмаһына эшкә килдем, ләкин үҙемдең эшемде асыу хаҡындағы уйҙарҙы тәрәнгә йәшермәнем. Мин һайлаған ойошманың эше эшҡыуарлыҡ өлкәһенә бик яҡын, шуға күрә, тәжрибә туплау маҡсатында нәҡ ошонда килдем дә инде, ә киләсәктә мотлаҡ үҙ эшемде асасаҡмын. Ә әлегә студент һурпаһын һемергәндәргә әйтер һүҙем шул: ауылым, ата-әсәйем тип ауылығыҙға йәбешеп ятмағыҙ, бейек үрҙәргә артылыу өсөн, ныҡлы карьера эшләү өсөн ҙур ҡалалар күпкә ҡулайлыраҡ.

**Рәмил СӘЙФУЛЛИН, Магнитогорск ҡалаһында иретеп йәбештереүсе һөнәрен үҙләштереп, ҡулына диплом алыусы:** Мин уҡып бөтмәҫ элек үк һәйбәт килем килтергән эш урыным бар ине, сөнки барыһы ла киләсәктә үҙләштергән һөнәре буйынса эш буласаҡмы-юҡмы икәнлеген дә уйламайынса, юғары уҡыу йорттарының ҡабул итеү комиссияларына "һөжүм" иткәндә, мин тыныс ҡына профессиональ училищеға документтар тапшырҙым. Бында конкурс юҡ икән тип уйламағыҙ, көслө генә конкуренция үтеп, уҡырға инергә тура килде. Һайлаған һөнәрем миңә һәр саҡ икмәк-майлыҡ килем килтерәсәгенә иманым камил, сөнки бөгөн "аҡһөйәк" профессия эйәләре хеҙмәт баҙарында шығырым тулы, ә эшсе ҡулдарға ҙур һорау күҙәтелә. Киләсәктә был хәл тағы ла ҡырҡыулашыр, күрәһең, шуға күрә миңә ярҙамсы булып юғары белемле юрист йәки бухгалтер килһә, бер ҙә аптырамаясаҡмын. Төптән ҡараһаң, кеше бит биләгән урыны, юғары белеме менән түгел, ә башҡарған эше менән күркәм.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

*✓ Тик, ни ғәжәп, үҙҙәре ҡайны-ҡәйнәләренә йыш ҡунаҡҡа йөрөһәләр ҙә, хәлле йәшәһәләр ҙә, уңған бажанан башҡалары береһе лә табынға ҡүстәнәс тотоп килә белмәгән.*



КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

Рауил БИКБАЕВ,
Башҡортостандың халыҡ шағиры.

**267**

Бәхетһеҙлеккә сәбәптер
Ошо өс хәл:
Яҡшылыҡ эшләһәң, рәхмәтен әйтмәгән,
Насарлыҡ эшләһәң, һис ғәфү итмәгән,
етәкселәр беренсеһе;
Изгелек күрһә, ергә күмгән,
Яманлыҡ күрһә, донъяға сәскән
күршеләр икенсеһе;
Янында саҡта ирен рәнйеткән,
Янда ире юҡта хыянат иткән
ҡатындыр өсөнсөһө.

**268**

Имандың кейеме - тәҡүәлек,
Иманға оялыу килешер.
Шәриғәт - имандың байлығы,
Изге эш - имандың емеше.

**269**

Һәр хәләттә, һәҙҙә, эштә
Тоғро юлдан ситкә төшмә.
Ожмах - күп ишекле йорттор,
Бер ишеге - тоғролоҡтор.

Һаҡланығыҙ алдашыуҙан,
Ялған эшкә ҡатнашыуҙан.
Ҡапҡалары күп тамуҡтың,
Бер ҡапҡаһы - алдау, мутлыҡ.

**270**

Ҡыуаныска тулһа күңелең
Һин яҡшы эш эшләгәндә,
Бошондорһа хаталарың,
Һин - иманлы тоғро бәндә.

**271**

Ялған телле, ике һүҙле,
Ике йөҙлө булһа бәндә,
Ике яҡтан ике ялҡын
Ялмар уны йәһәннәмдә.

**272**

Күңелендә кем йөрөтә
Туҙан хәтле тәккәберлек,
Ахыры заман еткәс, тапмаҫ
Юлды ожмахҡа үтерлек.

**273**

Тупаҫлығы арҡаһында
Уны урап үтһәләр,
Шул кешенән насары юҡ,
Һөмһөҙлөк итер һәләк.

**274**

Оҙон ғүмер дөрөҫ йәшәп,
Күреп күп рәхмәт, сауаптар,
Васыятын хата яҙһа,
Вариҫтары рәнйеп ҡалһа,
Көтөр уны күп ғазаптар.

**275**

Кемдең ҡылығы килешле,
Шуның иманлы эше.
Буш һүҙҙәрҙән ҡаскан кеше
Камиллыҡҡа ирешер.

Балға кем һуң әрем ҡушыр?
Бал шикелле саф иманға
Яуызлыҡ әрем иһе.

**276**

Әле эшкә әйләнмәһә,
Әйтмәһә теле,
Бәндәнең насар уйҙары
Ғәфү ителер.

**277**

Әйтте Рәсүл: "Кемдең килә бик белгеһе
Донъя менән әхирәттең айырмаһын,
Йылғаға ул бер бармағын манып алһын.
Шул бармаҡта тороп ҡалһа ни саҡлы һыу,
Был донъяла йәшәүендең асылы шул.

(Дауамы бар).

**Балалар әҙибе, Башҡортостан һәм Рәсәй яҙыусылар союзы ағзаһы Флүр Яхинды беҙ шат күңелле, тормоштан йәм табып йәшәүсе күркәм кеше итеп белә инек. Уның ябайлығы, кешеләр менән мөнәсәбәтендәге ихласлығы, хеҙмәтендәге һәм ижадындағы фиҙаҡәрлеге тыуған еребеҙгә, үҙ асылына тоғролоғонан килгәндер. Флүр Башҡортостан ауыл хужалығы институтының агрономия факультетын тамамлағандан һуң, ғүмеренең ахырынаса агроном, колхоз рәйесе, районДың ер комитетында хеҙмәт итә. Күреүегеҙсә, был һөнәрҙәр барыһы ла ергә бәйле. Әҙәби ижадта ла Флүр Яхин бер өлкәгә, балалар әҙәбиәтенә, асылда, әкиәт жанрына тоғро булып ҡалды. Уның төрлө йылдарҙа баҫылып сыҡҡан "Яңы әкиәттәр", "Балалар әкиәт һорағас" һәм башҡа китаптары балалар һәм үсмерҙәр тарафынан йылы ҡабул ителде. Ф.Яхин әкиәттәренең үҙенсәлеге шунда: уларҙа заман һулышы бар, улай ғына ла түгел, яҙыусының һәр бер әкиәтендә хәҙерге замандың иң актуаль проблемалары әкиәти итеп күтәрелә һәм хәл ителә. Үкенескә ҡаршы, әкиәтсе дуҫыбыҙ фажиғәле рәүештә арабыҙҙан китеп барҙы. Уның 1 августа (1945) тыуған көнө, шуны ла иҫкә алып, һеҙҙең иғтибарға Флүр Яхиндың өс заманса әкиәтен тәҡдим итәбеҙ.**

# ЗАМАНСА ӘКИӘТТӘР

## ТЫЙНАҠ БАЖАЛАР

Йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Булған, ти, уларҙың ете ҡыҙы. Ете ҡыҙҙың булған, ти, ете кейәүе. Ете бажаның ете төрлө холҡо булған, ти. Береһе үтә оялсан, икенсеһе самаһыҙ ҡыйыу, өсөнсөһө яйман, дүртенсеһе ифрат ҡабалан, бишенсеһе ғәжәп тигәнсә бошмаҫ, моңһоҙ, алтынсыһы уңғандың-уңғаны, етенсеһе ялҡауҙың-ялҡауы, ти. Етәүһе бергә йыйылһа, ҡарап тороуы ҡыҙыҡ, ти, быларға.Өйгә инер алдынан башта кемгә үтергә, табында ҡайҙа ултырырға, күпме, нисек ашарға кәрәклеген асыҡлап хәлдәре бөткән. Өҫтәл артында ялған әҙәп һаҡлап, табынға ҡуйылған ризыҡҡа етешер-етешмәҫ ултырғандар, үтә ашамһаҡ, сама белмәҫ әҙәм булып күренеүҙән ҡурҡҡандар. Араларындағы үтә ҡыйыу бажа ғына бер ҙә тынмай, осортоп та, аштырып та һөйләгән дә һөйләгән.

Берҙән-бер көндө әбей ғәҙәтенсә билмән бешергән, табағына төшөргән дә ете кейәүен ашҡа саҡырып алған. Әйткән сәғәткә бажалар берәм-берәм ҡәйнәнең ҡапҡа төбөнә йыйыла башлаған. Яйман бажа иң алдан килеп еткән, ти. Ҡабалан бажа иң һуңға ҡалған, ашыға торғас, башына кейергә лә онотоп килгән, имеш. Уны көтөүелләп торған яйман, әллә ай, әллә ҡояш тиһәм, һинең таҙ башың ялтырай икән дә, тип ҡабалан бажаны мәрәкәләгән. Ҡабалан да аптырап тормаған, һине килеп етмәҫ тигәйнем, ҡунаҡ тигәндә әллә ҡистән үк өлгөргәнһең инде, тигән булған. Шулай ҡыҙыу-ара бер-береһен үпкәләтмәй генә шаяртып бөткәс, хәҙер инде бер төптән булып, ҡалған бажаларҙы ирештергәндәр. Миҫкә тәғәрәйме тиһәк, уртансы бажа, һин икәнһең дә, тип көлөшкәндәр. Ҡатыны менән бергәләшеп ҡүстәнәсен саҡ күтәреп, ахмалға төшөп килеп еткән егәрле бажанан да көлөр яйын тапҡандар: әллә ашап туймаҫ, ятып йоҡларға мендәр ҙә алып килгәнһегеҙ инде, тип юҡтан да мәҙәк тапҡан булғандар. Тегеләре лә яуапһыҙ ҡалмаған, һеҙҙең һымаҡ ике ҡулды ғына һелтәп йөрөп булмаҫ инде, тип бажаларының белдекһеҙлегенә төрттөргәндәр. Оялсан бажа ҡатыны биреп ебәргән табаҡты артына йәшереп баҫып тора икән. Бажалар уны ла ирештермәксе булып ауыҙҙарын асыуы булған, быныһы йәһәт кенә: "һеҙҙе ҡайғыртам, күмәк кешегә ҡайны ҡарттарҙың һауыт-һабаһы етә микән?" - тип әйтә һалған. "Йә, көн дә ҡунаҡ буламы?" - тип үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә, үтә ҡыйыу, үтә ҡыйыу булғанға ла үтә һөйләнсек бажа килеп еткәс, өҫтәл артына ултырышҡандар. Ултырышыр алдынан тағы бер гөжләшеп алғандар, йәғни кем ҡайҙа ултырырға тейешлеген асыҡлағандар. Оло бажа кесеһенә, һин алыҫтан килгәнһең, әйҙә, түргә уҙ, тигән. Кесеһе олоһона, юҡ, һин өлкәнерәк бит, түргә һин үт, тип ҡаршылашҡан. Уртансы бажа, өҫтәл мөйөшөнә ултырмайым, тип һүҙ ҡуйыртҡан, мөйөштә ултырыусы буйҙаҡ ҡала, тип борсолған. Бер-береһен төрләсә ҡыҫташа торғас, әллә күпме ваҡыт үткән. Һәр бажа ла үҙен итәғәтле, тыйнаҡ, ихтирамлы итеп күрһәткеһе килгән. Тик, ни ғәжәп, өҫтәл артына теҙелешеп ултырышып алғас, береһенән-береһе уҙҙырып маҡтаныша башлағандар. Кем нисә баш һуғым һуйған, кемдең күпме аҡсаһы бар, кем нимә һатып алырға йыйына - береһе лә ҡалмаған, телдәре телгә йоҡмаған. Бөтәһе лә шундай байҙар, мул, етеш тормошта ғүмер һөрәләр, ти. Тик, ни ғәжәп, үҙҙәре ҡайны-ҡәйнәләренә йыш ҡунаҡҡа йөрөһәләр ҙә, хәлле йәшәһәләр ҙә, уңған бажанан башҡалары береһе лә табынға ҡүстәнәс тотоп килә белмәгән.

Ҡәйнә өҫтәлгә оло табаҡ менән боҫрап торған билмән килтереп ултыртҡас, һин башла, юҡ, һин башлап ауыҙ ит, тип ғәҙәттәренсә ҡыланышҡандан һуң ғына ашҡа үрелгәндәр. Бер табаҡ билмәндән берәү генә тороп ҡалғас, береһе лә үрелмәй ҙә ҡуя, ти. Эстән генә һәр бажа, һуңғы ҡабым ризыҡты кем ашай, шул башҡаларҙы ҡунаҡҡа саҡырырға тейеш була бит инде, тип уйлаған. "Йә, кесе бажа, төбөн күр ҙә йүнен хәстәрлә", - тигән уға оло бажа. "Башта үҙең өлгө күрһәт", - тигән уға кесе бажа. Ҡәйнә кеше, ямандан ярты ҡашыҡ аш ҡала, ярай инде, һәйтеулашмағыҙ, тип ҡыҫтаһа ла, һуңғы билмәнде берәү ҙә ашамаған. Шул саҡ өйҙә ҡапыл ут һүнгән. Ҡараңғынан файҙаланып, ете бажа барыһы бер юлы билмәнгә ташланған. Өлгөр оло бажа билмәнде башҡаларҙан алда ҡулы менән усмарлап алған, ҡалған бажалар уның билмән тотҡан ҡулына сәнскеләрен ҡаҙаған. Оло бажа ауыртыуҙан аҡырып ебәргән. Уның тауышынан ҡото алынған ҡайны тиҙ генә шәм ҡабыҙып ҡараһа, билмәнде йомарлап тотҡан ҡулда алты сәнске ҡаҙаулы тора, ти. Бына һинә тыйнаҡ бажалар! Күрмәһәгеҙ, күрегеҙ!

## ХӘБӘР ТОҠСАЙЫ

Әбей менән бабайҙың өс ҡыҙы булған. Улар бер туктауһыҙ төпсөнөп, һорау биреп, яуап таптырып йөҙәткәндәр. Ғәҙәттәгесә, ата-әсәһен йонсота икән былар: төшкө аш мәлендә оло ҡыҙы быларҙан, нимә ул ғәйбәт, тип һораған. Ғәйбәт - төрлө имешмимеш хәбәр инде ул, тигән әсәһе. Ә нимә ул хәбәр, тип әләктереп алған уртансыһы. Ситтән килеп ишетелгән насар йәки һәйбәт һүҙ, тигән атаһы. Нимә ул насар, нимә ул һәйбәт, тип төпсөнә башлаған төпсөк ҡыҙ. Һорауҙарҙан башы ҡатып киткән атай кеше уйлап торған да:

- Бына нәмә, ҡыҙҙарым, һорауҙарығыҙға яуапты үҙегеҙ эҙләп табығыҙ. Үҙең тапҡан яуап иң дөрөҫө була, - тигән.

- Ә нисек эҙләргә? - тип һикерәнләшкән ҡыҙҙар.

- Төштән һуң өсөгөҙ бергәләп ауылды урап ҡайтығыҙ. Юлда нимә тап итәһегеҙ, ҡайтҡас һөйләп бирерһегеҙ. Хәтерегеҙҙә ни ҡалған, шул "хәбәр тоҡсайы" тип атала. "Хәбәр тоҡсайығыҙҙы" ҡайтҡас бушатып күрһәтерһегеҙ, эсендә ғәйбәтме, һәйбәтме, әллә буш хәбәр генә ятҡанын шунда күрербеҙ, - тигән.

Ҡыҙҙар аллы-артлы эйәртенешеп сығып киткән. "Хәбәр тоҡсайҙарын" тултырып, кескә күтәреп, киске сәйгә генә ҡайтып еткәндәр.

- Йә, бушатығыҙ инде "хәбәр тоҡсайҙарығыҙҙы", кемегеҙ нимә тапты, ҡарап ҡарайыҡ, - тигән аталары өҫтәл артына ултырғас.

Башта иң сабырһыҙ оло ҡыҙ һүҙ башлаған.

- Өйҙән сығып әҙ генә барғас та юлда йығылып ятҡан бер бабайға тап булдым. Өҫтө-башы туҙан, таяғы - бер ерҙә, эшләпәһе икенсе урында аунап ята. Ҡапҡа төбөндә килене, балалары ултыра, ә бабайға иғтибар ҙа итмәйҙәр. Уны күтәреп торғоҙорға, өйгә индереп һалырға баштарына ла килмәй йүнһеҙҙәрҙең. Шунан, ары атлаһам, бер бөләкәй малай сыбыҡ-сабыҡ тейәлгән ҡул арбаһын һөйрәй алмай аҙаплана, көсө етеңкерәмәй. Эргәһендә ағаһы, апаһы көлөп тора, ярҙамлашыу уйҙарында ла юҡ. Китә бирһәм, бер әбей ҡоҙоҡтан һыу ала алмай этләнә. Өй тулы ҡыҙҙар була тороп, ҡарт әсәләрен һыуға ебәргәндәр...

Оло ҡыҙын иғтибар менән тыңлап ултырған атай кешенең кәйефе ҡырылып киткән. Хуп, инде уртансы ҡыҙымды тыңлап ҡарайыҡ, тигән.

- Минең күргәндәрем апайымдыҡынан әллә ни айырылмай, - тигән уныһы. - Фәлән кешеләр тапҡырында урамда фәлән олатай ята ине. Арыраҡ фәлән малай арбаһына көсө етмәй ыҙалаһа, тағы ла арыраҡ фәлән инәй һыу күтәрә алмай интекте, - тип йәһәт-йәһәт дөйөм рәүештә генә теҙеп сыҡҡан уртансы ҡыҙ. Ул күргән кешеләренең исемдәрен дә белмәй, күрәһең, апаһы һөйләгәндәрҙе генә ҡабатлап маташҡан.

Аталары, йөҙө һаман һытылған килеш, кесе ҡыҙына өндәшкән. "Ниңә улай "хәбәр тоҡсайыңды" бушатырға бер ҙә ашыҡмай ғына ултыраһың әле?" - тигән.

- Апайымдар - алдан, мин арттанырак атланым. Аҙ ғына барғас та Шәрип олатайға тап булдым. Ныҡ ҡартайған. Нисек ҡолаған - уныһын күрмәнем. Аяғына баҫтырып, өҫтөнән туҙанын ҡағып, башына эшләпәһен кейҙереп, ҡулына таяғын тоттороп киттем. Рәхмәтен әйтеп, доғаһын уҡып ҡалды. Бара бирһәм, һабаҡташым Ғәли үҙҙәренең күршеһе Мөғлифә әбейҙең сытыр тейәлгән арбаһын һөйрәй алмай ятҡан, көсө етмәгәс, этешеп мендерештем дә ары киттем. Мөғлифә әбей ситән аша рәхмәт әйтеп, сәй эсергә кер, тип ҡысҡырып саҡырып ҡалды. Ҡайтыр юлға боролғас, Шәрифә өләсәйҙең һыулы күнәктәрен елкәмә күтәреп алдым да ол ыңғайы өйҙәренә керетеп сыҡтым. Бөттө, "хәбәр тоҡсайымды" бушаттым, - тигән кесе ҡыҙ. - Инде ни әйтерһең, атай?

Аталары көрһөнөп, һығымта яһаған.

- Өсөгөҙҙән дә "хәбәр тоҡсайы", бер үк күренешкә тап булһағыҙ ҙа, өс төрлө булып сыҡты бит әле, - тигән. - Һин, оло ҡыҙым, гел кешене ғәйепләп һөйләнең. Был инде ғәйбәт тип атала. Уртансы ҡыҙым, һин тоҡсайыңа урам хәбәре генә йыйғанһың. Буш һүҙҙе нинә йыйырға? Кәрәкмәй улай. Кесе ҡыҙым бына, исмаһам, күп рәхмәттәр ишеткән, үҙенә әллә күпме сауаптар йыйған. Үҙ һорауҙарығыҙға яуапты, оло һәм уртансы ҡыҙҙарым, һеҙ әлегә тапмағанһығыҙ. Барығыҙ, тағы ла эҙләп ҡарағыҙ, - тип уларҙы урамға сығарып ебәргән дә төпсөк ҡыҙын, һәйбәт нәмәне һин табалаһың инде, тип маҡтай-маҡтай, арҡаһынан һөйгән, ти.

# АЙЫУ БАТША

Астан интегеп йөрөгән төлкө бүреләр ашап бөтмәгән түшкәгә тап булған. Аңһат ҡына тамаҡ туйҙырғас, уның көн дә ыҙаламай-нитмәй генә һыйланып йөрөү теләге тыуған. Тик нисек? Төлкө үҙенсә хәйлә ҡороп, ҡустәнәскә бер киҫәк ит күтәреп, айыу янына киткән.

Айыу тәмләп итте ашап бөткәс, төлкө:

- Ҡустәнәс оҡшанымы? Оҡшаһа, көн дә шулай һинә ит киҫәге килтерермен, тик... - тип һүҙ башлаған. Айыу, ауыҙын ялап:

- Нимә "тик", һин миңә көн дә алып кил! - тип үкергән.

- Ите булһа, уны килтереү бер ни ҙә тормай. Уны миңә көн дә әҙерләп биреүсе генә кәрәк. Был эш минең үҙемдең генә ҡулдан килмәй. Һинең ярҙамың кәрәк, - тип айыуға өндәшкән. - Бының өсөн һине бөтә урманға, әйҙә, батша итеп һайлатайыҡ, - тигән.

- Эйе шул, - тип ҡыуанып киткән айыу. - Унан батшаны тыңламай ҡараһындар! Итте улар һиңә киҫәкләп түгел, түшкәләп әҙерләрҙәр. Бар, бөтә йәнлектәрҙе минең янға саҡыр. Батша һайлайбыҙ, тип әйт!

Төлкө урмандағы бар хайуандарҙы йыйған. Улар алдына ҙур ҡорһағын киреп сығып баҫҡан айыу:

- Ағай-эне! Беҙҙең урманда йәшәргә бөтә шарттар ҙа бар. Тик әлегә һәр кем үҙ алдына йәшәй. Бындай тарҡаулыҡ ярамаҫ. Барыбыҙ ҙа бер батшалыҡта бер батшаға буйһоноп йәшәргә тейешбеҙ, - тип һүҙ башлаған. - Бөгөн һеҙ мине хаким итеп һайлағыҙ. Батша булһам, һеҙгә байман тормош вәғәҙә итәм!

Айыу, үҙенең ысын ниәттәрен күрһәтмәҫ өсөн, тештәрен ыржайтмай ғына телмәр тотҡан, ягымлы йылмайырға тырышҡан, тырнаҡтарын эскә йәшергән. Хатта йыртҡыслығын белдереп тороусы тырпай йөндәрен шымартҡан. Һәр йәнлектең йомшаҡ ҡына итеп ҡулын ҡыҫып сыҡҡан.

- Ҡарағыҙ әле, айыу тиклем айыу үҙе һаулыҡ һораша, ни хәл был? - тип күп йәнлектәр аптырауға ҡалған. Әммә шыма ғына барған йыйылышта көтмәгәндә йомран тауыш сығарған:

- Ә миңә һинең батшалығың кәрәкмәй! Быға тиклем батшаһыҙ нисек йәшәгәнмен, артабан да шулай йәшәйәсәкмен. Һайлау тигән булып йәнлектәрҙең башын юҡҡа ҡаңғыртаһығыҙ! - тип ҡысҡырған да үҙе тиҙ генә ер тишегенә ингән дә киткән. Ҡалған йәнлектәр араһында шау-шыу ҡупҡан. Күптәр, батша һайлағас, уға буйһонорға тейеш булабыҙ, тип айыуҙың тәҡдименә ҡаршы сыҡҡандар. Төлкө, эштең нимәгә барғанын аңлап ҡалып, йәнлектәрҙе тынысландырырға тырышҡан:

- Нисек инде ул батшаһыҙ йәшәмәк кәрәк? Ерҙәге бөтә тереклектең батшаһы бар, ә ниңә беҙҙеке булмаҫҡа тейеш? Үләндәрҙең батшаһы - алтын тамыр, ағастарҙыҡы - имән, балыҡтарҙыҡы - йәйен, таштарҙыҡы - алмас, хатта беҙҙән мең мәртәбә аҡыллыраҡ кешеләрҙең дә батшалары бар, - тип барыһын да уйға һалған. Йәнлектәр һөйләшкән-килешкәндәр ҙә үҙҙәренең батшаһы итеп айыуҙы һайлап ҡуйғандар. Төлкө уның иң яҡын яранына әүерелгән.

Айыу батша ошо көндән башлап урманда үҙ тәртибен урынлаштырған. Иң тәүҙә ул үҙ тирәһенә ярамһаҡ ярҙамсылар йыйып алған. Шунан, батшаның яҡындары аҙыҡ табырға тейеш түгел, уларҙың тамағын бөтә йәнлектәр хәстәрләргә тейеш, тигән фарман сығарған, үҙе ярандарына:

- Тәртипле генә йөрөһәгеҙ, мин һеҙгә тағы ла етешерәк, мулыраҡ тормош вәғәҙә итәм. Берегеҙ ҙә бер ниндәй ҙә мохтажлыҡ кисермәҫ. Хатта һәр берегеҙҙең өңөнә улаҡ менән һыу үткәрербеҙ, ялғаштар эшләтербеҙ. Тик, ҡарағыҙ уны, батшағыҙҙы һатмағыҙ, - тип киҫәткән.

Артабан батша ярандары көн дә иртәнән кискә тиклем талаша-талаша айыу батшаға ҡулай, ә урмандағы башҡа йәнлектәргә яраҡһыҙ, яйһыҙ фармандар сығарғандар. Айыруса төлкө ныҡ тырышҡан. Батша яҡындарының төп маҡсаты - нисек тә улактан әҙер һыу эсеп, ялғаштан нисек тә күберәк аҙыҡ эләктереп ҡалыу, ти. Улар, көнөн-төнөн эшләп йонсоған һымаҡ, ашауҙан бушаған арала аш һеңдереү өсөн генә урмандә йөрөп киләләр ҙә яңынан ҡап ҡорһаҡтарын тултыра башлайҙар, ти. Күп ашай торғас, тамам туймаҫ тамаҡҡа әйләнгәндәр. Берҙән-бер көндө улар һимеҙ көүҙәләрен ҡыбырлатырға ялҡауланғандар һәм үҙҙәренең хужаһы - айыу батшаға ашарға килтермәгәндәр. Уларҙы көтөп асығыуҙың сигенә еткән айыу ярҙамсыларын эҙләп тапҡан да асыуынан уларҙы урмандан ҡыуып сығарған.

Батшалыҡ ошолай итеп үҙлегенән-үҙе юҡҡа сыҡҡан. Ярандарһыҙ тороп ҡалған айыуҙың фармандарын берәү ҙә үтәмәгән дә, ишетмәгән дә, белмәгән дә. Һәр йәнлек әүәлгесә урманда үҙ алдына йәшәүен дауам иткән.

**Флүр ЯХИН.**

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




### "ҠАҪҠАЛАҠ" ТРАКТОР

1982 йылдың ҡышы. Мин тракторҙа эшләп йөрөйөм. 35 градус һыуыҡта иртәнсәк тракторҙы ҡабыҙыуы уйын эш түгел. Шуға күрә тракторҙың аҫтына ут яғылған биҙрә ултырттым да, конторанан эҫе һыу алып сығып, радиаторға ҡойоп торһам, миңә табан ике кешенең килгәнен күреп ҡалдым. Килеүселәрҙең береһе яланбаш, уның Вәлит дуҫтың ҡәйнеше Әксән, ә кәпәслеһе Вәлиттең ҡустыһы Мәсғүт икән.

-Ней аҙаплап йөрөйһөгөҙ бынау һыуыҡта? - тип һорай ҡуйҙым тегеләрҙән.

-Эй, һаумы, Рамаҙан, әйҙә, минең тракторҙы барып һөйрәтеп алып ҡайтайыҡ, - ти яланбаш Әксән.

-Әйҙә, һөйрәтәйек һуң, ә ҡайҙа ултыра тракторың? - тип һорайым тегенән.

-Эй, кисә анау яҡҡа киткәйне, - ти был мине аптыратып, ҡулы менән урман яғына ишаралап.

-Нисек инде, киткәйне?..

-Эй, кисә апаруҡ булып алғас, Үтәгәндән Мәйгәштегә китергә сыҡтым. Оло юлға сыға торған юлға боролмай, яңылыш тапҡыр киткәнем дә барғанмын. Ҡараңғы. Бына бер мәл ауыл осона сығып китеп барам. Шул саҡ көтмәгәндә юл бөттө лә ҡуйҙы. Фар яҡтыһында бер нәмә лә күренмәй: ҡар ҙа ҡар. Ишекте асып, ҡайҙа барғанымды самалайым, тигәйнем, ангармаҫтан ергә ҡолап ҡалдым. Тороп, трактор артынан йүгереп ҡарағайным, ҡар йырып алға барырлыҡ түгел. Тракторым китте, артынан етеп булманы. Кире ауылға ҡайтып, Рауил ҡоҙама ниндәй хәлгә тарыуым хаҡында аңлатып биргәйнем, ул, төн тип тормай, тракторҙы эҙләп сығып китте. Артынан эҙе буйлап бик оҙаҡ барған. Баҡтиһәң, тракторым Ҡыҙыл буйына барып батып ултырған. Тракторҙы һүндереп, һыуын ағыҙып, таңға ҡайтып килде ҡоҙам...

Әксән менән Мәсғүтте ултыртып алдым да, тракторҙың юлын ҡыуып сығып киттек. Тәүҙә Ҡыҙыл буйындағы һаҙға инеп киткән был. Һаҙҙы үтеп китеп, тағы ла арыуыҡ ара барғандан һуң, тағы ла һаҙ яғына боролған. Ҡыҫҡаһы, эсендә тракторсыһы булмаған трактор ҡалын көрттә батабата, үҙенсәлекле боролоштар яһап, байтаҡ ҡына ҡар йырып йөрөгән. Үҙ иркенә. Байтаҡ ҡына урында үҙаллы батып, ҡар өйөмдәре лә хасил иткән. Тәки таптыҡ тегене. Йырын эсендә ултыра. Йыуан ереккә барып төртөлгән дә, ерҙе ҡаҙған да ҡаҙған был. Рауил ҡоҙа тракторҙы тап шул ҡиәфәттә тап итеп һүндереп, һыуын ағыҙып киткән икән. Аҙаҡ трактор мәтегә ҡуша туңған. Һөйрәтеп ҡарағаныҡ, яңғыҙ трактор менән алдырырлыҡ түгел үҙен. Ауылға ҡайтып, тракторсы Ситдыҡ ҡустыны алып килеп, ике трактор менән һөйрәтеп саҡ сығарҙыҡ ҡаҫҡалаҡ тракторҙы. Шулай ҙа була икән ул. Әгәр ҙә батып ултырмаһа, таңға тиклем ҡайҙа ғына барып етер ҙә, нимәләр генә ҡылыр ине икән ҡорос айғыр.

### ҠАЙҺЫ БАШМАҠТЫ ТЕЙӘРГӘ?

Аҫҡарҙан Ирек Шафиҡов тигән кеше ҡайҙандыр башмаҡ һатып алған да, алып ҡайтып барышлай, ни сәбәптәндер, Амангилде ауылында йәшәүсе танышы Йәғәфәр ағайыма ҡалдырып торған. Бер көн Йәғәфәр ағай миңә:

-Бер Аҫҡар яғына юлың төшкәндә, Шафиҡов Иректең башмағын өйөнә алып барып ташла әле, юғиһә, бесәнде ашап тик тора, - тип йомош ҡушты.

-Механигыбыҙ Иршатҡа әйт, беҙ Гусевкаға йыш йөрөйбөҙ бит. Берәй барғанда юл ыңғайы алып барып китербеҙ, - тинем мин ағайыма, уның йомошон үтәргә әҙер булыуымды белдереп.

Йомошон миңә бер нисә тапҡыр әйтте Йәғәфәр ағайым мәрхүм. Тик үҙе Иршатҡа был хаҡта бер нәмә лә әйтмәгәс, был мәсьәлә һаман да хәл ителмәй икән. Баҙнатһыҙ, оялсан булды ул. Бер көн иртәнсәк эшкә килһәм, Йәғәфәр ағайым күршеһе Ишбулат ағай менән контора алдында һөйләшеп тора. Улар менән һаулыҡ һорашып та, конторала инеп киттем. Инһәм, механик Иршат миңә тиҙ генә йыйынырға ҡушып, Гусевка яғына барырға тейешлегебеҙҙе белдерҙе. Сыҡтым да, Йәғәфәр ағайыма:

-Бар, ағай, Иршат конторала бер үҙе генә ултыра, Иректең башмағын Аҫҡарға алып барыу хаҡында әйт. Беҙ хәҙер Гусевка яғына китәбеҙ, - тинем.

Машинаға бензин ҡойоп килһәм, был икәү һаман да контора янында һөйләшеп тора. Эскә инһәм, Иршат телефондан Тайсин менән һөйләшә. Алда нимә һөйләшкәндәрҙер, мин бары уның: "Хәҙер башмаҡ тейәйбеҙ ҙә, сығабыҙ",- тигәнен генә ишеттем. Ул һөйләшеп тороп ҡалды, мин сығып, ағайымды башмаҡты тейәргә йәнәтләнем. Өс кешегә нимә инде, бер һәнәк бесәнде түшәнек тә, бәләкәс башмаҡты "һә" тигәнсе кузовтағы бесән өҫтөнә баҫтырып та ҡуйҙыҡ. Шунан контораға барып, Иршатты ултыртып алдым да, ҡуҙғалып киттек.

-Әйҙә, барып башмаҡ тейәп алайыҡ, - ти механик.

-Борсолма, үҙебеҙ тейәп алдыҡ, - тип яуапланым мин.

Байтаҡ ҡына ара үтеп, Аҫҡарға яҡынлағас, артҡы тәҙрәнән кузовтағы башмаҡты күреп ҡалды бит был.

-Тукта, һин ниндәй башмаҡ тейәп алдың һуң? - ти Иршат күҙҙәрен упайтып.

-Ә һин үҙең ниндәй башмаҡты тейәргә ҡуштың һуң? - тием мин һаман да һүҙ айышына төшөнмәйенсә.

-Ниндәй булһын, трактор гусеницаһы, - ти был.

Бер-беребеҙгә ҡарашып, икәүләшеп аптыраштыҡ. Баҡтиһәң, оялсан һәм баҙнатһыҙ Йәғәфәр ағайым уға башмаҡ хаҡында әйтмәгән булып сыҡты. Хәлдең айышына төшөнгәс, хәҙер инде йығылып ятып көләштөк. Юл уртаһында башмаҡты төшөрөп ҡалдырып булмай бит инде. Аҫҡарға барғас, Ирек ағай Шафиҡовтың ихатаһына төшөрҙөк башмаҡты. Аҙаҡ Гусевка яғына ҡуҙғалдыҡ. Тайсин Вәкил колхоздың баш инженеры булып эшләй. Уҫал ғына кеше, күңеле килмәһә, әрләп тә ебәрә. Был юлы беҙ ни өсөн трактор башмаҡтарын килтерә алмауыбыҙ хаҡында һөйләп биргәс, асыуланманы, бер аҙ көлөп кенә ҡуйҙы. Улай ғына түгел, Иршат менән икебеҙҙе төшкө ашҡа өйөнә алып ҡайтып, ҡунаҡ итеп тә сығарҙы.

### УРЫҪ НИМӘ УЙЛАНЫ ИКӘН?

1985 йылдың йәйендә булды был ваҡиға. Ниндәйҙер йомош менән Сибайға барғайным, шунан ҡайтып киләм. Ул замандарҙа Сибайға Магнитогорск ҡалаһы аша йөрөй инек. Шулай итеп, Магнитта Аҫҡар яғына барған юлдағы аэропортҡа автобус көтөп ултырғанда киосктан "Огонек" журналы һатып алдым. Ул арала Әбделгәзе ауылынан Вәлиев Ишбулды ағай килеп сыҡты. Бер аҙҙан Ҡаҙмаш ауылынан һуғыш ветераны Ишҡол апа Мәхмүтовты ла осраттыҡ. Улар менән автобусҡа ултырып, аэропортҡа килеп төштөк. Мин юлда ҡулымдағы журналды уҡып килдем.

Аэропортҡа килеп төшкәс тә Ишбулды ағайҙың тәҡдиме менән ресторан буфетына инеп ҡапҡылап алырға булдыҡ. Мин журналымды ҡулымдағы төйөнсөгөм эсенә тыҡтым да, шундағы ауылдаш ҡатындарға, Ишбулды ағайҙың ҡатынына әйберҙе ҡарап тороуҙарын үтенеп, ресторанға инеп киттек. Ашарға, эсергә алып, өҫтәл артына ултырырға ла өлгөрмәнек, Ишбулды ағайҙың ҡатыны йүгереп килеп инеп, автобус килеүен хәбәр итте. Ҡабалан-ҡарһалан ғына ҡапҡылап-йотҡоланыҡ та, беҙ ҙә сығып йүгерҙек. Мин эскәмйәләге төйөнсөгөмдө эләктереп, автобусҡа инеп ултырҙым, шофер Ҡаҙмаш ауылы егете Зәйнетдиндән билет алдым. Төйөнсөгөм эсен ҡараһам, уның эсендәге теге журналдан елдәр иҫкән. Уныһынан-быныһынан һорайым, береһе лә белмәй. Зәйнетдингә көтөп торорға ҡуштым да, аэропорт бинаһы эсенә йүгереп инеп киттем. Ҡараһам, бынан бер-ике минут элек кенә төйөнсөгөм ятҡан эскәмйәлә бер урыҫ минең журналды уҡып ултыра бит әй. Янына йүгереп килеп, "Дайка сюда!" тип теге урыҫтың ҡулындағы журналды тартып алдым да, автобусҡа килеп тә ултырҙым. Ултырыуым булды, Зәйнетдин ҡорос атының дилбегәһен ҡағып, автобус ҡуҙғалып та китте. Бер ни тиклем барғас, журналды уҡырға булып, элекке уҡып барған битте эҙләй башланым. Тик таба алманым ул битте. Аптырап, тышын әйләндереп ҡараһам, ул бөтөнләй икенсе журнал булып сыҡты. Ҡулынан журналын тартып алғас, нимә уйланы икән ул урыҫ?

**Рамаҙан ЙӘҺҮҘИН.**
**Әбйәлил районы**
**Үтәгән ауылы.**

✓ *Ураҙа ул ҡул-аяҡтың, телдең, күҙ-колаҡтың, ауыҙҙың гонаһ ҡылыуҙан ваз кисеүелер. Тағы ла биш ваҡыт намаҙыңды ҡалдырмау. Тағы ла... Ҡәлеб, аҡыл, нәфсе, рух һәм хыялдың бысраҡ, шаҡшы нәмәләрҙән йыраҡ тороуылыр.*

ИНТЕРНЕТТАН



# СӘЙӘХӘТ ЯРАТЫУСЫНЫҢ...

## йөрәге һау була

■ Баланың уйынсыҡтары уның киләсәгенә лә йоғонто яһай ала икән. Филадельфияның балалар үҙәге ябай пластилинды иң идеаль уйынсыҡ тип тапҡан. Белгестәр фекеренсә, бала 3-5 йәштә аралашырға өйрәнә, тирә-яҡ донъяны танып белә. Ә пластилиндан төрлө һындар әүәләү баланың аңы үҫешенә ярҙам итә. Тикшеренеүҙә ҡатнашыусы балалар көн һайын әүәләү менән шөғөлләнгән һәм тиҙерәк хәрефтәрҙе танырға һәм ижектәр төҙөргә өйрәнгән. Уларҙың телмәре яҡшырған һәм логопед ярҙамы бөтөнләй кәрәк булмай сыҡҡан.

■ Йөрәк ауырыуҙарынан, шул иҫәптән, инсульттан һаҡланам тиһәгеҙ, өйҙә ултырмағыҙ, ә күберәк сәйәхәт итегеҙ. Канаданың Торонто университеты ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәргә ҡарағанда, ғүмере буйы бер ҡалала ғына йәшәүселәргә ҡарағанда, йәшәү урынын алыштырырға яратыусылар араһында инсульт кисереүселәр 30 процентҡа һирәгерәк осрай. Сәйәхәт яратыусылар ҙа йөрәк сирҙәренә бирешеп бармай икән.

■ Йәй ҡояшта тигеҙ һәм матур итеп яныу өсөн дөрөҫ туҡланыу ҙа мөһим. Бристоль университеты ғалимдары әйтеүенсә, аҙыҡ-түлектең сифаты тиренең торошона һәм төҫөнә йоғонто яһай ала. Бер ай дөрөҫ туҡланғандан һуң, тире күпкә матурыраҡ күренә икән. Файҙалы аҙыҡ-түлеккә арбуз, ҡауын, персик, абрикос, борос, кишер, шпинат инә. Был йәшелсә һәм емеш-еләктәрҙе ашаһағыҙ, тирегеҙ тигеҙ ҙә яныр, шымарып, таҙарып та ҡалыр.

■ Миландың Милли институты ғалимдары белдереүенсә, аҡ икмәк һәм макарондар ҡатын-ҡыҙҙар һаулығы өсөн зыянлы. 47 мең кеше ҡатнашҡан тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, аҡ икмәк, макарон аҙыҡтары һәм ондан бешерелгән башҡа тәм-том гүзәл заттарҙа йөрәкҡан тамырҙары сирҙәре үҫешенә килтерә икән. Иң ҡыҙығы, ирҙәрҙең сәләмәтлегенә бындай хәүеф янамай. Һанап үтелгән был аҙыҡтарҙың гликемик индексы юғары, йәғни уларҙы организм тиҙ үҙләштерә, әммә бер үк ваҡытта ҡанда глюкоза кимәле лә күтәрелә. Тикшеренеүҙәр барышында аҡ икмәктең тағы бер зыянлы яғы асыҡланған. Ғалимдар әйтеүенсә, был продукт күреү һәләтенә бәйле проблемаларға килтереүе ихтимал. Айырым туҡланыу ысулын уйлап сығарған Америка ғалимы Герберт Шелтон 2 йәшкә тиклем балаларға бөтөнләй аҡ икмәк ашарға ярамай, тип иҫәпләй.

■ Психологтар билдәләүенсә, хәҙерге быуын кешеләрендә яңы фобия барлыҡҡа килгән. Был ҡурҡыу артыҡ ауырлыҡ менән бәйле. 3 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бөгөн күп кеше үҙенең ауырлығын белергә теләмәй һәм үлсәнеү процедураһынан ҡаса. Әлеге мәлгә был һан 20 процент тирәһе, әммә ул көндән-көн арта. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Ер шарында 44 процент кеше артыҡ ауырлыҡтан яфалана.

■ "Һүҙ һеҙҙең һаулығығыҙ тураһында барғанда, кемдең кәңәштәренә йышыраҡ ҡолаҡ һалаһығыҙ?" тигән һорауға яуап биреүселәрҙең 40 проценты "Бер кемгә лә ышанмайым, кәрәкле мәғлүмәтте китаптан йәки Интернеттан үҙем эҙләп алам" тип яуап бирһә, 30 проценты табиптарға йышыраҡ мөрәжәғәт итә, 17 процент яуап биреүсе өсөн ата-әсәһенең һәм башҡа туғандарының кәңәштәре мөһимерәк. Үҙенең эске тойомлауына 9 процент яуап биреүсе ышанһа, дуҫтар һәм балалар кәңәшенә ҡолаҡ һалыусылар икешәр процент тәшкил

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ



# РАМАҘАН - САБЫРЛЫҠ АЙЫ,

## сабырҙың сауабы иһә йәннәттер

**30 шәғбән, йәкшәмбе, 31 июль көнө ҡояш байыу менән, иншалла, мөбәрәк Рамаҙан шәриф айы башлана. Рамаҙан айы инсафлыҡ һәм баҫалҡылыҡ айы булараҡ, мосолмандар тормошонда айырым бер әһәмиәткә эйә.**

Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был ай хаҡында былай тигән: "Рамаҙан кергәс, йәннәт ҡапҡалары асыла, йәһәннәм ҡапҡалары ябыла, шайтандар хәрәкәттән мәхрүм була".

Рамаҙандың мөһим вәжибтәре: сәхәр, ифтар һәм тәрәүих намаҙы. Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәләм) сәхәр менән бәйле бындай һүҙҙәре бар: "Сәхәр ашы ашағыҙ, сөнки сәхәр бәрәкәтлелер". Башҡа бер хәҙисендә Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Беҙҙең ураҙа менән йәһүд һәм христиандарҙың ураҙаһы араһындағы айырма сәхәр ашы ашауыбыҙҙа", - тигән.

Ифтарға (ауыҙ асҡанда) һуңға ҡалырға ярамай, киреһенсә, ифтар ваҡыты еткәс, кисекмәҫтән ауыҙ асыу кәңәш ителә. Хәҙистәрҙә былай тиелә: "Кешеләр ифтар ҡылырға ашығыслыҡ күрһәтһә, һәр ваҡыт хәйерле рәүештә йәшәрҙәр".

Көндәрҙән бер көндө Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Сәйет бин Үбәдә хәҙрәттәре янына барғас, тегеһе бер телем икмәк һәм зәйтүн сығара. Аллаһ Рәсүле уны ашай һәм: "Ураҙалы булғандар табынығыҙҙа ауыҙ асһын, ризыҡтарығыҙҙы яҡшы кешеләр ашаһын, фәрештәләр һеҙгә доға ҡылһын!" - тип әйтә.

Рамаҙан айында йәстү намаҙына өҫтәмә рәүештә ҡылына торған тәрәүих намаҙы айырыуса мөһим. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был хаҡта былай тигән: "Рамаҙан Шәриф кисәләрендә ғибәҙәттең сауабына ышанып, Аллаһ ризалығы өсөн тәрәүих намаҙы уҡыусыларҙың ҡылған гонаһтары ғәфү ителер".

Рамаҙан айында тотолған ураҙаның сауабы шул ҡәҙәр күп була, уны бер ниндәй үлсәүҙәргә лә һыйҙырырлыҡ түгел. Ураҙалы кеше ҡулына, теленә, күҙенә лә хужа була белергә, кешеләр менән ыҙғышмаҫҡа тейеш. Был хаҡта бер хәҙис бар. Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) унда былай ти: "Әҙәм балаһының башҡарған бөтөн хәйерле эштәре һәм ҡылған ғибәҙәте үҙе өсөндөр. Тик ураҙа улай түгел. Сөнки ураҙа - бары тик Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн башҡарылған ғибәҙәттер. Ураҙа - бәндәнең ҡалҡаны. Ураҙа ваҡытында берегеҙ ҙә насар һүҙ һөйләмәһен һәм ҡысҡырып-аҡырып йөрөмәһен. Әгәр берәү һиңә насар һүҙ әйтергә йәки һинең менән ыҙғышырға теләһә, уға "мин ураҙалы" тип әйт.

...Аллаһҡа ант итәм, ураҙалы кешенең еҫе ҡиәмәт көнөндә Аллаһ ҡаршыһында иң саф еҫтер. Ураҙалы кешенең ике ҙур һөйөнөсө бар. Беренсенән, ул ифтар ваҡытында ауыҙ асҡанда һөйөнөр. Икенсенән, Раббыһы менән ҡауышҡан ваҡытта ураҙа әжеренә һөйөнөр".

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Рамаҙан ураҙаһын тотоусыларҙың йәннәткә махсус ҡапҡанан инәсәктәре тураһында әйткән. "Йәннәттә Рәййан исемле ҡапҡа бар. Был ҡапҡанан ҡиәмәт көнөндә йәннәткә бары тик ураҙалылар инер. Ул ҡапҡанан башҡалар инә алмаҫ. Ҡиәмәт көнөндә: "Ураҙалылар ҡайҙа?" - тигән тауыш ишетелгәс, ураҙалылар тороп, шул ҡапҡанан инер. Ураҙалыларҙың һуңғыһы инеп киткәндән һуң , ҡапҡа ябылыр һәм башҡа һис кем инә алмаҫ".

Хәҙрәти Ғәйшә Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Рамаҙан айының һуңғы ун көнөн нисек үткәреүе тураһында былай тигән: "Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Рамаҙандың һуңғы ун көнөнә ингәс, кистәрен һәм төндәрен бик күп ғибәҙәт ҡыла, ғаиләһен (ғибәҙәт ҡылыу өсөн) уята, ғибәҙәткә ғәҙәттәгенән күберәк әһәмиәт бирә ине".

### Ураҙа - иң татлы әмер...

Ураҙа ул ҡул-аяҡтың, телдең, күҙ-ҡолаҡтың, ауыҙҙың гонаһ ҡылыуҙан ваз кисеүелер. Тағы ла биш ваҡыт намаҙыңды ҡалдырмау. Тағы ла... Ҡәлеб, аҡыл, нәфсе, рух һәм хыялдың бысраҡ, шаҡшы нәмәләрҙән йыраҡ тороуылыр.

Ураҙа - нәфсене йүгәнләү, шайтанды ҡәлеб үә рух, аҡыл үә фекер донъяһынан ҡыуып сығарыуҙыр.

Ураҙа - донъялыҡтан бер аҙға булһа ла ситләшеүҙер.

Ураҙа - билдәле бер ара ас тороп, кис ауыҙ асҡанда "ниндәй тәмле-тәмле ризыҡтарҙы ашармын икән" тип уйлау, ифтарҙа ашҡаҙанды тултырыу түгелдер. Боҙоҡ уйҙар менән хыяллаһып, ҡәлеб һәм зиһенде хайуани тойғолар һәм уйҙар диңгеҙенә һалыу ҙа ураҙа түгел. Ураҙа - эске паклыктыр, ҡәлеб менән рухты мөмкин ҡәҙәр юғарыраҡ күтәреүҙер. Нәфсе менән көрәштер.

Ураҙа - Аллаһы Тәғәләгә зикер әйтеү, уның тураһында фекер итеү. Шулай уҡ хайуани хәлдән ял итеү, унан бушанып тороу, рухи торошта йәшәү, гонаһтарға ҡаршылыҡ итеүҙер.

Ураҙа - мөъминдәр өсөн Аллаһы Тәғәләнән килгән һәм Уның өсөн башҡарылған иң гүзәл, иң оло әмер. Был гүзәл әмерҙе башҡарыуға бирелгән ваҡыт араһын мосолмандар ғибәҙәт шатлығы менән үткәрә. Был һөйөнөс, ифтар ваҡыты яҡынлашҡанда, иң юғары дәрәжәгә етә. Әгәр ураҙа тотҡан кеше уны шулай тип аңламаһа, әгәр ул Рамаҙан айында рухи күтәренкелек тоймаһа, уның бөтә тырышлығы файҙаһыҙ була, йәғни ас тороуы әрәмгә китә.

Тойоу ағзаларын инсанға бүләк иткән Аллаһы Тәғәлә беҙҙән уларҙы үҙ ризалығында ҡулланыуҙы теләй. Күреү һәләтен алайыҡ. Күҙ Аллаһы Тәғәлә тарафынан кешегә әйләнә-тирәне күреп, танып белеү өсөн бирелгән. Ләкин бының бер шарты бар: күҙ донъяны Ҡөрьән нуры яҡтыһында, уның көҙгөһөндә күрергә тейеш. Был шарт үтәлгәндә генә күҙ үҙенең эшен тейешенсә башҡара, тип әйтә алабыҙ.

Тәм тойоу һәләте тураһында ла шуны уҡ әйтергә кәрәк. Тел, Аллаһы Тәғәлә биргән ниғмәттәрҙең тәмен тойоп, Уға шөкөр итергә, Уның тураһында һөйләргә тейеш.

Һиҙемләүгә килһәк, беҙ һүҙҙе, һис шикһеҙ, Хаҡ Тәғәлә әмер иткән сиктәрҙән сыҡмау тураһында, хәрәмгә һис бер ағза менән дә ҡағылмау, иң мөҡәддәс, иң мөбәрәк, иң гүзәл булған әйбер - Ҡөрьән Кәрим китабын ҡулға алып, унан башҡа тормошто күҙаллау

### УРАҘАҒА НИӘТ ҺӘМ ИФТАР ДОҒАҺЫ

**Сәхәр ашағандан һуң**

Ҡояш ҡалҡырҙан ике сәғәт алда сәхәр ашын ашап бөтөп, фарыз ураҙаны тотоу өсөн ошондай ниәт ҡылына:

Бисмилләһир-рахманир-рахим.

Нәүәйтү ән әсүмә саумә шәһри рамаҙәнә минәл-фәжри иләл-мәғриби халисәл-лил-ләһи тәғәлә. Аллаһу әкбәр.

**Мәғәнәһе:** "Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн тип таң атҡандан башлап ҡояш байығанға тиклем ихласлыҡ менән ураҙа тоторға ниәтләнем. Аллаһ - Бөйөк".

**Ауыҙ асҡанда уҡый торған доға**

Бисмилләһир-рахманир-рахим.

Аллаһүммә ләкә сүмтү үә бикә әмәнтү үә ғәләйкә тәүәккәлтү үә ғәлә ризҡиҡә әфтартү үә лисауми ғадим мин шәһри рамаҙанә нәүәйтү фәғ-фирли мә ҡаддәмтү үә мә әххартү.

**Мәғәнәһе:** "Эй, Раббым! Һинең ризалығың өсөн генә тип ураҙа тоттом. Һиңә генә иман килтерҙем. Эштәремде тик үҙеңә генә тәүәккәлләйем. Һин биргән ризыҡ менән генә ауыҙ астым, иртән тағы ла ураҙаға инергә ниәт иттем. Эй, гонаһтарҙы ярлыҡап ҡына тороусы Аллаһ, үткәндә эшләгән гонаһтарымды ла, эшләү ихтималы булһа, киләсәктәгеләрен дә ғәфү ит!"

мөмкин түгеллеге тураһында алып барырға тейешбеҙ.

Еҫ һиҙеү. Ҡайһы бер еҫтәр кешене бөтөн инсанлыҡ донъяһынан оялтыу көсөнә эйә. Шул уҡ ваҡытта кешенең күҙен асҡан, йәннәттән иҫкән татлы һәм талғын ел кеүек, кешене рәхәтлек эсендә йөҙҙөргән еҫтәр ҙә бар.

Рамаҙан айында рухийәт бейеклегенә өлгәшкән кешенең күҙе бөтөн хәрәмдәр өсөн йомоҡ, теле һәр төрлө ялған, ғәйбәт, яла яғыуҙан пак, ҡулы хәҡиҡәт ебенә йәбешкән, танауы йәннәт еҫтәре менән әҫәрләнгән була, ҡолағы Ҡөрьәндең баҡый һүҙен ғәйәт ҙур диҡҡәт менән тыңлай. Был шарттарҙа Хаҡтың бәндәһе итәғәтле рәүештә ураҙа әмерен башҡарһа, мөҡәддәс гүзәллеккә өлгәшер.

### Ураҙа - бәндәнең зәкәте

Саманы белеп ашау һәм эсеү, ураҙа тотоу беҙҙең Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әмере генә түгел. Унан алдағы бәйғәмбәрҙәр ҙә ураҙа ғибәҙәтен ҡылғандар һәм өммәттәренә лә шуны кәңәш иткәндәр.

Ураҙала ашҡаҙаны һәм, ғөмүмән, бөтөн физик организм ғына түгел, кешенең рухы ла "диета" режимына инә. Уның нәфсе ҡотортоуҙарына, һәр төрлө вәсвәсәгә ҡаршы тороу һәләте көсәйә. Утыҙ көн эсендә рух Рамаҙандың ныҡлы ҡәлғәһенә инеп һыйына, яман эштәрҙән һәм фиғелдәрҙән йыраҡ тора, яҡшылыҡ ҡылырға өйрәнә.

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тигән: "Кем дә кем ялған һөйләүҙе һәм алдап-йолдап эш йөрөтөү ғәҙәтен ташламаһа, Аллаһы Тәғәлә уның ашамай-эсмәй тороуына (йәғни ураҙа тотоуына) ҡиммәт бирмәҫ".

Ураҙаның сауабын һәм ҡиммәтен биш нәмә юҡҡа сығара: ялған һөйләү; ғәйбәт һөйләү; кеше артынан уның тураһында насар һүҙҙәр һөйләү; ялған һүҙҙәргә ант итеү; хәрәм нәмәләргә күҙ һалып, уларға ынтылыу, уларҙы булдырырға теләү.

Был хәҙистәрҙән аңлашылыуынса, тулы һәм камил ураҙа - бөтөн гонаһтарҙан һәм Аллаһ тыйған яман эштәрҙән йыраҡ тороп тотолған ураҙалыр.

Йәнә бер хәҙистә былай тиелә: "Рамаҙан - сабырлыҡ айы. Сабырҙың сауабы иһә йәннәттер". Сабырҙың өс төрө бар. Беренсеһе - игелек эшләүҙе, иманлы булыуҙы, ғибәҙәт ҡылыуҙы дауам иттереү сабырлығы. Икенсеһе - яман эштәр ҡылмау, гонаһтарҙан йыраҡ тороу сабырлығы. Өсөнсөһө - бәлә-ҡазаларға, ҡайғы-хәсрәттәргә ҡаршы тороу сабырлығы.

Ураҙала сабырлыҡтың өс төрө лә һынала. Сөнки ураҙалы мосолман көнө буйы ашамай-эсмәй торорға мәжбүр. Шулай уҡ ул Рамаҙан айында күберәк игелек ҡылырға, намаҙҙар уҡырға, зикерҙәр әйтергә, Ҡөрьән уҡырға йәки уны уҡыусыларҙы тыңларға кәрәк. Әлбиттә, бөтөн был ғәмәлдәр сабырлыҡ талап итә.

Ҡөрьәндә сабырлыҡҡа ҙур әһәмиәт бирелә. Уның бер аятында "Аллаһ сабыр итеүселәр менән бергәлер", - тип әйтелә. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сабырлыҡтың әһәмиәтен бик юғары баһалай. "Сабырлыҡ - имандың яртыһылыр", - тиелә уның хәҙисендә. Иншаллаһ, Рамаҙан айы мөбәрәк булһын, тотҡан ураҙаларыбыҙ ҡабул ителһен!

## ИЗГЕ РАМАҘАН АЙЫНДА НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

| Август | Сәхәр ашап бөткән ваҡыт | Иртәнге намаҙ | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу. Аҡшам намаҙы | Йәстү, тәрәүих намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1, дүшәмбе | 04.30 | 06.27 | 14.37 | 19.45 | 22.06 | 00.12 |
| 2, шишәмбе | 04.31 | 06.29 | 14.37 | 19.44 | 22.14 | 00.11 |
| 3, шаршамбы | 04.32 | 06.31 | 14.37 | 19.43 | 22.12 | 00.10 |
| 4, кесе йома | 04.33 | 06.32 | 14.37 | 19.41 | 22.10 | 00.09 |
| 5, йома | 04.34 | 06.34 | 14.36 | 19.40 | 22.08 | 00.08 |
| 6, шәмбе | 04.35 | 06.36 | 14.36 | 19.39 | 22.06 | 00.07 |
| 7, йәкшәмбе | 04.36 | 06.38 | 14.36 | 19.38 | 22.04 | 00.05 |
| 8, дүшәмбе | 04.37 | 06.40 | 14.36 | 19.36 | 22.02 | 00.04 |
| 9, шишәмбе | 04.38 | 06.42 | 14.36 | 19.35 | 22.00 | 00.03 |
| 10, шаршамбы | 04.38 | 06.43 | 14.36 | 19.34 | 21.58 | 00.02 |
| 11, кесе йома | 04.39 | 06.45 | 14.36 | 19.32 | 21.56 | 00.01 |
| 12, йома | 04.40 | 06.47 | 14.35 | 19.31 | 21.54 | 00.00 |
| 13, шәмбе | 04.41 | 06.49 | 14.35 | 19.29 | 21.52 | 23.58 |
| 14, йәкшәмбе | 04.42 | 06.50 | 14.35 | 19.28 | 21.50 | 23.56 |
| 15, дүшәмбе | 04.43 | 06.52 | 14.35 | 19.26 | 21.47 | 23.54 |
| 16, шишәмбе | 04.44 | 06.54 | 14.35 | 19.25 | 21.45 | 23.52 |
| 17, шаршамбы | 04.49 | 06.56 | 14.35 | 19.23 | 21.43 | 23.48 |
| 18, кесе йома | 04.52 | 06.58 | 14.34 | 19.22 | 21.41 | 23.45 |
| 19, йома | 04.55 | 07.00 | 14.34 | 19.21 | 21.38 | 23.41 |
| 20, шәмбе | 04.58 | 07.01 | 14.34 | 19.20 | 21.36 | 23.38 |
| 21, йәкшәмбе | 05.01 | 07.03 | 14.34 | 19.18 | 21.34 | 23.34 |
| 22, дүшәмбе | 05.04 | 07.05 | 14.34 | 19.17 | 21.31 | 23.31 |
| 23, шишәмбе | 05.07 | 07.07 | 14.33 | 19.15 | 21.29 | 23.28 |
| 24, шаршамбы | 05.10 | 07.09 | 14.33 | 19.13 | 21.27 | 23.24 |
| 25, кесе йома | 05.13 | 07.11 | 14.33 | 19.11 | 21.24 | 23.21 |
| 26, йома | 05.16 | 07.12 | 14.32 | 19.10 | 21.22 | 23.20 |
| 27, шәмбе | 05.19 | 07.14 | 14.32 | 19.08 | 21.19 | 23.17 |
| 28, йәкшәмбе | 05.21 | 07.16 | 14.32 | 19.05 | 21.17 | 23.14 |
| 29, дүшәмбе | 05.24 | 07.18 | 14.31 | 19.03 | 21.15 | 23.11 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Мейе тулҡындары һәм тормош мәғәнәһе

**Әлегәсә һеҙ эҙмә-эҙлекле программаны, йәғни кәрәкле ваҡытта яҙылғандарҙы ситкә ҡуйып тороп, күнекмәләр үтәнегеҙ, яңы тулҡынға көйләндегеҙ. Үҙегеҙҙе ошо күпте вәғәҙә итеүсе сифат өсөн маҡтап алығыҙ. Ул фәрештәләрҙең ярҙамын, тирә-яҡтағыларҙың ихтирамын, Илаһ тарафынан күберәк һөйөү вәғәҙә итә. Ошо тойғо һеҙҙән сағылған һөйөүгә әйләнһен. Тормош бәхет тауының үренә ышанысло барғанда, һеҙ мөхәббәт тирәһендә ҡуйылған кәртәләрҙе емерә алаһығыҙ.**

Алда, әлбиттә, яҡшыраҡ тормош көтә. Яҙмаларҙың аҙағына барып етеүгә аңығыҙ тирә-яҡ мөхит менән берлектә булыуын тойорлоҡ кимәлгә етәсәкһегеҙ. Һеҙ шул уҡ кеше булып ҡаласаҡһығыҙ. Әммә һеҙҙә ике мөһим физик булмаған үҙгәреш күҙәтеләсәк: һеҙ тирә-яҡтағыларҙы яратасаҡһығыҙ һәм үҙ тормошоғоҙҙоң мәғәнәһен аңлаясаҡһығыҙ.

Кем өсөндөр, бәлки, был мөһим дә түгелдер, улар был үҙгәрештәрҙе һиҙмәйәсәк тә, ләкин иғтибарлап тыңлай, етди ҡабул итә, кәңәштәрегеҙгә ҡолаҡ һала һәм төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеү һәләтегеҙгә иғтибар итә башлар. Бәлки, был үҙгәрештәр ғаилә тормошоғоҙҙо ла тамырынан үҙгәртер. Һеҙ бығаса йәшәргә ҡамасаулаған ауырлыҡтарҙы еңдегеҙ. Ҡаршылыҡтар, иҙелгәнлек тойғоһо, дошманлыҡ үҙ-үҙеңә ышаныс менән алышынды.

Был ике мөһим үҙгәреш менән аңлатыла: һеҙ үҙ тормошоғоҙҙо нығыраҡ ярата һәм яҡшыраҡ аңлай башланығыҙ. Әгәр ҙә улай түгел икән, ябай күнегеүгә ике минутығыҙҙы бүлергә йәлләмәгеҙ. Ул Ерҙәге үҙ миссияңды яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә.

Күнекмәне бер нисә тапҡыр уҡығыҙ һәм иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Үҙеңдең миссияңды нисек аңларға.

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алағыҙ һәм тыныс картинаны күҙаллағыҙ.
- Картина яйлап юғала, уның урынын Юғары Минегеҙ ала: ул һеҙҙән бейектәрәк һәм яҡты аҡ нур менән уратып алынған.
- Урынығыҙҙан тороп, Юғары Минегеҙҙе ҡосаҡлағыҙ һәм ҡабат ултырығыҙ.
- Уйығыҙҙан ғына: "Тормош мәғәнәм нимәлә?" - тип һорағыҙ.
- Юғары Минегеҙ ситкә китеп, эргәлә урынлашҡан экранға күрһәтеп юғаласаҡ.
- Уйығыҙҙа ғына һорауығыҙҙы ҡабатлап, экранды иғтибарлап күҙәтегеҙ. Унда юғары миссия, тәғәйенләнеш менән бәйле күренеш пәйҙә булырға тейеш. Экранда барған ваҡиғаларҙы күҙәтегеҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ. Әле генә күргәндәрегеҙ тураһында уйлағыҙ.

Яҙмаларҙы ситкә ҡуйып, күнекмәне ҡабатлағыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 1 АВГУСТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Последняя встреча", 9-я серия. Сериал
22.30 "Люди дождя". Док. фильм
23.30 "Побег", 6-я серия
00.30 "Борджиа", 8-я серия. Сериал
01.30, 03.05 "Приключения няни". Комедия
03.00 Новости
03.30 "Спасите Грейс"
04.20 "Детективы"
04.20 "Хочу все знать" с Михаилом Ширвиндтом

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 107-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 135-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 212-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "По горячим следам", 9-10-я серии
22.50 "Тайны следствия". "Заказчик". Сериал
23.50 "Вести+"
00.10 "Закрытие конкурса "Новая волна"
Трансляция из Юрмалы
03.50 "Людмила Савельева. После бала"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
06.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кремлевские дети"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Лихие 90-е"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". "Мститель", "Недопетая песня". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Москва. Три вокзала". "Предпоследняя электричка", "Сказки Шахерезады". Сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". "Пропасть", "Один-три-семь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". "Скачки с препятствиями". Сериал
00.30 "Футбольная ночь"
01.05 "До суда"
02.00 "Один день. Новая версия"
02.35 "Проклятый рай-2". Сериал
05.25 "Особо опасен!"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Мультфильм"**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.15 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Хазина"**
**13.30 "Муз-базар"**
**14.00 "В активном поиске"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости"**
**15.15 "Тамыр. Гора новостей и др."**
**16.15 "Мультфильм"**
**16.35 "Концерт. Поет Ильсур Тайсин"**
**17.45 "Полезные новости"**
**19.00 "Хоккей"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**23.00 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.30 Художественный фильм**

## 2 АВГУСТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Последняя встреча", 10-я серия
22.30 "Свидетели"
23.30 "Побег". 27-я серия. Сериал
00.30 "Безумцы"
02.20, 03.05 "Гильотина"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 108-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 136-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 213-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "По горячим следам", 11-12-я серии
22.50 "Тайны следствия". "Заказчик", 2-я серия
23.50 "Вести+"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Честный детектив"
02.50 "Горячая десятка"
03.20 "Большая любовь-4"
03.55 "Комната смеха"

### НТВ
06.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кремлевские дети"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Лихие 90-е"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". "Самоубийство", "Свадебный подарок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Москва. Три вокзала". "Пегас ширококрылый". Сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". "Скачки с препятствиями"
00.35 "Битва за Север. Кольский полуостров. Мистика и Реальность".
01.35 "Кулинарный поединок"
02.35 "Один день. Новая версия"
03.05 "Проклятый рай-2"
04.05 "Хозяйка тайги"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45, 20.30 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться" (на русск. яз.)**
**10.45, 14.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45, 19.15 "Надо знать!"**
**13.00 "Башкорт йыры"**
**13.40 "Семь чудес Башкортостана"**
**14.00 "В активном поиске"**
**15.15 "Тамыр". Гора новостей и др."**
**16.15 "Концерт Поет Абдулла Султанов"**
**19.00 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**19.30 "Действующие лица"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Историческая среда"**
**23.15 Художественный фильм**

## 3 АВГУСТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Последняя встреча", 11-я серия. Мелодрама
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Побег", 8-я серия. Сериал
00.30 "Калифрения"
01.00 "Любовницы"
02.05, 03.05 "Миссия "Серенити"
03.00 Новости
04.20 "Хочу все знать" с Михаилом Ширвиндтом

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 109-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 137-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 214-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "По горячим следам". 13-14-я серия
22.50 "Тайны следствия". "Суббота 15 часов", 1-я серия
23.50 "Вести+"
00.10 "Балтийский мятеж. Саблин птрив Брежнева"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Красавец-мужчина"
03.35 "Долгие версты войны"

### НТВ
06.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кремлевские дети" "Светлана Тухачевская. Дочь красного Бонапарта"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Лихие 90-е"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Супруги". "Бумажная работа", "Очевидец". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Беглец". Сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". "На крючке". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". "Хэллоуин"
00.35 "Битва за Север. Арктический шельф"
01.35 "Квартирный вопрос"
02.35 "Один день. Новая версия"
03.05 "Проклятый рай-2". Сериал
04.05 "Хозяйка тайги"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Байык"**
**13.45 "Любимые мелодии"**
**14.00 "В активном поиске"**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др."**
**16.15 "Песня души русской" Праздник русской песни**
**17.15 "Тамле" (на башк. яз.)**
**19.00 "Хоккей"**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Историческая среда"**
**23.15 Художественный фильм**

## 4 АВГУСТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Федеральный судья"
11.55 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Последняя встреча", 12-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Побег". 9-я серия
00.30 "Ушедшие"
03.00 Новости
03.05 "Частная собственность"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 110-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 138-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 215-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "По горячим следам". 15-16-я серии
22.50 "Тайны следствия". "Суббота 15 часов". 2-я серия
23.50 "Вести+"
00.10 "Красота по-советски. Судьба манекенщицы"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Красавец-мужчина"
03.25 "Долгие версты войны"

### НТВ
06.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кремлевские дети"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Супруги". "Партия в шахматы", "Врачебная ошибка". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Беглец". Сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". "Вторая жизнь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". "Хэллоуин"
00.35 "Советские биографии. Владимир Ленин"
01.35 "Дачный ответ"
02.35 "Один день. Новая версия"
03.05 "Проклятый рай-2"
04.05 "Хозяйка тайги"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00, 15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 Мультфильм**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00, 18.00, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 19.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Башкорттар"**
**13.30 "Волшебный курай"**
**14.00 "В активном поиске"**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Концерт Международного благотворительного фонда"**
**17.15 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**18.55 "Первенство России по футболу. Второй дивизион"**
**21.00 "XIII Республиканский конкурс исполнителей"**
**23.00 "Пятый угол". Диспут-клуб**
**23.45 Художественный фильм**

## 5 АВГУСТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Фабрика звезд. Возвращение". Лучшее
23.00 "Остров проклятых". Триллер
01.35 "Строптивая девчонка"
03.30 "Повелитель бурь"
05.20 "Хочу все знать" с Михаилом Ширвиндтом

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Мой серебряный шар"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 111-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 139-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 216-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Песня на двоих. Паулс - Резник". Концерт
22.40 "Неоконченный урок". Мелодрама
00.30 "История о нас". Мелодрама
02.30 "Теория хаоса"
04.15 "Долгие версты войны"

### НТВ
06.00 "Сегодня утром"
08.30 "Кремлевские дети"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". "Смерть ювелира", "Любовь зла". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Беглец". Сериал
21.30 "Глухарь. Продолжение". "Кошмары". "Пробуждение". Сериал
23.20 "Песня для вашего столика"
00.35 "Чета Пиночетов"
01.15 "Чистильщик". Триллер
03.05 "Проклятый рай-2". Остросюжетный сериал
04.00 "Хозяйка тайги"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Мультфильм"**
**10.45, 14.45 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 18.15 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Соцветие танца". Концерт**
**14.00 "В активном поиске"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Каникулы НЕстрогого режима и др."**
**16.15 "Млечный путь". Александр Ключарев**
**17.15 "Йома"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 Хоккей**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Еду я в деревню"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.15 "Муз-базар"**
**23.45 Художественный фильм**

## 6 АВГУСТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Остров ошибок". Мультфильм
06.35 "Уж кто бы говорил"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Вера Васильева. Секрет ее молодости". Док. фильм
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Среда обитания"
14.10 "Свидетели"
15.10 "Приговор"
16.10 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым
17.10 "Вернись, любовь!". Концерт
18.55 "Кто хочет стать миллионером" с Дмитрием Дибровым"
20.00 "Мясоеды против травоядных". Док. фильм
21.00 "Время"
21.15 "Какие наши годы!"
22.35 "КВН"
00.15 "Гринберг". Комедия
02.15 "Мужчина моей мечты". Мелодрама
04.10 "Миссия спасения: точка удара""

### РОССИЯ 1
05.50 "Мама вышла замуж"
07.30 "Сельское утро"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Скуби-Ду-2: монстры на свободе". Комедия
10.05 "Дела и люди"
10.25 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20, 14.30 "Каменская". "Личное дело". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.20 "Субботний вечер"
18.00 "Гувернантка". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.35 "Лжесвидетельница". Мелодрама
00.20 "Давай сделаем это по-быстрому". Драма
02.20 "Как на ладони"
04.35 "Комната смеха"
05.30 "Городок. Дайджест"

### НТВ
06.00 "Криминальное видео". "Привидение, которое возвращается"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Медицинские тайны"
09.20 "Внимание: Розыск!" с Ириной Волк"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Знаки судьбы-2". "Охота на ведьм", "Главный инстинкт". Сериал
15.05 "Развод по-русски"
16.05 "Следствие вели..."
17.05 "Очная ставка"
18.00, 19.20 "Гончие-3". "Братство народов". Криминальный сериал
19.00 "Сегодня"
20.20 "Самые громкие русские сенсации"
23.05 "Ты не поверишь!"
23.45 "Вопрос чести". Боевик
01.35 "Проклятый рай-2"
04.30 "Один день. Новая версия"
05.10 "Алтарь Победы. Катюша"

### БСТ
**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.30 "Художественный фильм "Как получить миллион"**
**09.00 "Третий звонок". "Лопе де Вега "Дурочка". Спектакль**
**11.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 20.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Еду я в деревню"**
**13.30 "Йома"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Семь жемчужин"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 "Забытые войны"**
**19.00 "Судьбы радужные нити"**
**19.30 "Курай-танец"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Башкорт йыры"**
**22.45 "Художественный фильм"**
**00.15 "Свидание с джазом"**

## 7 АВГУСТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.20 "Ответный ход"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.25 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым
10.35 "Пока все дома"
11.30 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Песни нашего кино"
13.20 "Карнавал". Мелодрама
16.10 "Чудеса исцеления"
17.10 "Судебная колонка". "Замуж за принца". Сериал
18.00 "Судебная колонка", "Квартира для ветерана". Сериал
19.10 "Легенды Ретро FM"
21.00 "Время"
21.20 "Большая разница"
22.25 "Yesterday Live"
23.20 "Перл Харбор". Боевик
02.35 "Сой кузен Винни"

### РОССИЯ 1
06.00 "Аэлита, не приставай к мужчинам"
07.45 "Денис-мучитель". Семейная комедия
09.40 "Утренняя почта"
10.20 "Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25, 14.30 "Каменская "Тень прошлого". Детективный сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
15.50 "Смеяться разрешается"
17.50 "Александра". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.35 "Жених". Мелодрама
22.25 "Я подарю себе чудо". Мелодрама
00.20 "Улицы в крови". Драма
02.20 "Вся правда о любви"
04.10 "Городок. Дайджест"

### НТВ
06.05 "Криминальное видео". "Привидение, которое возвращается"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "Собственная гордость"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Знаки судьбы-2". "Не трогай это"
15.05 "Развод по-русски"
16.00 "Сегодня"
16.05 "Следствие вели..."
17.05 "И снова здравствуйте!"
18.00 "Гончие-3". "Братство народов"
19.00 "Сегодня"
19.20 "Гончие-3". "Братство народов"
20.20 "Чистосердечное признание"
23.40 "Игра"
00.45 "В зоне особого риска"
01.20 "Мертвая тишина". "Фильм ужасов
03.05 "Сойлент Грин". Фантастический триллер
05.00 "Алтарь Победы. Тихие зори"

### БСТ
**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.30 "Командос"**
**10.00 "Тамыр" представляет…"**
**11.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "В минуты отдыха". Концерт**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Мы - вместе". Каналу "Юлдаш" - 10 лет**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Забытые войны"**
**18.15 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 "Башкорттар"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Любимое дело"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.15 "За порогом"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Вечер.com"**
**22.45 "Гала-концерт детского телевизионного конкурса"**

Башҡортостан Республикаһының интернат тибындағы дөйөм белем биреү учреждениелары директорҙары, Ҡ. А. Дәүләткилдеев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатының директоры **Фәтихов Рәфил Рафаэль** улының ваҡытһыҙ вафаты айҡанлы тәрән ҡайғы белдерә һәм ғаиләһенең һәм туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЙӘЙГЕ ЯЛ ОСОРОНДА...

## бөжәктәрҙән дә һаҡланырға кәрәк



**Йәй миҙгелендә һәр кем ял итергә, йылға-күлдәрҙә һыу инергә, урманға емеш-еләк йыйырға сығырға тырыша. Әммә йәйге ялдың кире яҡтарын да иҫәпкә алырға кәрәк. Мәҫәлән, тап яҙғы-йәйге осорҙа төрлө бөжәктәр сағыуынан (тешләүенән) организмда аллергик реакция башланып китеүе ихтимал. Шуға ла табиптар аллергияны миҙгел ауырыуы тип атап йөрөтә. Донъяла бөжәктәрҙең йөҙәрләгән мең төрө иҫәпләнә. Уларҙың һаны менән сағыштырғанда, әлбиттә, аллергик реакцияға килтергән осраҡтары һирәк, әммә һуңғыһының иҫәбе түгел, ә патологик процесс формаһының ҡатмарлығы мөһимерәк: йылан сағыуына ҡарағанда, аллергик реакцияларҙан яҡынса ике тапҡыр кеше күберәк үлә.**

Йышыраҡ яры ҡанатлылар ғаиләһенә ҡараусылар, бигерәк тә бал ҡорто (бөтә осраҡтарҙың 7 проценты), һирәгерәк - һағыҙаҡ, иңкеш, тарш сағыуына аллергик реакция барлыҡҡа килеүсән. Уларҙың ағыуы тирегә әләгеү менән 20 минут эсендә реакция бирә. Ҡырмыҫҡалар араһынан ерән ҡырмыҫҡа ҡурҡынысыраҡ. Уларҙан тыш ҡан һурыусы бөжәктәр: серәкәй, күгәүен, ләпәкәй, москиттарҙың тешләүенән аллергия башланыуы ихтимал, тик ул еңелерәк формала үтеү сәбәпле, күптәр быға артыҡ иғтибар бирмәй.

Бал ҡорто йәки башҡа берәй бөжәк саҡҡандан һуң шунда уҡ ауыртыу барлыҡҡа килә, был урын ҡыҙарып сыға, әсетә башлай, ҡысыта. Бер нисә сәғәт эсендә тиреләге был үҙгәрештәр тулыһынса үтә. Ҡайһы бер осраҡтарҙа сағылған урын ныҡ итеп шешә һәм һыҙлай башлай, әммә был билдәләр ҙә бер нисә сәғәт эсендә юҡҡа сығырға тейеш. Әгәр ҙә күҙҙәр әсетһә, йыш-йыш йүткерә башлаһағыҙ, ҡыҙарыу тиренең башҡа өлөштәренә лә таралһа, тамаҡ һығылһа - һеҙҙә аллергик реакция башланған. Был билдәләрҙән тыш, тын ҡыҫылыуы, йөрәк болғаныуы, эс ауыртыуы, ҡоҫоу, баш әйләнеүе ихтимал. Аллергик реакцияның иң ауыр билдәләре булып тын алыу ауырлашыуы, ғыжылдау барлыҡҡа килеүе, телмәр боҙолоуы тора. Был ваҡытта ярҙам күрһәтеп өлгөрмәһән, тире күгәрә, ҡан баҫымы төшә, кеше иҫен юғалта. Бер юлы бер нисә бөжәк саға икән, организмда токсик реакция башлана. Уның төүге билдәләре: баш ауырта, йоҡо килә, кеше шешенә, тән температураһы күтәрелә, йөрәк болғана, эс китә, ҡайһы бер осраҡтарҙа тән тартыша.

Бөжәк сағыуына аллергия шунда уҡ башланмауы ла бар. Ул медицинала аҡрын реакция тип атала. Аҡрын реакция сағылған ваҡыттан 6-12 сәғәттән, хатта 1-2 аҙнанан һуң да әүҙемләшеп китеүе ихтимал. Бындай реакцияның билдәләре: хәл булмай, баш ауырта, тән сабырта, быуындар һыҙлай, лимфа төйөндәре ҙурая.

### Түбәндәге осраҡтарҙа табипҡа мөрәжәғәт итегеҙ:

- Сағылыуҙан һуң күҙҙәр, тамаҡ йәки танау шешһә. Әгәр ҙә бөжәк күҙ тирәһенән саҡһа, бигерәк тә һаҡ булырға кәрәк, сөнки был күреү һәләтенә зыян килтереүе бар;
- тешләнгән урын нык итеп шешһә;
- аллергик реакцияның төүге билдәләре барлыҡҡа килһә;
- бер юлы бер нисә бал ҡорто йәки башҡа бөжәк саҡһа;
- аҡрын реакция билдәләре барлыҡҡа килһә;
- бер нисә сәғәт үткәндән һуң да шешеү ҡайтмаһа.

Табип килгәнсе аллергияға ҡаршы препараттар: супрастин, тавегил, диазолин йәки фенкарод ҡабул итергә була. Улар температура күтәрелеүенә һәм шештең ҙурайыуына юл ҡуймаясаҡ.

### Бөжәк саҡһа (тешләһә), нимә эшләргә?

- Яранан осло булмаған бысаҡ ярҙамында ҡаяуҙы алырға. Ҡаяуҙы һығып сығарырға тырышырға ярамай, был осраҡта ул тағы ла тәпкәрәк ҡаҙаласаҡ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ҡаяуҙағы ағыу 1-2 минут эсендә тирегә таралып бөтә. Һағыҙаҡ, иңкеш, тарштың ҡаяуында киртләс юҡ, шуға улар саҡҡандан һуң тирелә ҡаяу тороп ҡалмай. Себендәрҙең ҡаяуы юҡ.
- Сағылған урынды һабынлап һыу менән йәки нашатыр спирты менән йыуырға. Себен тешләгәндә ул урынды антисептик (фукорцин иретмәһе, йод) менән эшкәртергә.
- Ауыртыуҙы баҫыу өсөн сағылған урынға боҙ һалырға йәки аш содаһын һыуҙа иҙеп, шуның менән еүешләргә.
- Шеше ҡайтһын өсөн сағылған ҡулды йәки аяҡты өҫкәрәк һалырға.

Иң мөһиме, организмдың дөйөм реакцияһын күҙәтеп тороу. Жгут һалырға, яранан ағыуҙы һурып сығарырға, тешләнгән урынды ҡиҫергә ярамай. Әгәр ҙә баланың алдан да бөжәк тешләүенә аллергияһы булған икән, һәр урынға ла үҙегеҙ менән тиҙ медицина ярҙамы күрһәтеү өсөн аптечка йөрөтөгөҙ. Унда мотлаҡ рәүештә жгут, адреналин өсөн энә менән шприц, антигистамин препараттар һәм инъекциялар өсөн кортикостероидтар булһын. Был препараттарҙы нисек ҡулланыуҙы, уларҙың дозаһын табип билдәләй, был инструкцияны медикаменттар менән бергә һаҡларға кәрәк.

Системалы рәүештә аллергия реакцияһы күҙәтелгән ауырыуҙарға махсус дауалау курсы (бөжәк ағыуы менән махсус иммунотерапия) үткәрелергә тейеш. Дауалау курсы яҡынса 5 йыл тирәһе дауам итә, уны махсуслашҡан аллергологик үҙәктәрҙә эшләйҙәр.

### Бөжәк сағыуынан халыҡ дауаһы

- Бал ҡорто саҡҡанда, бигерәк тә ауыҙ эсе йәки тел зыян күргәндә һеркә ярҙам итә. Быны өсөн һыуға бер аҙ һеркә тамыҙып, ауыҙҙы сайҡатырға. Ул ауыртыуҙы баҫа, шеште ҡайтара.
- Күп бөжәктәрҙең ағыуын лимон нейтралләштерә. Серәкәй тешләгән урындарҙы ла лимон ҡабығы менән ышҡырға була.
- Яранан ҡаяуҙы алғас, ул урынға һарымһаҡ һуты һөртергә ярай. Һарымһаҡты иҙеп, уны шул уҡ күләмдәге бал менән ҡушып болғатырға һәм тешләнгән урынға һалып, өҫтөнән бинт менән бәйләп ҡуйырға. Тәүлегенә ике тапҡыр алыштырырға.
- Бал ҡорто саҡҡан урынға ҡаяуын алғас сей картуф һалырға була. Алоэ һуты ла ярҙам итә.
- Тешләнгән урындарҙы водород перекисы менән эшкәртегеҙ.
- Серәкәй, бал ҡорто, һағыҙаҡ һәм иңкеш тешләгән урынға петрушка япрағы һалһаң ла файҙалы.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Июль айында тыуған көндәрен билдәләүсе **Баймаҡ ҡалаһынан** Әхиәр Исхаҡовты, **Баймаҡ районы** Йылым ауылынан Ғәшүрә Фәхретдинованы, Ярат ауылынан Фәрзәнә Дәүләтбаеваны, Хәсән ауылынан Гөлгөнә Раҡаеваны, Таулыҡай ауылынан Фәүзиә Һағынбаеваны, Йәрмөхәмәт ауылынан Зөлфиә Мөьминованы, **Дыуан районы** Мәсәғүт ауылынан А.Сәғәҙәтованы, З.Йәгләмунованы, Әҙдрәшит ауылынан Эльза Бәҙәмшинаны, **Ғафури районы** Красноусольск ауылынан А.Ғәлиуллинаны, Фәниә Ишбулдинаны, Бәләкәй Үтәш ауылынан Рәис Рахманғоловты, Бурлы ауылынан Л.Хәлиловны, Ташлы ауылынан Рауфия Ибраһимованы, **Мишкә районы** Тынбай ауылынан С.Йәндәгәшованы, **Архангел районы** М.Горький ауылынан Тәнзилә Ҡотлозамановны, Архангел ауылынан Рима Сәлиховны, **Ишембай районы** Һайран ауылынан Ғәлимйән Яҡуповты, **Бөрө ҡалаһынан** Әлфинә Сәйетгәрәеваны, Фирүзә Кашаповны, **Әбйәлил районы** Асҡар ауылынан Нәгимә Илһамованы, Рәйсә Аҫылғужинаны, Амангилде ауылынан Ғәйнур Зайнуллинаны, Сәбилә Әхтәмованы, **Стәрлебаш районы** Ҡуғанаҡбаш ауылынан Рима Искәндәрованы, Тормай ауылынан Ринат Садиҡовты, **Йәрмәкәй районы** Усман-Ташлы ауылынан Ләйсән Тәхвәтшинаны, **Ейәнсура районы** Яңы Павловка ауылынан Фәнил Килдейәровты, **Илеш районы** Үрге Йәркәй ауылынан Рәфиға Миназеваны, **Салауат районынан** Сейәгөл Зариповны, Зағафуран Зариповты, **Мәләүез ҡалаһынан** Әлфиә Садиҡовны, Сухаревка ауылынан Фирүзә Рәхмәтуллинаны, **Белорет районы** Бриштамаҡ ауылынан Резеда Ғәбитованы, **Өфө ҡалаһынан** Милана Батталовны, **Хәйбулла районы** Йәнтеш ауылынан Сулпан Исҡужинаны, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Ләйлә Хөсәйеновны, **Ауырғазы районы** Толбазы ауылынан Зифа Ноғомановны, Әлиә Насировны һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көндәре менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ!

Алдағы көндәрегеҙҙә һеҙгә бәхет-шатлыҡтар юлдаш булһын, яҡындарығыҙҙы ҡыуандырып йәшәгеҙ, ғүмерҙәрегеҙ оҙон, күңелдәрегеҙ тыныс, донъяларығыҙ имен булһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЯЛДЫҢ ДА...

## үҙ нескәлектәре бар

**Ял йорттарына, сит илгә ял итергә барғанда, яңы тәьҫораттар алыу тураһында ғына түгел, сәләмәтлегегеҙгә зыян килтермәү тураһында ла уйланығыҙ. Сөнки йыш ҡына ялдан һуң, ғәҙәттә, һаулығыңды нығытыу өсөн ваҡытыңды, аҡсаңды сарыф итергә тура килә. Ял осороноң ниндәй ләззәттәре һаулығыбыҙға зыян килтереүе бар, әйҙәгеҙ, шуны бергәләшеп асыҡлап ҡарайыҡ.**

#### Күп ашау

Тәүге ял көндәрендә үк күптәр ашҡаҙан ауырыуын кисерә. Бер тапҡыр артыҡ ашау ҙа ашҡаҙан һәм бауыр өсөн стресс булыуы бар. Ә йыш ҡына буккәнсе ашаныу матдәләр алмашыныуы процесын боҙа, тип иҫәпләнә.

Курорт ашының икенсе ҡурҡынысы - таныш булмаған ризыҡҡа ҡарата аллергик реакция килеп тыуыуы мөмкин. Алдан аллергия менән яфаланмаған ял итеүсе лә экзотик аш-һыу менән күп туҡланып, ауырып китеүе ихтимал. Был күнелһеҙ хәлгә тарымау өсөн көндәлек туҡланыу рационығыҙға таныш булмаған аҙыҡтарҙы йәйлап һәм аҙлап ҡына индерегеҙ.

#### Спорт һәм күңел асыу

Оҙон алыҫлыҡҡа йүгереү, пляж волейболын йыш уйнау ҡан баҫымы күтәрелеүгә, йөрәк сирҙәре менән ауырып китеүгә сәбәп булыуы бар. Шуның өсөн тәүге ял көндәрегеҙҙә саф һауала ашыҡмай ғына йәйәү йөрөү, дингеҙҙә йөҙөүҙән башлағыҙ.

Экстремаль спорт төрҙәре лә сәләмәтлегегеҙгә зыян килтереүе мөмкин. Был зыян йәрәхәт алыу ҡурҡынысында ғына түгел. Экстремаль спорт төрө менән шөғөлләнгәндә ҡанға адреналин күп бүленеп сыға, ул ҡан баҫымын күтәрә һәм йөрәк тибеше ритмының боҙолоуына килтереүе бар. Шулай уҡ экстрим ҡандағы шәкәр кимәлен күтәреүе ихтимал. "Америка тауы", төрлө һикергестәр шәкәр ауырыуын "уятыуы" мөмкин. Шунлыҡтан был спорт төрҙәре менән артыҡ мауыҡмау хәйерле.

#### Ҡояшта күп ҡыҙыныу

Ҡояшта артыҡ күп ҡыҙыныу тирегә ҙур зыян килтерә. Бынан тыш, ҡояш нурҙары аҫтында оҙаҡ ятыуҙан организм ныҡ ҡыҙа, был осраҡта кешегә аңын юғалтыу һәм хатта үлем ҡурҡынысы янай. Айырыуса үҫмерҙәргә, ололарға, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән ауырыған, тулы һәм алкоголле эсемлектәрҙе күп ҡулланған кешеләргә ҡояш эҫеһе тиҙ тейә. Эҫе һуғыуҙың төүге билдәләре: баш ауырыу, хәлһеҙлек, йоҡо килеү, йөрәк болғаныу. Ошо билдәләрҙе һиҙеү менән күләгәгә күсергә кәрәк. Шулай уҡ 11 һәм 16 сәғәт араһында ҡояш нурҙарынан һаҡланығыҙ, һыуҙа йөҙгәндә лә, ҡыҙынған ваҡытта ла башығыҙға кейергә онотмағыҙ.

#### Оҙаҡ йоҡо туйҙырыу

Ял көндәрендә йоҡо туйҙырыу яҡшы. Әммә бөтә 28 көндә лә төшкә тиклем йоҡлап ятырға кәрәкмәҫ, был осраҡта йоҡоноң файҙаһынан зыяны күберәк булыуы ихтимал. Испан ғалимдары үткәргән тикшереүҙәр барышында йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары, шәкәр сире һәм ҡан баҫымы күтәрелеүе менән туғыҙ сәғәттән артыҡ йоҡлау араһында туранан- тура бәйләнеш барлығы асыҡланған. Ә ҡайһы бер белгестәр оҙаҡ йоҡлау ғәҙәте хатта аҡыл кимәле кәмеүгә килтерә тип тә иҫәпләй.

*✓ Кеше үҙенә яҙғанды күрә, быға хатта Хоҙай үҙе лә ҡамасаулыҡ итә алмай. Шуға ла мин үҙ яҙғанымды тыныс кисерәм. Миңә бирелгән яҙмыш башҡа бирәүгә китмәйәсәк. (Боронғо һинд аҡылы).*



АТЫҢ КЕМ?

# ИСЛАМ ИСЕМЕН ҺАЙЛАНЫҠ...

**Һәр сабыйҙың матур, лайыҡлы исемгә хоҡуғы бар. Ғаиләлә бала тыуғандан һуң ата-әсә иң беренсе уға матур ҙа, мәғәнәле лә исем ҡушыу тураһында ҡайғыртырға тейеш, югиһә, исем баланың киләсәгенә тәьсир итеүе ихтимал. Шуның менән бергә ата-әсә үҙенең мөһим бер бурысын да үтәйҙер.**

Баш ҡалабыҙҙа йәшәүсе Рәзинә менән Айрат Шәриповтар ҙа тәүге сабыйҙарына исемдәрҙең иң матурҙарының береһен һайларға тырыша.

- Сабыйыбыҙ әле донъяға килмәҫ борон уҡ беҙ иптәшем менән унын буласаҡ исеме тураһында уйлана башланыҡ, - тип һөйләй бәхетле әсә Рәзинә Шәрипова. - Интернет селтәрҙәренән мосолман исемдәрен ҡарағанда икебеҙ ҙә Ислам исемендә туҡтап ҡалдыҡ. Беҙҙең өсөн исемдең һирәк осраған, рус телендә лә, башҡорт телендә лә матур яңғыраған боронғо булыуы мөһим ине. Ислам исеме Аллаһы Тәғәләгә тоғро, Уға ғибәҙәт ҡылыусы, тигәнде аңлата. Әле улыбыҙ шуҡ, сос, тиктормаҫ малай булып үҫеп килә, гармун көйөнә бейергә ярата, беҙҙең әйткән һүҙҙәрҙе отоп алып ҡына тора. Олатаһының доғалар уҡығанын, ашап бөткәндән һуң доға ҡылғанын ихласлап тыңлай, хәрәкәттәрен ҡабатлай, үҙенсә әпәр итеп ҡуя. Киләсәктә илебеҙгә һәм үҙебеҙгә терәк-таяныс булырҙай аҡыллы, саф, изге юлдан йөрөүсе, тәүфиҡлы бала булып үҫһен, теләктәребеҙ Аллаһы Тәғәләнең амин тигән сағына тура килһен, тип теләйбеҙ".



**Нәзирә АЙЫТОВА**
**яҙып алды.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

# МУЛ УҢЫШТАН ФАЙҘАЛАНЫП ҠАЛ!



## "Йорт кетчубы"

**2 кг томат, 3 болгар боросы, йәшел тәмләткестәр, шулай уҡ 0,5 стакан шәкәр ҡомо, 1 ҡалаҡ тоҙ, хуш еҫле борос, лавр япрағы, үҫемлек майы, укроп һәм 1 баш һарымһаҡ алына.**
Помидорҙы болгар боросо, йәшел тәмләткестәр менән бергә ит турағыстан үткәргәс, утҡа ҡуябыҙ. Кәстрүлгә шулай уҡ шәкәр ҡомо, тоҙ һәм барлыҡ тәмләткестәрҙе һалабыҙ, үҫемлек майы ҡоябыҙ. 5 минут ҡайнағандан һуң лавр япрағын алабыҙ һәм ҡуйырғансы яй ғына утта тотабыҙ. Бешеүгә 15 минут тирәһе ҡалғас, 1 баш һарымһаҡ төшөрәбеҙ. Һуңынан кәстрүлдән укропты, һарымһаҡты алабыҙ һәм стерилләнгән банкаларға ҡойоп ябабыҙ.

## Ҡабаҡ-алма повидлоһы

Берәр килограмм ҡабаҡ менән алманы ҡабығынан һәм емештәренән таҙартып, бәләкәй өлөштәргә бүлеп турайһың һәм йомшарғансы 15 минут һыуҙа бешереп алаһың. Унан һуң тишекле сүмес аша үткәреп, 1 балғалаҡ лимон йәки әфлисун ҡабығын ҡушып, ҡуйырғансы ҡайнатаһың. Повидлоны әсе килеш стерилләнгән банкаларға тултырып, өҫтөн ҡапҡастар менән нығытып ҡуяһың.

## Кишерҙән варенье

**1 кг кишер, 1 кг шәкәр ҡомо, 1 лимон, 100 мл һыу.** Кишерҙе һәйбәтләп йыуып, бәләкәй өлөштәргә турайһың. Лимонды ҡабығынан һәм емештәренән таҙартып, ит турағыс аша үткәрәһең. Кишергә шәкәр ҡомо һалып, һыу өҫтәп, лимонды һалып ҡайнатырға ҡуяһың. Ҡайнап сыҡҡас, ҡапҡасын ябып, 40 минут тирәһе талғын ғына утта тотаһың. Әҙер вареньены банкаларға ҡояһың.

## Ҡабаҡтан джем

1 кг ҡабаҡты уртаса ҙурлыҡтағы ҡырғыс аша үткәргәс, шәкәр һалып, 1 сәғәткә ултыртып тораһың. Унан ҡабаҡты ҙур кәстрүлгә күсереп һалып, 1 стакан әфлисун һуты ҡушып, ваҡыты-ваҡыты менән болғап, ҡапҡас аҫтында 1,5 сәғәт ҡайнатаһың. 1 лимондың ҡабығын бәләкәй өлөштәргә бүлеп, лимон һуты ҡушып, ҡабаҡҡа ҡушаһың һәм ҡапҡасын япмайынса һүрән генә утта һыуы буға әйләнеп бөткәнсе тиерлек ҡайнатаһың. 1 ҡап желатинды 2 ҡалаҡ шәкәр ҡомо менән болғап, ҡабаҡ массаһына өҫтәгәс, тағы ла 5-7 минут ҡайнатаһың.

## Әлморон һәм мүк еләгенән ҡайнатма

**Берәр килограмм әлморон һәм мүк еләге, 2 кг шәкәр ҡомо кәрәк.** Әлморонды таҙартып, йыуып, турағас, мүк еләге ҡушаһың. Һыу менән шәкәр ҡомонан сироп ҡайнатып, әсе көйөнсә емештәр өҫтөнә ҡояһың. 3 сәғәттән һуң талғын ғына утта ҡайнатып алаһың һәм банкаларға ябаһың.

## Лимон джемы

2 кг лимонды йыуғас, ҡабығынан таҙаламайынса бер тигеҙ киҫәктәргә турап, кәстрүлгә һалаһың. Лимон өҫтөнә ҡайнап һыуыған һыу ҡойоп, бер тәүлеккә ултыртып ҡуяһың. Бер тәүлек үткәс, һыуын түгеп, янынан ярты литр һыу ҡойоп, ярты сәғәт тирәһе әкрен генә утта ҡайнатаһың. Икенсе кәстрүлгә 1/4 өлөш һыуға 2 кг шәкәр ҡомо һалып, шәкәр иҙелгәнсе шәп утта ҡайнатаһың. Ҡайнап сыҡҡас, сироп менән лимонды бергә ҡушып, тағы ла 1 сәғәт тирәһе утта тотаһың. Ҡайнатманы ит турағыс аша үткәргәс, корица йәки ваниль өҫтәп, банкаларға ябаһың.

## Ҡайнатманан бәлеш

**1 стакан ниндәй булһа ла ҡайнатма, 1 балғалаҡ сода, 1 стакан кефир, 0,5 - 1 стакан шәкәр ҡомо, 2 йомортҡа, 2 - 2,5 стакан он.**
Бөтә ингредиенттарҙы бергә ҡушып болғайһың һәм 180 градуста 45-50 минут бешереп алаһың.

## Еләктән һут

3 кг еләкте һалҡын һыуҙа йыуып, алдан әҙерләнгән банкыларға һалырға. 1 литр һыуға 600 грамм шәкәр ҡомо һалып ҡайнатаһың. Әҙер сиропты еләк өҫтөнә ҡойоп, ҡапҡастар менән ябып, 3 минут тирәһе стерилләйһең.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӘЖӘЛ КИЛҺӘ...

## аҡыл ҡасыр

Яҡшы күргән дуҫыңдың йомошон килгәс тә һора, яман күргән дуҫыңдың йомошон киткәндә һора.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һәр ваҡыт дөрөҫтө һөйләһәң... һиңә берәү ҙә ышанмаҫ.

**(Эшли Бриллиант).**

Алла барыһын да һаҡлай, бигерәк тә тәүбә һәм һөйөү һүҙен ул үҙ тауышылай ҡабул итә.

**(Иосиф Бродский).**

Һөжүмгә һөжүм менән яуап бирмәгәндән һаҡлан: ул бер ваҡытта ла һине лә ғәфү итмәйәсәк, үҙ-үҙенде ғәфү итергә лә бирмәйәсәк.

**(Бернард Шоу).**

Киң күңелле булам тип, үҙ урыныңды башҡаға бирергәме? Был бит уңышһыҙ кешенең девизы.

**(Айрис Мердок).**

Көнөңдө йылмайыу менән башла, йылмайыу менән тамамла.

**(У. Филдс).**

Кеше үҙенә яҙғанды күрә, быға хатта Хоҙай үҙе лә ҡамасаулыҡ итә алмай. Шуға ла мин үҙ яҙғанымды тыныс кисерәм. Миңә бирелгән яҙмыш башҡа берәүгә китмәйәсәк.

**(Боронғо һинд аҡылы).**

Бәләкәй ҡайғыны - һөйләнә-һөйләнә, олоһон өндәшмәй үткәрәһең.

**(Кесе Сенека).**

**Шулай итеп, риүәйәт: "Балсыҡтан эшләнгән бәләкәй һыу көршәге өҫтәлдә ултыра. Бүлмәнең бер мөйөшөндәге карауатта ауырыу ята. Ул бик ныҡ сарсаған. "Һыу, һыу..." тигән өн сығарып-сығарып ала, ләкин уны берәү ҙә ишетмәй, өйҙәгеләр ҡайҙалыр киткән. Ауырыуҙың ялбарыуы шул тиклем ҡыҙғаныс була, хатта көршәк тә тетрәнә. Ул кешегә ярҙам итергә теләп, ныҡ итеп көсәнә һәм мөмкин булмағанды эшләй: ауырыу янына, тап уның ҡулы эргәһенә шыуып барып туҡтай. Ауырыу күҙҙәрен аса һәм көршәкте күрә. Бөтөн көсөн йыйып, көршәкте күтәрә һәм уны һыуһауҙан ярылған ирендәренә терәй. Шунда ғына көршәк эсендә һыу булмағанын аңлай. Ауырыу һуңғы көсөн көршәкте мөйөшкә бәреп ватыуға исраф итә... Һығымтаһы шул: көҙөреңдә белмәгәндәргә яраҡлашып, уларға ярҙам итергә тырышып, юҡҡа сығыуҙан һаҡлан. Кемдер һиңә ярҙам итергә теләп тә, ярҙамы килеп сыҡмаһа, уның тырышлығын лайыҡлы баһала".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 29 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5203
Заказ 2968